ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

10-16 май (һабанай) 2024

№18 (1111)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Ҡара көс менән аҡтың...**

мәңгелек алышы һалдат иҫендә



2-3

**"Батырҙарын иҫкә алғанда..."**



8-9

**Мәңгелек рейд**

(Героик поэма)



11

**Ҡурайсылар ҡурай, ай, уйнамаҫ,**

Башҡорт ҡурайҙары булмаһа...



12-13


@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*"Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы 2024 йылдың икенсе яртыһы өсөн 897 һум 06 тингә баҫмабыҙға яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, матур йөкмәтке менән танһыҡтарығыҙҙы ҡандырырға тырышырбыҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ.*
*Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!*

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

### ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ?

## Һеҙҙең ғаиләләге ил һаҡсылары, яугир атайҙар һәм уландар тураһында һөйлә әле...

***Әхәт СӘЙФУЛЛИН, хеҙмәт ветераны, Өфө районы Яңы Булгаков ҡасабаһы:*** Бөйөк Еңеү көнө иң ҙур байрамдарыбыҙҙың береһе, уны мин һәр ваҡыт ҙур тулҡынланыу менән көтөп алам. Һуңғы йылдарҙа, ковид эпидемияһы осорон иҫәпкә алмағанда, Еңеү көнөндә "Үлемһеҙ полк" тантанаһын ойоштороу айырыуса рухты күтәреүсе ҡеүәтле сараға әйләнде. Быйыл беҙҙең ғаилә өсөн Еңеү көнө шулай уҡ үҙенсәлекле һәм ҡыуаныслы булмаҡсы, сөнки Махсус хәрби операцияла Салауат Юлаев исемендәге батальонда ҡатнашыусы улыбыҙ Урал ялға ҡайтасаҡ, тип көтәбеҙ, Алла бирһә. Тап 9 май уның тыуған көнө. Ул хәҙер МХО башланғандан алып Рәсәй Ҡоралл Көстәре сафында илебеҙ азатлығы өсөн көрәшә. Үҙе теләп китте. Унан алда әрме сафтарында хеҙмәт иткәнендә ефрейтор званиеһы менән ҡайтҡайны. Тәүҙә "Урал" автомобиле йөрөтә ине, МХО-ла хәрби әҙерлек үткәндән һуң бронетранспортерҙа тоҫҡаусы-оператор булып хеҙмәт итә. Бик яуаплы хәрби бурыс үтәй, сөнки һөжүм барышының уңышы тап уның мәргәнлеге һәм грамоталылығына бәйле. Тоҫҡаусы-оператор тоҫҡау һәм күҙәтеү приборҙарын, танкыларға ҡаршы идара ителеүсе ракеталарҙы атыу ҡағиҙәләрен биш бармағылай белергә тейеш. Мәргән ут асыу өсөн сәпкә тиклем булған араны хатаһыҙ иҫәпләп сығарыу һәм сәп нөктәһен һайлау, тоҫҡау шкалаһын көйләү һәм орудиены сәпкә тоҫҡап, атыу ҙа уның хәрби бурысына инә. Улыбыҙҙы маҡтап, командованиенан рәхмәт хаттары килеп тора, хеҙмәттәштәре лә уны ихтирам итә. Былтыр 9 майҙа Росгвардия бойороғо менән Урал "Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыға" миҙалы менән наградланды.



Улыбыҙ менән ғорурланабыҙ, сөнки хәрби хеҙмәт йылдарында уның ошоғаса әллә ни билдәле булмаған сифаттары асылды: ул бронетранспортер менән идара итеүгә һәм тоҫҡаусы-оператор хәрби вазифаһын үтәүгә бик тиҙ төшөнөп, ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә үҙенең оҫталығын, тәүәккәллеген, ҡыйыулығын танытып өлгөрҙө, хәрби хеҙмәткә барымы барлығын күрһәтте. Элек кинофильмдарҙа ғына күреп, дошманға ут яуҙырыусы ҡеүәтле хәрби машинаны йөрөтөргә хыялланған Урал моразына иреште. Ләкин шуныһы йәл: уның был хеҙмәте тыныс шарттарҙа үтһен ине лә бит, ә быға һуғыштың сәбәпсе булыуы бик тә йөрәгебеҙҙе өтә һәм әсәһе, туғандары менән беҙҙе көн-төн борсолорға, туҡтауһыҙ уйланып, хәүефләнеп йәшәргә мәжбүр итә. Шуға ла беҙ тиҙерәк һуғыштар туҡтап, һәр беребеҙ түҙемһеҙлек менән көткән тыныслыҡ килһен ине еребеҙгә, тип теләйбеҙ. Иҫән-һау ғына еңеү менән ҡайтырға насип итһен һеҙгә, уландар!

### ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## БЕР ГЕНӘ УҠЫУ ЙОРТОНДА...

**2024 йылдың 1 майынан маҡсатлы йүнәлтмә менән юғары уҡыу йорттарына ҡабул итеү өсөн яңы ҡағиҙәләр ғәмәлгә индерелде. Йәғни, хәҙер бер генә юғары уҡыу йортона уҡырға инеп, бер генә заказсыны һайларға мөмкин.**

Белгесте уҡытыу тураһында килешеүҙе заказсы, абитуриент һәм университет араһында төҙөргә була, шул уҡ ваҡытта уҡыу йорто йылына ике тапҡыр заказсыға студенттың өлгәшеүе тураһында мәғлүмәт тапшырырға бурыслы. Уҡыуҙы тамамлағандан һуң компанияла йәки ойошмала 5 йыл эшләү мотлаҡ (кәмендә 3 йыл).

Билдәләнеүенсә, үҙгәрештәр заказсыны эҙләү ысулына ла ҡағыла. "Рәсәйҙә эш" берҙәм платформаһы эш биреүселәрҙе, һөнәри уҡыу йорттарын һәм студенттарҙы берләштерәсәк. Бар мәғлүмәтте Башҡортостан вуздарының ҡабул итеү комиссиялары сайттарында табырға була. Һорауҙарҙы Рәсәй фән һәм юғары белем биреү министрлығының ҡыҙыу линия телефоны буйынса ла бирергә мөмкин: 8 (800) 301-44-55. Бынан алдараҡ республикала 2024 йылда студенттарға маҡсатлы йүнәлтмә буйынса белем алыу өсөн квоталар раҫланғайны.

### АФАРИН!

## ТАҒЫ АЛТЫН МИҘАЛ!

**Ҡытайҙың Шэньчжэнь ҡалаһында 22-26 апрелдә уҙғарылған Халыҡ-ара Менделеев олимпиадаһында беҙҙең Вадим Харисов тағы алтын миҙал яуланы!**



Ҡытайҙа үткән был бәйгелә 26 илдән ҡатнашыусылар йыйылды. Улар өс этаптан торған һынауҙар үтте: теорияға арналған ике турҙа ҡатмарлы мәсьәләләр систе һәм тәжрибәләр турында лабораторияла эшләү оҫталыҡтарын күрһәтте. Ярыш һөҙөмтәләре буйынса Рәсәй командаһы юғары күрһәткестәргә өлгәште: беҙҙең иҫәптә 5 алтын һәм 5 көмөш миҙал. Республика инженер лицей-интернаты нигеҙендәге Өфө дәүләт нефть техник университеты предуниверсарийының 11-се класс уҡыусыһы Вадим Харисов алтын миҙалға лайыҡ булды. Олимпиадалар хәрәкәтенең остаздар ассоциацияһында 4 йыл шөғөлләнгән осорҙа Вадим Харисов мәктәп уҡыусыларының химия буйынса Бөтә Рәсәй олимпиадаһында өс тапҡыр еңеү яуланы, Халыҡ-ара Менделеев һәм Химия буйынса Бөтә донъя олимпиадаларында алтын миҙалға лайыҡ булды. Сираттағы еңеүе менән ҡотлайбыҙ Вадимды!

12+

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# ҠАРА КӨС МЕНӘН АҠТЫҢ...

## мәңгелек алышы һалдат иңендә

**Ошо көндәрҙә Сибай халҡы Махсус хәрби операция мәлендә һәләк булған Таштимеров Эдуард Нурәхмәт улын һуңғы юлға оҙатты. Мәрхүм менән хушлашырға теләүселәр эркелеп, ер ябып килгән, әллә ярты ҡала халҡы йыйылған инде. Ололар ҙа, урта йәштәгеләр ҙә күренә, үсмерҙәр, йәштәр ҙә күп.**

Яу барған ергә юлланғансы, тәрлә урындарҙы, яуаплы вазифаларҙы биләгән Эдуардты яҡындан белмәһәм, аралашмаһам да, осрашҡанда ҡул бирел күрешеп, иҫәнләшеп йөрөй торғайныҡ. Хәйер, уны ҡасандыр күреп-белеү ҙә мөһим түгел инде хәҙер, ул батыр ил улы булараҡ, бөгөндән онотолмаҫлыҡ кимәлдә халыҡ хәтеренә уйылды, исемшәрифе мәңгелеккә ҡаһармандар исемлегенә яҙылды. Бер осор уның бер туған ҡустыһы Рөстәм беҙҙең гәзиттә водитель булып эшләп тә алғайны, шуға күрә Баймаҡ районы Байыш ауылынан үтешләй, Эдуард менән Рөстәмдәр тыуған, буй еткергән йортта бер нисә тапҡыр туҡталып, әсәләре Бибикамалдың ҡайнар сәйҙәрен эсеп, тәмле ризыҡтарын ейеп, аталары Нурәхмәт менән аралашып, әңгәмәләшеп ултырғаным да булды. Йәмле йорт, күркәм, төҙөк хужалыҡ, татыу ғаилә, ҡотло мөхит, тыйнаҡ, итәғәтле, эшсән, балалары өсөн өҙөлөп торған кешеләр ине. Ине, тиеүем урынһыҙ, шөкөр, улар бөгөн дә иҫән-һауҙар, бынан бер нисә йыл элек Сибайға, улдарының янына күсеп килеп төпләнделәр.

Эдуард Таштимеров 2022 йылдың көҙөндә өлөшләтә мобилизацияға саҡырылып, тыуған ил сиктәрен ҡурсалаусылар сафына баҫа. Шул осорҙа беҙ ҡатыным менән көн һайын кис алыҫ, хәүефле сәфәргә юлланғандарҙы оҙатырға тип военкомат янына даими барып әйләнеүҙе ғәҙәт итеп алғайныҡ. Урамды буйлатып теҙелгән автобустар лыҡа тулы, Хәйбулла районынан да килгәндәр. Сибай филармонияһынан ғына 16 кеше. "Ағай, яҡыныҙҙы оҙатаһығыҙмы әллә?" тип һораусылар ҙа табылды. "Уларҙың бөтәһе лә беҙҙең өсөн ҡәҙерлеләр, яҡындар!" тип яуаплағайным. Егеттәр үҙҙәрен тәүәккәл, һынмаҫ рухлы итеп тоталар, филармонияның билдәле йырсыһы Әлфир Замановтың "Урал"ды яңғыратыуы онотолмаҫлыҡ тамаша булды, ә инде ҡалғандарҙың дәррәү, тирә-яҡты шаулатып "Шайморатов генерал"ды йырлауы, Башҡортостанды ғына түгел, ҡыйыулыҡ билдәһе, яу ораны булып тотош Рәсәй киңлектәрен урап сыҡты.

Шуларҙың араһында Эдуард та булғандыр, һис шикһеҙ, булғандыр, ҡыҙғаныска ҡаршы, уны хәйерле юл теләп оҙатып ҡалырға тура килмәне. Ул бер нисә тапҡыр ҡыҫҡа ваҡытлы ялға ла ҡайтып әйләнгән, һуңынан, 2024 йылдың 10 апрелендә махсус операция барған ерҙең алғы һыҙығында батырҙарса һәләк булған. Рөстәмдең шылтыратып әйткән ҡайғылы хәбәренә беҙ, мөхәрририәт хеҙмәткәрҙәре, башта ышанырға теләмәнек, яңылышлыҡ, аңлашмаусанлыҡ һымаҡ та ҡабул иттек. Ни хәл итәһең, аҡ өмөттәр ҡыҫыр теләккә әүерелеп аҡланманы. Рәсәй Президенты В.В. Путиндың, республика башлығы Р.Ф. Хәбировтың Указдарына ярашлы, үлгәндән һуң ул "Ҡаһарманлыҡ ордены"на, "Шайморатов" миҙалына лайыҡ булды. Был юғары наградалар мәңгегә һаҡлау өсөн Эдуардтың ҡатыны Ритаға тапшырылды. Хушлашыу мәлендә Эдуард Нурәхмәт улы тураһында бик урынлы, йөрәктән сыҡҡан йылы һүҙҙәр әйтелде, уның эшсәнлеге, тырышлығы, әйткән һүҙенә һәр саҡ тоғро ҡалыуы һыҙыҡ өҫтөнә алынды, ғаиләһенең ныҡлы, ышаныслы терәге, ҡатынына хәстәрлекле ир, ҡыҙҙары Элизаға, улдары Нурисламға яраҡтан атай булыуы хаҡлы әйтелде. Сығыштар мәлендә Эдуардтың теле менән һөйләнгән бер ваҡиға һис ҡасан онотолмаҫлыҡ. "Ҡыҙыу һуғыш бара, алғы һыҙыҡта, беҙҙән йыраҡ түгел, һәләк булған украин һалдаттары ята. Хаҡһыҙ онотолғандар, ташландыҡ тауарға әйләнгәндәр хаҡында ҡаршы яҡтан ҡайғыртыусылар ҙа юҡ, һәр хәлдә, үҙҙәре яғына нисек сығарырға теләк белдермәйҙәр, шуға мин бер нисә көн арауығында алғы һыҙыҡҡа шыуышып тиерлек барып, алыштар тынған арала тегеләрҙе ерләп йөрөнөм. Улар ҙа бит кеше, улар ҙа тейешенсә ерләнергә хаҡлы әҙәм балалары..." Бына нисек! Эдуард саманан тыш ҡырҡыу мәлдә, ғүмерена ҡурҡыныс янағанда ла, үҙенең иманлы йөҙөн юғалтмаған, һуңғы һулышына саҡлы ысын Кеше булып ҡалған!

Һөйләнгән ошо тәү ҡарашҡа ябай ғына ваҡиға мине тәрән кисерештәргә һалды, шуға Эдуардтың ятҡан гүрҙәре яҡты, мәңгелек йоҡоһоноң тыныс булыуын теләп, артабан хәтеремдә һаҡланған хәтирәләргә, булмышымда уйылған уйҙарыма күсәм...

Беҙҙең ауылда ла бер һуғыш ветераны йәшәне, пинжәгенең түшен тултырып өсөнсө дәрәжә Дан, икенсе дәрәжә "Ватан Һуғышы", Ҡыҙыл Йондоҙ ордендары, бихисап миҙалдар таҡҡан батыр яугир ине ул. Бер саҡ мәктәпкә, класс сәғәтенә килгәнендә ғибрәтле һуғыш тарихын да һөйләгәйне: "Бер йәш кенә немец һалдаты пленға эләкте. Ҡарап тороуға бала ғына инде, ауылда тороп ҡалған минең ҡустымдан өлкән түгел. Һуғыш аҙағында Гитлер тоталь мобилизация иғлан иткән, тип ишетелгәйне, шуның сарпыуына эләккәндер инде был бисара үсмер. Тегене тылға оҙатырҙан алда бер ташландыҡ өйҙә биклəп тоттолар. Шул баланы үҙемдең ауыҙымдан өҙөп ашата башланым, һалҡын яҙ башы ҡышланлыҡтан, өшөмәһен, тип, өҫтөнә фуфайка, аяғына итектәр табып килтерҙем. Ошо хәстәремде күргән башҡа һалдаттар мине ғәйепләмәне, нишләп дошманды ҡайғыртаһың, тип битәрләмәне..."

Совет һалдаты, Рәсәй һалдаты, быуындар күсәгилешлеге, миһырбанлыҡ, имандың, кешелек сифаттарының һаҡланыуы. Бына ошондай кешеләр ҡыҙғаныуға, йәлләүгә түгел, юғары рухлы ысын кеше булып ҡалырға лайыҡтар, ошондайҙар азатлыҡ килтерә, ошондайҙар кешелек донъяһын ҡотҡара һәм ерҙе ҡапларға яҫҡынған һоро яуызлыҡтан аралай, һаҡлай. Улар ҡайҙа ла, теләһә ниндәй хәлдә лә, торошта ла батыр, миһырбанлы ир булып ҡала беләләр. Ошондайҙар яҡтылыҡ килтерергә, нур өлөшергә һәләтле лә инде. Шул уҡ ваҡытта, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында гене-

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ?

## Һеҙҙең ғаиләләге ил һаҡсылары, яугир атайҙар һәм улдар тураһында һөйлә әле...

***Разия АРЫҪЛАНОВА, Мәләүез ҡалаһы:*** Мин үҙем "Һуғыш осоро балалары" категорияһына ҡараған быуын вәкилемен. Бөйөк Ватан һуғышының иң ҡыҙған ваҡытында, Ҡыҙыл Армияның бөтә ҡеүәте менән алышҡан ваҡытында донъяға килгәнмен. Атайым - фронтовик. Һуғыш башланған йылды уҡ үҙе теләп фронтҡа киткән. Тиҙ генә дошманды еңербеҙ ҙә ҡайтырбыҙ, тип уйлаған ул. Тик был дәһшәтле һуғыш оҙаҡҡа, дүрт йылға һуҙыла. 1942 йылда ҡаты яраланып, госпиталгә эләгә атайым. Яраһы бер аҙ уңалыуы менән янынан сафҡа баҫырға уйлай, әммә уның теләген кире ҡағалар. Тыуған ауылына әйләнеп ҡайтыуҙың икенсе көнөнә үк колхозға, үҙенең яраҡлан эше - ат ҡараусы булып эшкә сыға. Шулай итеп, хаҡлы ялға сыҡҡансы дөйөм хужалыҡ аттарын ҡараны ул. Кеше яраҡтан, тормош яраҡтан, ат йәнле ине. Уны белгәндәр әле булһа хөрмәт менән иҫкә алалар. 1939 йылда беренсе тапҡыр Мәскәүҙә үткән Бөтә Рәсәй халыҡ ҡаҙаныштары күргәҙмәһендә лә ҡатнаша ул.

Тик уның һуғыш йылдары тураһында һөйләгәне иҫтә ҡалмаған. Балалыҡ, йәшлек менән үҙем дә һорашмағанмын. Был һуғышҡа, Бөйөк Еңеүгә хәҙерге һымаҡ бик иғтибар ҙа булманы шикелле ул. Һалдаттар, ветерандар ҡартая башлағас ҡына хөрмәт күрһәтә башланылар һымаҡ хәтерҙә ҡалған. Шулай ҙа фронтовик ҡыҙы булараҡ, үҙемдә ғорур тотоп йөрөгәнем хәтерҙә. Әле лә Еңеү һалдаты ҡыҙы булыуым менән ғорурланам. Ике улым да хеҙмәт итте, үҙҙәрен алдан уҡ армияға әҙерләне.

Әлеге ваҡытта Махсус хәрби операцияла ейәнем һуғыша. Аҙ ғына хәбәр булмаһа, меңәрләгән әсәләр, өләсәйҙәр, ҡатындар кеүек, ут йотоп ултырам. Шылтыратып, хәбәрләшеп булмаған ваҡыттар ҙа булғанын аңлаһаҡ та, һуғыш бит. Күңелгә бойороҡ бирел булмай. Әммә барма, һуғышма, тип әйтеп тә булмай. Миллионлаған ҡорбан килтереп еңеү яулаған атайҙарыбыҙҙың рухына хыянат итеү була бит. Минең ейәнем, һинең улың бармаһа, кем бара һуң фашизмды юҡ итергә? Бөтә илебеҙҙе баҫып алып баралар бит...

Бармай ҡасып ҡалған егеттәрҙе лә хөкөм итергә йыйынмайым, әлбиттә. Уларҙың шулай йомшаҡ, рухһыҙ булып үҫеүендә улар ғәйепле түгел. Бына яңыраҡ ҡына бер кино ҡараным. Унда геройҙар армияны яза һымаҡ, проблеманан ҡасыу юлы һымаҡ ҡабул итә. Хәрби хеҙмәтҡә ошолай мөнәсәбәтте рекламалаһалар, тимәк, тиҙҙән унда барырға теләүселәр бөтөнләй булмаҫҡа ла мөмкин. Шуға күрә илһөйәрлек тойғоһон башланғыс кластарҙан ғына түгел, балалар баҡсаһында уҡ тәрбиәләргә кәрәк. Малайҙарҙы "Армияға ебәрәсәкмен йәки армияға барасаҡһың", тип ҡурҡытып түгел, ә "Һин - буласаҡ ил һаҡсыһы", тип үҫтереү мөһим.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Рәсәй Президенты Владимир Путиндың инаугурацияһы 7 майҙа Мәскәү ваҡыты буйынса көндөҙгө сәғәт 12-лә башланды. Был турала ТАСС хәбәр итте. Дәүләт башлығының матбуғат секретары Дмитрий Песков белдереүенсә, ошо сара алдынан Кремлдә эшлекле кәйеф мөхите хөкөм һөргән. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Рәсәй Үҙәк һайлау комиссияһы мәғлүмәттәре буйынса, һайлауҙа Путин 87,28 процент тауыш йыйған. Башҡортостанда уны халыҡтың 90,96 проценты хуплаған.

✓Башҡортостанда илебеҙҙең Бөйөк Ватан һуғышында Еңеү символын ҡулланыуҙы регламентлаған закондар ғәмәлдә. Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, Башҡортостан Республикаһының Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында кодексында ошо законды боҙған өсөн яуаплылыҡ ҡаралған: вазифалы кешеләргә штраф - 10 меңдән 15 мең һумғаса, юридик ойошмаларға иһә 20-25 мең һум.

✓Өфөлә Еңеү көнөнә ҡарата Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларға бүләктәр тапшырыла. Был хаҡта Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә ҡала башлығы Ратмир Мәүлиев әйтте. Бүләктәр "Лента" сауҙа селтәренә 10 мең һумлыҡ сертификат, электр юрғаны һәм һауа дымландырғыс бар. Уның дөйөм хаҡы 15 мең һум тәшкил итәсәк. Мәр әйтеүенсә, бындай йыйылма 58 кешегә тапшырыла. Еңеү көнө алдынан шулай уҡ 2284 ветеранға Башҡортостан Республикаһы Башлығы, ҡала советы рәйесе һәм Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы исеменән ҡотлау хаттары таратыла.

✓Рәсәй банкы "1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышы геройҙары" һәм "Бөйөк Ватан һуғышында совет халҡының еңеүе" серияһынан иҫтәлекле көмөш тәңкәләр сығарҙы. Ике һумлыҡ аҡса оҫта летчик Борис Сафоновҡа арналған. Һуғыш башында ул дошмандың 20-нән ашыу самолетын бәреп төшөргән. Сафонов беренселәрҙән булып һуғыш йылдарында батырлығы өсөн ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ булған. Өс һумлыҡ тәңкә - "Ҡыҙыл Йондоҙ ордены". Ике тәңкә лә 925 пробалы көмөштән пруф сифаты менән эшләнгән, беренсеһенең ауырлығы - 15,55 грамм, икенсеһенең 31,1 грамм. Һәр береһенең тиражы - 3-әр мең дана.



рал Карбышевтың ҡышҡы селләлә һалҡын һыуҙа ҡойондоролоп, боҙ һәйкәлгә әүерелдерелеүен, миллионлаған кешеләрҙең газ камераларында тонсоҡторолоп, крематорий мейестәрендә яндырылыуҙарын, һәм ошо вәхшилектәрҙең кемдәрҙәндер аяуһыҙ, мәрхәмәтһеҙ ҡулы менән башҡарылыуын һис ҡасан оноторға тейеш түгелбеҙ, түгелбеҙ!

Бына ошондайыраҡ ҡырағай йыртҡыслыҡты иҫбатлаған миҫалдар теҙмәһен әллә күпме килтерергә, дауам итергә мөмкин. Минә бынан бик күп йылдар элек Латвияның баш ҡалаһы Риганан 18 саҡрым йыраҡлыҡта урынлашҡан, Саласпилс тип аталған балалар концлагерын барып күрергә тура килде. Ҡараш инләмәҫ ҡола ялан, фашистар бынан китерҙән алда кисереп булмаҫлыҡ, ғәфү итмәҫлек енәйәт эҙҙәрен йәшерергә теләп, һәммәһенә үрт һалып, яндырып киткәндәр. Яндырып ҡына енәйәт эҙҙәрен юйып, кешелек донъяһына күрһәтелгән яуаплылыҡтан, ҡылынған гонаһтан ҡасып ҡотолоп булмай! Был ерҙә ҡасандыр дар ағастары торған, был урында казармалар урынлашҡан булған, ә был инде крематорий мейесенең урыны, тиғән яҙмалар йәбештерелгән плитәләр генә ҡуйылғайны беҙ ҡараған мәлдә. Бер урында ер ҡуйынына китеп батҡан тәрән яһалма уйым эшләп ҡуйғандар. Унан кескәй баланың леп-леп һуҡҡан йөрәк тибеше һулҡып ишетелә. Бында сәскәләр урынына балалар уйынсыҡтары, тәм-том килтерәләр икән. Беҙ ҙә тәргәктәребеҙҙе әлеге уйым эргәһенә һалдыҡ. Кәнфит төргәктәренән бейек тау хасил булған. Беҙҙең күҙ алдында күстәнәстәребеҙҙе эттергесле трактор ҡайҙалыр эттереп тә алып китте. Цивилизациялы иҫәпләнгән Европалағы тәрбиәһеҙлекте күреп, хайран ҡалдым, ошо мәғәнәһеҙ мәшәҡәтте беҙ киткәс эшләп булмай инеме икән!

Был мемориаль комплекста йәнә музей асҡандар. Стеналарға шул дәүерҙән һаҡланып ҡалған бер нисә фотоһүрәт тә эленгән; бер урында утын әрҙәнәләре рәүешендә балалар мәйеттәренең өйөмө, икенсе урында төп олоно ғына ҡалған, туҙы, ботаҡтары һыҙырып, һындырып ашалған ағас. Уны аслыҡҡа сыҙамаған балалар мөнтәгән, кимергән, мөнйөргән. Һуғыш осоронда концлагерҙа надзиратель булған, әле музей хеҙмәткәре сифатында латыш кешеһе эшләй икән. Экскурсия барышында тегегә һорау бирҙем: "Ни сәбәптән һеҙ ошо балаларҙың ғазаптарын аҙға ғына булһа ла еңеләйтергә тырышманығыҙ?" Теге ир, минең ҡулыма килеп эләкһәң, күрһәтер инем һинә күрмәгәненде, тигәндәй, үсле итеп төбәлде, хатта тәндәрем зымбырҙап китте. Йәшерен-батырын түгел, элек тә көнбайыш илдәре беҙҙе яратманы, хәҙер инде, тотош Европаны фашист ҡоллоғонан әрсәләгән Рәсәйҙе асыҡтан-асыҡ күрә алмайҙар. Бер урынлы һорау тыуа, бөгөн Рәсәй агрессияһы тураһында ялған мәғлүмәт таратып, ирек, бойондороҡһоҙлоҡ хаҡында лаф орған, ҡасандыр уларға азатлыҡ килтергән совет һалдаттарының һәйкәлдәре әлеге мәлдә алып ташланған, емертелгән Балтик буйы илдәрендә, атап әйткәндә, гонаһһыҙ балаларҙың йәнен ҡыйған, фашистарҙың вәхшәтлеген күрһәткән, иҫбат иткән Саласпилс концлагеры, Польша, Германия ерҙәрендәге ошондайыраҡ башҡа концлагерҙарҙың урыны ҡалған, һаҡланған микән? Икеле. Уларҙы күңел асыу урындарына әүерелдереүҙәре бик тә ихтимал. Булмаҫ, тимә!

Тарих төпкөлөн түгел, әйҙәгеҙ, бынан бер нисә йыл элек булып үткән утлы ваҡиғаны, Одессалағы профсоюз йортонда кешеләрҙең терелэй өтөлөүҙәрен хәтергә төшөрәйек. Ҡанһыҙлыҡ та аҙағынаса бөтмәй, ҡасандыр туғандаш иҫәпләнгән Украина ерен ябып, беҙҙең илгә ҡара афәт булып янап, ҡабатлана килә, совет һалдатының кешелек сифаттары, батырлыҡтары, ҡаһарманлыҡтары, тыуған Ватанға бирелгәнлектәре иһә бөгөн дә алғы һыҙыҡтағы Рәсәй һалдатының булмышына, рухына күсеп, уны бөйөк, юғары, үлемһеҙ итә!

Яуызлыҡ һәм яҡшылыҡ, ҡара көс менән аҡтың мәңгелек алышы. Яҡшылыҡтың, игелектең еңеренә, тыныс көндәрҙең килеренә һис ҡасан шикләнергә ярамай, сөнки Ерҙең күсәрен миһырбанлылар, иманлылар, Ватан өсөн йәндәрен фиҙа ҡылғандар әйләндерҙе һәм әйләндерә!

**Хәйҙәр ТАПАҠОВ.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Һеҙҙең ғаиләләге ил һаҡсылары, яугир атайҙар һәм уландар тураһында һөйлә әле...

***Хәйҙәр ХӨСНУЛЛИН, Әбйәлил районы, Байым ауыл биләмәһенең Ветерандар советы рәйесе:*** Беҙҙең Әбйәлил районы Байым ауылы советына ингән ун ауылдан барлығы 519 кеше Бөйөк Ватан һуғышына киткән, шуларҙың 219-ҙы иҫән әйләнеп ҡайта алған. Улар араһында беҙҙең Ғабдин ауылынан 39 ир-егет һуғышта ҡатнашҡан, яугирҙар иҫтәлегенә бөгөн ауылыбыҙҙа обелиск ҡуйылған. Әммә бер йыл эсендә йөҙ кеше һуғышта алған яраларынан теҙәлә алмай, донъя ҡуя. Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарынан Яйҡар ауылынан Ғәбдрәүф Баһауетдинов, Аһылайҙан Сабит Ғәйнуллин, Байымдан Рамаҙан Сөләймәнов иң оҙайлы ғүмерле ветерандарыбыҙ булды, әммә улар ҙа арабыҙҙан китте. Хәҙер Байым ауыл биләмәһендә һуғыш йылы балалары ғына ҡалды, улар араһында Байымдан Мәрйәм Хитабуллина менән Туйыштан Алмабикә Сәйетғәлина - йөҙйәшәрҙәр. Шулай уҡ Ғәлиә Мәхийәнова апай ҙа йөҙгә етеп килә. Ҡалғандары 90-сы тиҫтәне ҡыуған ағай-апайҙар, бик теремек, тормоштоң әсеһен-сөсөһөн татыған быуын кешеләре. Үҙебеҙҙең Ғабдин ауылынан Мәғмүрә апай Хәлилова һәм Ишһылыу инәй Хибәтуллина ла һуғыш осоро балалары. Уларҙың хәтирәләрен, фәһемле һүҙҙәрен йәш быуын да тыңлап, белеп үҫһен тип, даими рәүештә төрлө саралар үткәреп торабыҙ.

Бөйөк Еңеүгә беҙҙең нәҫел, Әбйәлил районы Оло Ғабдин ауылынан Хөснуллиндар ҙа, ҙур өлөш индергән. Атайымдар ғаиләһендә дүрт ул үҫеп, дүртеһе лә ошо һуғышта ҡатнашып, дүртеһе лә тере ҡайта. Иң өлкәндәре Исрафил апа (беҙҙең Әбйәлилдә атай-әсәйҙән өлкән ир туғанға шулай өндәшәләр), ул пехотала хеҙмәт итә, сержант званиеһында 1944 йылдың урталарында ҡайтып килә. Исрафил апа япондарға ҡаршы ла һуғыша, аҙаҡ немец фашистарын тар-мар итеүҙә лә ҡатнаша. Шунан атайым Зиннәт Хөснуллин - ғаиләлә икенсе, ул да япондарға ҡаршы алыштарҙа ҡатнашыуы, Хәсән күле тирәһендәге ҡаты бәрелештәр тураһында һөйләй торғайны, 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһында хеҙмәт итеп, ҡаты яраланып, 1944 йылда кесе лейтенант булып ҡайтып төшә.

Һуғыштан ҡайтҡандарға эшһеҙ ятырға форсат булмай, атайыма ла колхоз рәйесе, аҙаҡ ауыл Советы рәйесе бурыстарын йөкмәтәләр, һунараҡ инде малсылыҡта ла эшләнә. Уның бер туған ике ҡустыһы Фазулла һәм Сибәғәт ағайҙар иһә Бөйөк Ватан һуғышын артиллерия ғәскәрендә үтә, зенитсылар була. Улар икеһе лә был һуғышҡа 1941 йылда алынып, туғыҙ йыл йөрөп ҡайта. Еңеү иглан ителгәс: "Һуғыш тамамланды", - тип кенә хат яҙалар ҙа, шунан һуң дүрт йыл бер хәбәрҙәре лә килмәй. Хатта олатай менән өләсәй: "Кайҙарҙа ғына ятып ҡалдылар икән?" - тип илашып та йөрөгәндәр. Шунан 1949 йылда Сибәғәт ағай барыһын да таң ҡалдырып, ҡайтып төшә, ул Фазулла ла ҡайтыр, тере, тип хәбәр итә. Германияла улар икеһе һирәк-мирәк күрешеп йөрөгән була. Сибәғәт ағай өлкән сержант, ә Фазулла ағай сержант була. Дүртеһенең дә Ҡыҙыл Йондоҙ ордены, төрлө орден-миҙалдары бар ине, ҡыҙғанысҡа күрә, ниндәй батырлыҡтары өсөн бирелгәне менән ҡыҙыҡһынмағанбыҙ. Наградалары һәм фотолары туғандарыбыҙҙа ҡәҙерләп һаҡлана.

Бөгөн инде Украиналағы Махсус хәрби операцияла үҙебеҙҙең уландар ҡатнаша. Бер туған ағайым Ғайдарҙың кесе улы Таһир, ҡустым Ҡадирҙың улы Тәлғәт алғы һыҙыҡтала. Ауылдаштарыбыҙҙың улдары ла илебеҙҙе нацистарҙан һаҡларға китте. Уларҙың имен-һау йөрөп ҡайтыуын көн дә теләп ултырабыҙ. Ғөмүмән, Байым ауыл биләмәһенән утыҙға яҡын йәш ир-егет бөгөн яу ҡырында, кемеһе ҡайтып, кемеһе китеп тора. Ҡыҙғанысҡа күрә, ҡәһәрле һуғышта ғүмерҙәре өҙөлгән, хәбәрһеҙ юғалған йәштәребеҙ ҙә бар. Әбит өлкәндәр гел генә: "Беҙ күрҙек, тик балаларыбыҙ күрмәһен!" - тип теләп ултырҙы.

Беҙҙең Рәсәйгә ситтәр һис кенә лә тыныс тормошта йәшәргә бирмәй шул, бер сәбәбе сығып ҡына тора. Сөнки халҡыбыҙ ҙа шәп, ҡаҙылма байлыҡтар ҙа, газ да, башҡаһы ла бар. Ярай әле илебеҙ көслө, етәкселәр нык тора, тип ҡыуанам шуға. Бирешмәйбеҙ. Тик был Махсус хәрби операция ла тиҙерәк осланһын, ә киләсәк быуындар аяҙ күк аҫтында, хеҙмәт баһаһын белеп, көслө һәм тарҡалмаҫ илдә тыныс йәшәһен.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республика "Экология" милли проектының "Таҙа ил" федераль проекты сиктәрендә сараларҙы тормошҡа ашырыу буйынса лидер төбәктәр иҫәбенә инде. Илдең тәбиғәт ресурстары һәм экология министры урынбаҫары Морат Кәримов билдәләүенсә, Башҡортостанда 2023 йылда Баймаҡ, Благовещен, Дәүләкән, Сибай һәм Стәрлетамаҡ ҡалалары ситендә урынлашҡан 5 рөхсәтһеҙ ҡаты коммуналь ҡалдыҡтар сүплеге бөтөрөлгән. Быйыл Күмертау ҡалаһындағы сүплекте бөтөрөү эштәре тамамланырға тейеш. Һөҙөмтәлә 468 мең кешенең йәшәү сифаты яҡшырыр тип көтөлә.

✓Баймаҡтың Кәкреауыл биҫтәһе халҡы "Урал" мотоциклын ремонтлап, махсус хәрби операция үткәреү зонаһына оҙатты. Ә Билал ауыл советы халҡы мобилизацияланған яҡташына "Альфа" мопедын әҙерләне. Шулай уҡ район фермерҙары һәм Баймаҡ коммуналь хужалығы яу ялаһына ике УАЗ автомобилен, күсейҙәр "ГАЗель" машинаһын, ике еврокуб, окоп шәмдәре һәм башҡа әйберҙәр биреп ебәрҙе, тип хәбәр итә "Баймаҡ һәм Башҡортостан яңылыҡтары" телеграм-каналы.

✓Башҡортостандың ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова Башҡортостан юлдаш телеканалының "Честно говоря" тапшырыуында бөгөн республика эш биреүселәренең ниндәй белгестәргә мохтаж булыуы хаҡында һөйләне. "Хәҙер предприятиеларға һәм ойошмаларға төрлө категориялы 4,5 мең водитель һәм 3,5 мең слесарь, шулай уҡ ЧПУ станоктары операторҙары, эшселәр һәм инженерҙар талап ителә", - тине ведомство етәксеһе.

✓Башҡортостандың перинаталь үҙәге Рәсәйҙә иң яҡшыларҙың береһе тип танылды. Республика клиник перинаталь үҙәгенең Дисциплинар-ара репродуктив медицина белгестәре ассоциацияһы версияһы буйынса "Волга буйы федераль округының акушер-гинекология профилендәге иң яҡшы медицина ойошмаһы-2023" исеменә конкурста "III кимәлдәге иң яҡшы акушерлыҡ стационары" номинацияһында беренсе урын яулауы билдәле булды. Номинанттарҙы 18 апрелдә "Рәсәйҙең репродуктив потенциалы: Ҡаҙан уҡыуҙары" IX Дөйөм Рәсәй конгресы барышында бүләкләнеләр.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Һеҙҙең ғаиләләге ил һаҡсылары, яугир атайҙар һәм уландар тураһында һөйлә әле...

*Нурзиә ӘБДРӘШИТОВА, Башҡортостандың халыҡ артисы:* Беҙҙең ғаиләбеҙ Әбдрәшитовтар һәм Кейекбаевтар ғаиләләренән барлыҡҡа килгән. Ҡайным Ғатиф Фәйзрахман улы Бөйөк Ватан һуғышынан иҫән ҡайтҡан. Яраланған, бер ҡулы сулаҡ ине. Матур ғүмер итте. Минең яҡтан Әхмәтйән Кейекбаев ҡартатайым һуғыштың башынан аҙағына тиклем йөрөп, Берлинға етеп урап ҡайтҡан. Һуғыштан алып ҡайтҡан дюралдән эшләнгән ҡалағы әле лә бар. Яңыраҡ ветерандарҙың "Аструм" магазинының тәҙрәләренә ҡуйылған фотоларын ҡарап йөрөнөм. Күптәрен белмәйем, ҡай берәүҙәрен сырамытам, таныш фамилиялар осрай. Ҡапыл әсәйемдең бер туған ҡустыһының фотоһын күреп, илап ебәрҙем. Тимәк, беҙҙең ғаиләнән генә әллә күпме яугир бар.

Һуғыш мәлендә атайым бәләкәй булған әле, ул ун алты йәшлек бер туған апайының Баймаҡ районы Ҡаратал ауылында беренсе булып тракторға ултырғанын һөйләй торғайны. Бер көндө шулай үткәндәрҙе иҫләп ултырғанда атайым ҡапыл илап алды ла китте. "Нимә булды?" тим. "Апайым иҫемә төштө, ун алты йәшлек кенә бала, тракторҙың руленә ҡулдарын һуға-һуға илай, сөнки ҡулдары туңған булған", - ти. Бына нисек еңеү яулаған улар: һуғыш фронтта ла, тылда ла барған. Ҡартатайым Әхмәтйән Кейекбаевтың һуғышҡа алынғанда уҡ бер яҡ күҙе йүнләп күрмәгән булған. Бер ваҡыт ул күҙе буйынса инвалидлыҡ алырға ниәтләп, дауаханаға комиссия үтергә барған. Врачтар: "Бабай, һин бер күҙеңде һуғышта юғалтмағанһың, бала саҡта уҡ юғалтҡанһың", - тип ҡайтарғандар. "Бына беҙҙең медицина хәҙер ниндәй көслө!" - тип көлгән булды, бахыр. Аллаһҡа шөкөр, оҙаҡ йәшәп үлде. Эй, донъя! Олатайҙарҙың орден-миҙалдары теҙелеп торҙо, ләкин улар был батырлыҡтары тураһында ла, һуғыш тураһында ла һөйләргә яратманы...

Әле лә һуғыш бара. Әле минең улым йөрөй Махсус хәрби операцияла. Орден-миҙалдары ла бар. Мин шул мәхшәрҙән отпускаға ҡайтҡан егеттәрҙең күҙҙәренә ҡарайым.. Улар донъяға ихлас ҡарай, тормошто шул тиклем яраталар, улар өсөн бөтә нәмә лә ҡәҙерле. Улар минут менән йәшәмәйҙәр, секунд менән йәшәргә өйрәнгәндәр. Ғорурланам мин шул балалар менән! Әсәй булараҡ ғорурланам. Улар илебеҙҙе һаҡлайҙар, тыныс донъяның нимә икәнен белеп һаҡлайҙар. Ил ҡоҙрәтен, тыуған тупраҡты, атай-әсәйҙең, туған-тыумасаһының, балаларының ҡәҙерен белгән балалар бөгөнгө көндә Махсус операцияла ҡатнаша. Рәхмәт уларға!

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ХӘТЕР БАҠСАҺЫ УЛТЫРТЫЛДЫ



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Шишмә районына эш сәфәре барышында Рәсәй Геройы Максим Серафимов исемендәге "Патриот" хәрби-патриотик парк биләмәһендә "Хәтер баҡсаһы" акцияһында ҡатнашты.**

"Хәтер баҡсаһы" акцияһы оло әһәмиәткә эйә. Беҙ ағас ултыртып ҡына ҡалмайбыҙ, был бик яҡшы күренеш, сөнки тәбиғәттә һәм урманды үҫтерәбеҙ. Ләкин иң мөһиме, бөгөн ултыртылған һәр үҫенте Советтар Союзының Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булған 27 миллион граждана иҫтәлегенә бағышлана", - тине Радий Хәбиров сарала ҡатнашыусыларға мөрәжәғәт итеп.

Өс йөҙ йүкә һәм Ҡырым ҡарағайы үҫентеләрен ултыртыуҙа шулай уҡ Херсон өлкәһе губернаторы урынбаҫары - Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте ҡарамағындағы Херсон өлкәһенең даими вәкиллеге етәксеһе Владимир Боделан, көс структуралары етәкселәре, Белорет һәм Мәләүез райондарынан "Патриот" паркына хәрби йыйынға килгән 10-сы класс уҡыусылары ҡатнашты.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Ҡырым Республикаһы "Рәсәй" күргәҙмә-форумында Башҡортостанға Ҡырым ҡарағайын тапшырғайны. Был ҡарағай ҡаҡшамаҫ һәм мәңгелек дуҫлыҡ символына әйереләсәк. Ул 500-600 йыл йәшәй.

# МӘСКӘҮҘӘРҘЕ ҺОҠЛАНДЫРЫП...

**Мәскәүҙәге "Рәсәй" Халыҡ-ара күргәҙмә майҙансығында уҙғарылған Халыҡ ижады аҙналығы сиктәрендә Башҡортостан стендын килеп күреүселәр "Күп яҡлы Башҡортостан" тип аталған үҙенсәлекле кейеҙ балаҫ баҫты.**



Ойоштороусылар был проект республиканың һәм бөтә Рәсәйҙең берлеген һәм мәҙәни мираҫ байлығын сағылдырған символ булыр, тигән матур маҡсат ҡуйған. Был ижади эштә теләгән һәр кем ҡатнаша алды. Кейеҙгә биҙәктәр замансараҡ алым - "королай баҫыу" ысулы менән башҡарылған, ә аҙаҡтан уны ҡәҙимгесә һыулап баҫҡандар. Уны Башҡортостан Республикаһында йәшәгән халыҡтарҙың орнаменттары биҙәй.

Кейеҙ балаҫ һуғыу эше тәжрибәле оҫта, Рәсәйҙең Рәссамдар союзы, "Кейеҙ оҫталарының ижади берлеге" ассоциацияһы ағзаһы Ләйсән Ғилманова етәкселегендә атҡарылды. "Был сәнғәт өлгөһө Рәсәйҙең дуҫ, ярашып йәшәүсе, берҙәм күп милләтле халҡының символы ғына түгел, ә гүзәл илебеҙҙең мәҙәни күп төрлөлөгө һәм рухи байлығын да сағылдыра", - тине оҫта. Ижади проектты 29 апрелдә эшләп бөттөләр һәм гәм халыҡҡа күрһәттеләр.

# ӘЗЕРБАЙЖАНДА...



**Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов етәкселегендәге республика аграрийҙарының рәсми делегацияһы Әзербайжанда булды.**

Азербайжан Республикаһының ауыл хужалығы министры урынбаҫары Эльчин Зейналов менән эшлекле осрашыуҙа Илшат Фәзрахманов Башҡортостандың агросәнәғәт комплексы ҡеүәте менән таныштырҙы. Ул төбәктең инвестиция ҡеүәте, ауыл хужалығы етештереүселәренә ярҙам саралары тураһында һөйләне, тип хәбәр итә Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәте. Сәфәр барышында әзербайжан коллегаларыбыҙ менән хеҙмәттәшлек итеү өсөн дөйөм йүнәлештәр табыу планлаштырыла. Башҡортостанда халыҡтың 60 проценты - мосолман. Шуға күрә республикала ауыл хужалығы продукцияһының күбеһе "Хәләл" стандарттары буйынса етештерелә, күп предприятиелар ғәрәп илдәре таныған махсус сертификаттар алды. Өҫтәүенә, республика ауыл хужалығы продукцияһы экспортын арттыра. Бынан тыш, агросәнәғәт йүнәлешен үҫтергән "Азерсун" холдингының генераль директоры Мөхәммәт Гёзал менән һөйләшеүҙәр үтте. Әзербайжан яғы Башҡортостандың юғары потенциалына ҡыҙыҡһыныу белдерҙе. Яҡтар республикабыҙҙан киптерелгән һөт ташыу мөмкинлеген ҡараны.

# ЗАКОНЛЫ ЭШЛӘЙҘӘРМЕ?



**Өфөлә Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығы һәм Федераль именлек хеҙмәте идаралығы подразделениелары хеҙмәткәрҙәре сит ил граждандары йәшәүе мөмкин булған урындарҙы тикшерҙеләр. Рейд барышында Рәсәй территорияһына миграция ҡануниәтен боҙоп килгән сит ил граждандары эшләүе мөмкин булған баҙарҙар һәм сауҙа комплекстары тикшерелде.**

"Тикшереү саралары һөҙөмтәһендә хоҡуҡ һаҡлау органдары хеҙмәткәрҙәре Рәсәй территорияһында гәмәлдәге миграция ҡануниәте талаптарын үтәмәй йәшәүсе 4 сит ил гражданын асыҡланы. Ошо факт буйынса уларға ҡарата административ материалдар төҙөлдө. Материалдар судҡа йүнәлтелде, унда хоҡуҡ боҙоусыларҙы беҙҙең илебеҙҙән һөрөп сығарыу хаҡында ҡарар ҡабул ителәсәк", - тип хәбәр итте Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығының матбуғат хеҙмәте. Унан башҡа, Рәсәй Федерацияһы гражданлығын алған һәм хәрби иҫәпкә инмәгән 30-ҙан ашыу гражданин булыуы асыҡланған. Артабан тейешле ҡарар ҡабул итеү өсөн уларҙы Өфө хәрби комиссариаттары ҡарамағына алып барғандар. "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы элегерәк хәбәр иткәнсә, Башҡортостанда сит ил кешеләрен фиктив теркәү осраҡтары булыуы ла билдәле. Эйе, законһыҙ килгәндәр... законлы ҡайтарылырға тейеш.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин указы менән яҡташыбыҙға "Геройәсә" тигән исем бирелде. Был юлы маҡтаулы исемгә һәм дәүләт наградаларына Благовещен районынан Ольга Викторовна Фатеева лайыҡ булды. Ошо уҡ указға ярашлы Башҡорт дәүләт медицина университетының кафедра мөдире Людмила Викторовна Яковлева "Рәсәй Федерацияһы юғары мәктәбенең атҡаҙанған хеҙмәткәре" тигән маҡтаулы исем менән бүләкләнде.

✓Башҡортостандың күп функциялы үҙәгендә хеҙмәт күрһәтеүҙе көтөү ваҡыты 25 минуттан 5 минутҡа тиклем ҡыҫҡартылды. Республика Премьер-министры Андрей Назаров билдәләүенсә, хәҙер күп функциялы үҙәктә 380-дән ашыу дәүләт һәм муниципаль сервистарҙан файҙаланырға мөмкин. "Башҡортостан ошо йәһәттән алдынғы биш төбәк иҫәбендә. Хеҙмәттәр һаны 2018 йыл менән сағыштырғанда 1,5 тапҡырға артты", - тип белдерҙе А. Назаров. Шулай уҡ граждандарҙан килгән ялыуҙарҙың өс тапҡырға тиерлек кәмеүе билдәле.

✓Башҡортостанды донъя конгресс майҙансығы рәүешендә артабан үҫтереү өсөн заманса һәм алдынғы инфраструктура булдырыу мөһим. Уның үҙәге - 60 мең квадрат метрҙан ашыу майҙанды биләгән Халыҡ-ара экспоүҙәк проекты. "Әлегә ул "Конгресс Тау" тип атала. Концептуаль яҡтан илдә иң яҡшыһы булмаҡсы. Бының өсөн майҙансыҡ билдәләнгән, - тип белдерҙе Премьер-министр Андрей Назаров. Уның һүҙҙәренсә, конгресс-күргәҙмә эшмәкәрлеген үҫтереү йәһәтенән тырышып эшләү һөҙөмтәһендә Башҡортостан ваҡиғалар потенциалын бойомға ашырыу буйынса иң яҡшы өс төбәк иҫәбенә инде.

✓Өфө биатлонсыһы Эдуард Латипов Түмәндә барған биатлон буйынса Рәсәй чемпионатында эҙәрлекләү ярышы призеры булды. Спортсы 12,5 саҡрым арала финишка өсөнсө булып килде (36:35), тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Спорт министрлығынан. Беренсе урында - Иван Колотов (36:35), икенселә - Александр Логинов (44,45). Башҡортостан биатлонсылары командаһында шулай уҡ Антон Бабиков, Александр Бабчин, Данил Матерков һәм Илья Бурлаков сығыш яһай. Ҡатын-ҡыҙҙар командаһында республика намыҫын Карина Бахтина, Илона Знакова, Анастасия Айгилдина һәм Мария Дубровская яҡлай.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!



# АҒИҘЕЛ БУЙЛАП...

**Өфөгә Түбәнге Новгородтан дүрт палубалы "Александр Пушкин" теплоходы килде һәм круиз лайнеры республиканың баш ҡалаһында 3 майға тиклем торҙо. Уның артабанғы туҡталышы - Алабуға.**

Республиканың транспорт һәм юл хужалығы министры урынбаҫары Руслан Ғарипов һүҙҙәренсә, "Александр Пушкин" теплоходы менән Өфөгә 120-нән ашыу турист килгән. Улар өсөн ҡаланың иҫтәлекле урындары буйлап бай программа әҙерләнгән. "Башҡортостан туристар өсөн ҡыҙыҡлы, шуға күрә республика йылға туризмын үҫтереү буйынса ҙур эш алып бара", - ти Руслан Ғарипов.

Транспорт министрлығында билдәләүҙәренсә, 2024 йылғы навигацияла Башҡортостанға 20 теплоход килеүе көтөлә. 3 майҙа Өфөгә тәүге тапҡыр дүрт палубалы "Виссарион Белинский" теплоходы килде. Ул Түбәнге Новгород - Ҡаҙан - Һамар - Тәтеш - Түбәнге Кама - Өфө - Алабуға - Ҡаҙан - Түбәнге Новгород рейсын башҡара. Шулай уҡ 3 майҙа Дуҫлыҡ монументында өс палубалы "Н. А. Некрасов" һәм "Александр Бенуа" теплоходтары туҡтаны. 5 майҙа - өс палубалы "Михаил Кутузов", ә 7 майҙа ике палубалы "Александр Свешников" лайнерҙары килде. 8 майҙа Өфө өс палубалы "Бөйөк Русь" лайнерын ҡаршылай.

# ИСЕМЛЕ АЛЛЕЯ

**Өфөлә Башҡортостандың телевизион тапшырыуҙарының 65 йыллығына арналған тематик аллея ултыртылды.**

Республикабыҙҙың баш ҡалаһына арналған сара "Йәшел Башҡортостан" республика акцияһы барышында уҙҙы. Аллея Ғафури урамында Телеүҙәк янында урынлашҡан. Баш ҡала хакимиәтенән хәбәр итеүҙәренсә, уны "Гринспайер" һәм "Ватерери" сортлы 50-нән ашыу ҙур ағас, шулай уҡ иҫтәлекле таҡта ҡуйылған декоратив таш биҙәй. Ағас ултыртыуҙа Башҡортостан Хөкүмәтенең беренсе вице-премьеры Урал Килсенбаев, "Ватан көсө" форумы резиденттары, йәмәғәт эшмәкәрҙәре, Башҡортостан телевидениеһы ветерандары һәм хеҙмәткәрҙәре ҡатнашты.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2023 йылда "Йәшел Башҡортостан" акцияһы 70 мең кешене берләштерҙе.

# ЮЛАЕВСЫЛАР...

**Өфөнөң "Салауат Юлаев" хоккей клубы яңы тренерҙар штабын булдырҙы. Виктор Козлов команданың баш тренеры булып ҡала.**

"Салауат Юлаев"тың тренерҙар штабына тағы дүрт белгес инде, тип хәбәр итә клубтың матбуғат хеҙмәте. Николай Цулыгин килешеүҙе оҙайтты. Физик әҙерлек нигеҙҙәре буйынса тренер Адриан Вальво ла эшләүен дауам итә. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, француз белгесе 2022 йылдың йәйендә "юлаевсылар" составына инде, тип хәбәр иткәйне "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы. Виктор Козловтың тренерҙар штабында быҒаса "Толпар" йәштәр командаһын етәкләгән Владимир Потапов та бар. "Югра"нан күскән Дмитрий Мезенцев ҡапҡасылар менән эш өсөн яуап бирә. Шулай уҡ тренерҙар штабын үҙ карьераһын тамамлаған Евгений Бирюков тулыландырҙы. Уның тәжрибәһе баш тренерға йәш хоккейсылар менән эштә ярҙам итер, тип билдәләнә.

# ФЕХТОВАНИЕ ҮҘӘГЕ...

**Башҡортостандың фехтование үҙәге Өфөнөң 450 йыллығы уңайынан сафҡа индерелгән өс ҙур спорт объектының береһе булмаҡсы.**

Бынан тыш, заманса спорт объектын быйыл көҙ баш ҡалабыҙҙа "Рәсәй - спорт державаһы" халыҡ-ара форумы ваҡытында файҙаланыуға тапшырыу күҙаллана. Радий Хәбиров үҙенең телеграм-каналында хәбәр итеүенсә, әле фехтование үҙәге яртылаш әҙер, төҙөлөш сентябрҙә тамамланырға тейеш. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Фехтование үҙәге Өфөнөң Затон биҫтәһендә, Рима Баталова исемендәге спорт әҙерлеге үҙәге эргәһендә төҙөлә. Проект Рәсәйҙең Фехтование федерацияһы президенты, ике тапҡыр олимпия чемпионы Ильгар Мамедов ярҙамында республика адреслы инвестиция программаһы сиктәрендә бойомға ашырыла. "Башҡортостанда фехтование мәктәбе бик көслө, тәрбиәләнеүселәребеҙ араһында Олимпия уйындары еңеүселәре һәм призерҙары бар. Ә хәҙер иң көслө спортсыларыбыҙ һәм буласаҡ йондоҙҙарыбыҙ заманса шарттарҙа шөғөлләнә аласаҡ. Яңы Фехтование үҙәгендә республика, төбәк-ара һәм ил кимәлендәге ярыштар ойоштораcаҡбыҙ", - тине Радий Хәбиров.

# ҮҘӘК АЗИЯ ХЕҘМӘТТӘШЛЕК ӨСӨН

**Өфөлә 14-15 майҙа Sheraton Plaza ҡунаҡханаһы майҙансығында халыҡ-ара "Валдай" дискуссион клубының IV Үҙәк Азия конференцияһы уҙғарыла. Уның темаһы - "Рәсәй һәм Үҙәк Азия: үҙгәреп тороусы донъя ысынбарлығында үҫеш һәм именлек".**

Конференцияла Һиндостан, Ҡаҙағстан, Ҡытай, Ҡырғыҙстан, Тажикистан һәм Үзбәкстан экспертттары ҡатнаша. Конференцияны асыу тантанаһында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың һәм РФ сит ил эштәре министры урынбаҫары Михаил Галузиндың ҡатнашыуы көтөлә. Дүрт сессия һәм асыҡ дискуссия сиктәрендә спикерҙар төбәктәр хеҙмәттәшлегенең ике яҡлы һәм күп яҡлы аспекттарын, именлек һәм экстремизм, сауҙа итеү һәм миграция, экология һәм климат мәсьәләләрен ҡараясаҡ, шулай уҡ санкциялар шарттарында сауҙа бәйләнештәрен нығытыу хаҡында фекер алышасаҡ. Конференция уҙғарыу урыны итеп Башҡортостанды һайлау республикабыҙҙың Үҙәк Азияға географик һәм мәҙәни яҡтан ғына түгел, иҡтисады буйынса ла иң яҡын төбәктәрҙең береһе булыуы менән аңлатыла. "Үҙәк Азия дәүләттәре һәр даим Башҡортостандың иң эре ун сауҙа партнерҙары иҫәбенә инә һәм улар, санкцияларға ҡарамай, республика менән тауар әйләнешен арттыра бара", - тиҙәр конференцияны ойоштороусылар.

"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Балалар, йәштәр фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһен өсөн, ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан арҙаҡлы шәхестәребеҙ хаҡында һөйләйбеҙ.**

## КҮСИМОВ ТАҺИР ТАЙЫП УЛЫ

Таһир Тайып улы Күсимов - башҡорт совет хәрби һәм дәүләт эшмәкәре, генерал-майор, Советтар Союзы Геройы. Ул 1909 йылдың 14 февралендә Ырымбур губернаһының Верхнеурал өйәҙе Күсем ауылында тыуған. 1921 йылғы аслыҡ ваҡытында атаһы уны Ҡаҙағстанға, һуңыраҡ Урта Азия тарафтарына алып китә.

1928-1932 йылдарҙа Ҡаҙандағы берләштерелгән башҡорт-татар хәрби мәктәбендә белем ала. 1936 йылда Новочеркасскиҙа атлы ғәскәрҙәр командирҙары курсында хәрби әҙерлек үтә. 1938-1941 йылдарҙа Кавказ аръяғы хәрби округының, 77-се Әзербайжан тау-уҡсылар дивизияһының махсус разведка эскадронының командиры булып хеҙмәт итә. 1941 йылда Күсимов командованиеның махсус заданиеһын үтәй - совет ғәскәрҙәренең Иранға хәүефһеҙ, тыныс үтеп урынлашыуын тәьмин итә. 1942 йылдың апреленән 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының 275-се полкы командиры. 1943 йылда Днепрҙы кисеп сығыу хәрби операцияһында күрһәткән батырлығы өсөн полк командиры Таһир Күсимовҡа Советтар Союзы Геройы исеме бирелә. 1944 йылдың майында Советтар Союзы маршалы С. М. Буденный полковник Таһир Кусимовты М.В.Фрунзе исемендәге хәрби академияға ебәреүҙе юллай.

1947 йылда М. В. Фрунзе исемендәге хәрби академияны алтын миҙалға тамамлай. 1951 йылда К.Е. Ворошилов исемендәге Генераль штаб академияһын алтын миҙал менән тамамлай. 1945-1963 йылдарҙа кавалерия дивизияһының штаб начальнигы, тау-уҡсылар дивизияһының, мото-уҡсылар дивизияһының командиры, Төркмәнстан хәрби округында армия корпусы командирының урынбаҫары.

1963-1969 йылдарҙа Башҡорт АССР-ының хәрби комиссары. РСФСР (1947-1955), Төркмән ССР-ы (1959-1963), БАССР (1969-1971) Юғары Советтары депутаты итеп һайлана. 1986 йылдың 10 майында донъя ҡуя. Өфө ҡалаһында, мосолман зыяратында ерләнгән.

Наградалары: ике тапҡыр Ленин, Ҡыҙыл Байраҡ, I дәрәжә Ватан һуғышы, ике Ҡыҙыл Йондоҙ ордендары, күп һанлы миҙалдар менән бүләкләнгән. Өфө, Баймаҡ, Дүртөйлө, Нефтекама, Сибай ҡалалары, Бөрйән районының Яңы Собханғол һәм Яңы Уҫман ауылдарындағы урамдарға Таһир Күсимов исеме бирелгән. Әбйәлил районы Күсем ауылында Т. Т. Күсимовтың дәүләт музейы асылған. 2010 йылдың 8 майында Өфөләге Еңеү паркында генерал-майор Таһир Күсимовҡа бюст ҡуйыла. Ҡаһарманға арнап, "Генерал Күсимов" исемле документаль фильм төшөрөлгән, билдәле яҙыусы Рамазан Өмөтбаевтың "Генерал Күсимов" тигән документаль повесы баҫылып сыҡҡан.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Көнбағыш

❖ Бөйөрҙә таш табылғанда 3-4 көнбағыш тамырын онтаҡларға. 1 стаканына 3 литр һыу ҡойоп, ҡайнап сыҡҡандан һуң 3 минут утта тоторға. Һөҙөргә, әммә тамырҙы ташламаҫҡа. Ҡайнатманы 3 тәүлек эсендә эсеп бөтөргә (көнөнә 1 литр). Ошо уҡ тамырҙарҙы тағы 3 литр һыуҙа ҡайнатырға, әммә был юлы 15 минут дауамында. Шунан һөҙөргә һәм тамырҙы ташларға. Ҡайнатманы 3 тәүлектә эсеп бөтөргә. Бөйөрҙәге таштар бәүел менән сыға. Кәрәк булғанда дауаланыуҙы ҡабатларға була. Был ысул менән организмға ултырған тоҙҙо ла сығаралар, әммә ул 2-3 аҙна дауаланғас ҡына сыға башлай. Бәүел һыу кеүек таҙарғансы эсергә. Был ваҡытта әсе, тоҙло, әсегән ризыҡ менән туҡланырға ярамай.

## Болон туҡранбашы

❖ Тышҡы яман шештәрҙән (злокачественная опухоль) 2-3 ус болон туҡранбашын (клевер луговой) ҡайнар һыу ҡойоп, 10 минут тоторға һәм һыуын түгергә. Йылы төпрәнән 1-2 сәғәткә сылатҡыстар яһарға. Йәйгеһен ошо уҡ маҡсатта яңы йолҡолған япраҡтарын бутҡа итеп төйөп ҡапларға була.

❖ Диабет булғанда ябай сәй урынына болон туҡранбашының 2-3 киптерелгән сәскәһен 1 стакан ҡайнар һыуҙа бешереп эсергә ғәҙәтләнергә кәрәк.

## Бөйөр

❖ Бөйөрҙөң функциялары боҙолған осраҡта бәрхәт сәскәһе ярҙам итә. 1 балғалаҡ ваҡланған бәрхәт үлән япрағы һәм сәскәләренә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, ярты сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда стакандың өстән бер өлөшө күләмендә эсергә.

## Аҡ сирень

❖ Ашҡаҙан полиптарынан аҡ сирендең сәскәләре һәм япраҡтары менән бергә 2 ботағын алып, 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 10-12 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда яртышар стакан эсергә. 2 ай дауаланырға. Бының өсөн аҡ сиренде алдан киптереп әҙерләп ҡуйырға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

### Ялан һары

**(Курганник)**



Һарға оҡшаған, тик эрерәк (ҡанат елпеүе 1,5 м тиклем) һәм төҫө асығыраҡ. Төҫө ерән. Ҡайһы берҙәренең асыҡ һоро ҡанаттарының остары ҡараҡ, ҡойроҡтары арҡыры буйҙар менән һыҙатланған. Һирәгерәк булһа ла, бер төҫтәге ялан һары ла осрай, әммә уның ҡанат осо уны айырып торороусы билдә булып ҡала.

Төньяҡ Кавказдан Ҡаҙағстандың төньяғына тиклем осрай. Төрлө йылдарҙа Таналыҡ, Уй йылғалары буйҙарында, Көньяҡ Уралдың көнсығыш һыҙаттарында күренгән. Үҙән һыуһаҡлағысы, Белорет районы Инйәр ҡасабаһы, Дүртөйлө районы Йосоп, Краснокама районы Һаҡлау ауылдары тирәһендә оялары осрай.

РФ һәм БР Ҡыҙыл китаптарына 3-сө категория менән индерелгән - аҙ һанда айырым территорияларҙа осрай торған төр. Кимереүселәр менән туҡлана.

### Йомағара, тау һары, ҡар һары

**(Зимняк (мохноногий канюк)**



Башҡортостан территорияһында көҙөн генә күренеп ҡала. Көҙөн өҫтөндә ултырғанын күрергә мөмкин. Һарға оҡшаған, тик аҡһылыраҡ, ҡойроғо ла аҡһыл, түше сыбар һыҙатлы, ҡанатының бөгөлгән ерендә ҡара тапы бар, ҡанат остары аҡ. Бармаҡ остарына тиклем йөнтәҫ.

Тундра, урманлы тундарала йәшәй. Ҡышты илдең төрлө ерендә үткәрә. Кимереүселәр менән туҡлана. Октябрь аҙағында беҙҙең ғалимдар йомағараны Өфө, Кушнаренко, Саҡмағош һ.б. райондарҙа осратҡаны бар. Өфө фән һәм технологиялар университетының зоология музейында был ҡоштоң күҙәләре һаҡлана.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

ХӘТЕРКИТАП

# УЛАРҘЫ ҺУҒЫШ СЫНЫҠТЫРҒАН...

**Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 79 йыллығы айҡанлы ошо дәһшәтле, ҡан ҡойошло осорға ҡағылышлы халыҡ хәтерен яңыртырға теләп, яҡындары һуғышта ҡатнашҡандарға мөрәжәғәт итергә булдыҡ. Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған табибы, медицина фәндәре кандидаты, танылған фониатор Наил Талха улы ҒАБДУЛЛИН үҙенең ғаилә хәтирәләре менән уртаҡлашты. Уның атаһы - Бөйөк Ватан һуғышы яугиры. Әсәһе - тыл ветераны.**




- Атайым Талха Хажимөхәмәт улы Ғабдуллин Төньяҡ-көнбайыш фронты, Воронеж фронты, 2-се Украина фронты составында дошмандарға ҡаршы һуғыша һәм гвардия лейтенанты званиеһында ҡайта. Ул күрһәткән батырлыҡтары өсөн II дәрәжә Ватан һуғышы ордены, "Ҡыҙыл йондоҙ" ордены менән награддлана, бик күп миҙалдары бар. СССР Ҡораллы Көстәренең баш командующийы Сталиндың шәхси рәхмәт хаты әле лә ғаилә архивында ҡәҙерләп һаҡлана. Былар тураһында ул беҙгә һөйләргә тырышманы, һуғыш темаһын бөтөнләй ҡуҙғатманы, күңеле тулышып китә торған булғандыр инде. "Эйе, булдым, йөрөнөк, һуғыштыҡ", - тигән һымаҡ ҡына итеп ҡыҫҡа ғына яуап бирер ҙә ҡуйыр ине. Ә инде бер нисә йыл элек бер танышыбыҙ хәрби архивты асып ҡарап, атайымды наградаға күрһәткәндә яуҙаштары юллаған документты табып алған. Унда һуғыш ваҡиғалары бик асыҡ сағылдырылған. Бына ул документ: "1944 йылдың 7 декабрендә Венгрияның бер ауылы өсөн алышта дошман 9 танк, 2 транспортер һәм пехота ротаһы менән 11 тапҡыр контратакаға күтәрелде. Иптәш Ғабдуллиндың ротаһы 3 танк һәм 2 транспортер һөжүм итә. Дошман ҡеүәтлерәк булһа ла, рота сигенмәй, бөтә атакаларҙы кире ҡаға. Иптәш Ғабдуллиндың ротаһы мылтыҡ-пулеметтарҙан ут асып, дошман пехотаһын танкыларҙан айырыуға өлгәшә, үҙҙәренең хәрби тәртиптәре аша үткәрмәй. Дошман танкылары ротаның окоптары өҫтөнән урап-тапап йөрөһә лә, был ҡанһыҙ алышта иптәш Ғабдуллиндың ротаһы 20 немецты юҡ итә. Иптәш Ғабдуллин ҡаты яралана, әммә бөтә атакаларҙы кире ҡаҡҡансы яу яланын ташлап китмәй. Оҫта командалыҡ итеүе, подразделениеның ныҡ тороуы һәм шәхси батырлығы өсөн иптәш Ғабдуллин Ватан һуғышы ордены хөкүмәт наградаһына лайыҡ", - тип яҙылған йүнәлтмә ҡағыҙында. Ул ваҡытта атайыма ни бары 21 генә йәш була. Яуҙаштары уны "Салауат тоҡомо" тип хөрмәт иткәндәр. Ил азатлығы, донъя именлеге, тыныслыҡ өсөн бергә көрәшкән иптәштәре менән үҙе тере саҡта бәйләнешен өҙмәне атайым. Уға Ленинград, Томск һәм илдең башҡа ҡалаларынан сәләмхаттар килеп торҙо. Еңеүҙең бер юбилейлы датаһына әсәйебеҙ менән бергә яуҙаштары менән осрашыуға Черкассыға ла барып ҡайттылар.

Һуғыштан һуң, тыныс тормошта ла атайым тынғыһыҙ булды, гел яуаплы урындарҙа эшләне. 1950 йылда Әбйәлил районының Хәлил ауылында колхоз рәйесе була, унан һуң Асҡар ауылында Әбйәлил районы Рәсәй ҡулланыусылар йәмғиәте рәйесенең беренсе урынбаҫары вазифаһын биләй. 1954 йылда Байым ауыл Ҡулланыусылар йәмғиәте рәйесе итеп тәғәйенләнә һәм ошо урында утыҙ йылдан ашыу эшләп, хаҡлы ялға сыҡты. Беҙҙе лә, өс улын һәм өс ҡыҙын, тырыш булырға, эштән ҡурҡмаҫҡа, берберендә ҡарарға, ярҙамсыл, тоғро, ғәҙел булырға өйрәтеп тәрбиәләне. Илһөйәр булығыҙ, тыуған илде яратығыҙ, тип туранан-тура әйтеп ултырмаһа ла, тыуған ауылға, ауылдаштарға ҡарата ихтирамлы мөнәсәбәт аша илһөйәрлекте лә һеңдереп үҫтерҙе улар.

Әсәйем Фирҙәүес Мөхәмәҙей ҡыҙы Шәрәфетдинова ла ҡәһәрле һуғыш михнәттәрен үҫмер генә сағында күп күргән, ул тыл фронты өсөн эшләгән: Белорет районына ағас ҡырҡырға ла ебәргәндәр, аҙаҡ яҡшы уҡығаны өсөн мәктәпкә уҡытыусы итеп тәғәйенләйҙәр. Районның юғары уҡыу йорттарына уҡырға ебәрелергә тейеш бер төркөм йәштәре араһында әсәйем дә була. Ошо исемлекте райондағы бер көнәшмәлә уҡыйҙар, унда атайым да ҡатнаша. Әле өйләнешмәгәндәр-нитмәгәндәр, әммә әсәйемдең фамилияһын әйткәс: "Юҡ, беҙ өйләнештек, ул бер ҡайҙа ла бармай", - тип хәйләләп алып ҡалған. Был осраҡты ла, төрлө донъя хәлдәрен дә мәрәкәләп иҫкә алырҙар ине гел.

Минең хәтерҙә атайым көрәк саҡта үҙ фекерен әйтә белгән, абруйлы, туғандары өсөн өҙөлөп торған кеше булып ҡалған. Бала сағымда бик ҡаты ауырып киттем, өйҙә 2-3 көн ятҡас, атайым мине балалар дауаханаһына алып китте. Плевропневмония булғандыр инде, арҡам ауырта, юғары температура, ятып та тора алмайым. Ул ваҡытта бөйөк халыҡ беҙгә "бабайка", "апайка" тип кенә ҡарай торғайны бит, сиратта әллә күпме ваҡыт көттөк, ҡарамайҙар. Шунан атайым: "Башҡорт көтөп тик ултырыр тиһегеҙме? Мин совет армияһы офицеры, етәксегеҙҙе килтерегеҙ", - тип мәсьәләне үҙ ҡулына алды. Бына шундай осраҡтар эшләгән урынында ла булып ҡына торҙо уның. Уның был характеры һуғыш михнәттәрен үтеп, донъяның әсеһен-сөсөһөн татығанда сыныҡҡандыр, ул матур ғаилә ҡороп, тыныс тормошта ла йәшәр көс таба алған.

Ә бит ҡәһәрле һуғыш күптәрҙең яҙмышын боҙған. Күптәр яҡты донъя менән бик иртә хушлашҡан, балаларын етем ҡалдырған, йәшел йылан ҡолона әүерелгәндәр ҙә булды. Дүрт йыл барған мәхшәр әллә нисә быуын кешеһенең яҙмышына йоғонто яһаған. Бына ошонан сығып та, Еңеүҙең нindәй көс менән яуланыуын белеп тә, атай-әсәйҙәр гел аяҙ күк йөҙө теләп, киләсәк быуындарға тыныс тормош һорап, "Һуғыш ҡына булмаһын", тип ҡабатлап торҙолар. Әммә бөгөнгө донъя хәлдәре тағы ла борсоуҙарға һала, атай-әсәйҙәребеҙ күргән михнәттәр балаларыбыҙ, ейәндәребеҙ иңенә төшөп ҡуймаһын, тигән ҡурҡыу бар күңелдәрҙә. Бөйөк Еңеү көнөндә тағы бер тапҡыр аяҙ күк йөҙө, һаулыҡ теләйем.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ӨҘӨЛГӘН СӘСКӘЛӘР...

## ҡорбан ителгән йәндәрме?



Яҙ байрамдарының иң сағыу биҙәктәре - күҙҙең яуын алып торған, мең биҙәкле аллы-гөллө сәскәләр. Бигерәк тә 9 майҙа - Бөйөк Еңеү байрамында кешеләрҙең ҡулдарында сәскәләр күп була. Был көндә гөлләмәләрҙең аҡтарына һәм ҡыҙылдарына, күберәк ҡәнәферҙәргә өҫтөнлөк бирелә. Бер уйлаһаң, ҡәберҙәргә, һәйкәлдәргә, башҡа иҫтәлекле урындарға тере сәскәләр һалыу тәбиғәттең гуманлылыҡ ҡанундарына һыймай кеүек. Шулай булғас, нинә өҙәләр һуң сәскәләрҙе, тигән һорау ҙа тыуа. Иҫтәлекле байрам көндә кемгәләр бүләк итерлек, ҡайҙалыр һалырлыҡ башҡа төрлө нәмә тапмағандармы икән? Ғөмүмән, унда нимәләр һалырға кәрәкме һуң? Бәлки, аптырағандың көнөнән сәскәне ҡорбан итәләрҙер. Республикала ҡабатланып торған "Умырзая" операцияһы был йәһәттән бик ваҡытлы һәм урынлы башланған сара кеүек.

XIX һәм унан алдағы быуаттарҙа йәшәгән кешеләрҙең аяҡ кейемдәрен күргәнегеҙ бармы? Ундай кейемдәр хәҙер инде музейҙарҙа ғына тороп ҡалған. Үкенескә ҡаршы, әлбиттә. Ул замандарҙа кешеләр аяҡтарына кейеп йөрөгән итек-ситектәрҙең, сарыҡ-ҡаталарҙың башы саңғының осо кеүек өҫкә бөгөлөп торған. Бының

ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Икенсе киҫәк. Урта быуаттар.

### Алтынсы бүлек. Башҡорт - урта быуаттарҙағы Башҡортостандың баш ҡалаһы.

Тикшеренеүселәр V-VIII быуаттарҙағы Көньяҡ Урал ҡомартҡыларында көньяҡтан килтерелгән әйберҙәрҙең күп булыуын бер тапҡыр ғына билдәләмәне. Быны беренселәрҙән булып үҙенең хеҙмәттәрендә А. И. Вощинина Көньяҡ Урал ҡәбиләләренең көньяҡ тарафтарындағы илдәр менән сауҙа-иҡтисади бәйләнештәренең юғары кимәлдә булыуы менән аңлатты. Был тема буйынса башҡа археологтар ҙа яҙып сыҡты. Ошо ҡараштар планында Евразияның боронғо һәм урта быуаттарҙағы тәңкәләре буйынса иң билдәле белгестәрҙән һаналған В.В. Кропоткиндың тикшеренеүҙәре үтә ҡиммәтле, ул Көньяҡ Уралда VI-VII быуаттарға ҡараған Византия тәңкәләре табылыуы осраҡтарын ғилми яҡтан тикшергән. Ул Уралдан көньяҡ мәҙәни үҙәктәренә әүҙем сауҙа юлы булыуын раҫлай. Ул хатта Көньяҡ Уралдың аҡса әйләнеше булған зонаға инеү мөмкинлеге хаҡында ла фекер йөрөтә. Хәҙерге ваҡытта Урал-Волга буйы территорияһында V-VIII быуаттар тәңкәләре табылыуының һиҙелерлек арта барыуы нумизматтың әлеге һығымтаһына өҫтәмә дәлил булып тора. Ошо бәйләнештәрҙә урта быуаттарҙағы Өфө (Башҡорт) ҡалаһы кешеләре, һис шикһеҙ, ҙур роль уйнаған. Бында ювелир әйберҙәрен етештереү буйынса һөнәрселек үҙәге булыуы ошоға дәлил. Өфө-II ҡаласығында криц, шлак, тигель, металл ҡалдыҡтары булған тимер иретеү мейестәре табылды.

### Өфө-II ҡаласығы - урта быуаттарҙағы Башҡорт ҡалаһы цитаделе

Беҙҙең ҡарамаҡта, өҫтәрәк бәйән ителгәнсә, бик күп табылдыҡтар, шул иҫәптән XIII-XIV быуаттарға ҡараған тәңкәләр бар, шулай уҡ яҙма сығанаҡтарҙағы мәғлүмәттәр һис бер бәхәсһеҙ ошо ҡомартҡылар комплексының XVI быуат баштарына тиклем бер өҙлөкһеҙ ғәмәлдә булыуын раҫлай. Күрәһең, был ҡала ул саҡтағы цивилизациялы донъя илдәрендә лә билдәле булған. Мәҫәлән, XIV быуатта йәшәгән ғәрәп авторы Ибн-Халдун (1406 йылда үлгән) Алтын Урҙаның иң ҙур ҡалалары иҫәбенә Башҡорт ҡалаһын индергән, ә XIV-XVI быуаттарҙа йәшәгән Көнбайыш Европа географтары, бер туған Пициганолар (1367 й.) һәм Меркатор (1554 й.) карталарында Паскерти (Башҡорт) ҡалаһы Ағиҙел йылғаһының урта ағымында, яҡынса хәҙерге Өфө урынында һүрәтләнгән.

Өфө-II ҡаласығы Көньяҡ Уралдың иң ҙур ҡомартҡыһы, шуға күрә үҙәгендә хәҙер ҡаҙып асылған Өфө-II ҡаласығы булған ошо ҡомартҡылар комплексын (ҡаласыҡтар, некрополь, тораҡтар) өҫтә атап үтелгән авторҙар Башҡорт ҡалаһы тип атағандарҙыр. Өфө-II ҡаласығын "Башҡорт" ҡалаһы тип атауҙы енел генә аңлатып була: Көньяҡ Уралдың төп халҡының үҙ атамаһы ла башҡорт булыуын Европала ла белгәндәр. Ҡалаларҙы этнонимдар менән атау киң таралған традиция. Мәҫәлән, Булғар, Сувар ҡалалары ла иң ҙур ҡәбиләләр берләшмәһе исемдәре менән аталған. Халыҡ исеменән ҡала атамаһына әүерелеүе "башҡорт", "башҡорт халҡы", "Башҡорт иле" төшөнсәләренең барлыҡҡа килеүе, танылыуы һәм таралыуы процесын сағылдыра. Мәсьәләне ошо рәүешле ҡуйыу өсөн беҙҙең, ситләтеберәк булһа ла, раҫлап булырлыҡ бер нисә дәлилдәребеҙ бар: VII быуатта уҡ Көньяҡ Урал халҡының бер өлөшө "башҡорт" атамаһын йөрөткән. Бында VII быуатта йәшәгән Ҡытай авторҙары хеҙмәттәренә мөрәжәғәт итеү хаҡлы булыр: улар Көньяҡ Уралға яҡын тарафтарҙа "ба-шу-ки-ли" тип теркәгән халыҡ булыуын иҫкә алған ("башукили", ысынбарлыҡта "башукири" - ҡытай телендә "р" өнө юҡлыҡтан "л" ҡулланыла. - **Ред. иҫк.**). Ҡытай профессоры Чанг Ланг фекеренсә лә, ошо этноним - "башҡорт" һүҙенең ҡытайса яҙылышы булып тора. VII быуатта йәшәгән, исеме билдәһеҙ ҡытай тарихсыларының береһе (вафаты - 643 йыл) "ба-шу-ки-ли" халҡының туранан-тура һундарҙан (һи-уйнг-ну) килеп сығып, "тие-ле" тигән дөйөм атама менән нарыҡланған, Көнбайыш Төркөстан һәм Түбәнге Волга буйын тәйәк иткән төрки ҡәүемдәре иҫәбенә индерә. Ә.-З. Вәлиди ҡытай авторҙарының "тие-ле" этнонимы аҫтында VII-IX быуаттарға ҡараған Орхон-Енисей яҙма ҡомартҡылары буйынса билдәле булған Алтай һәм Иртыш буйы төркиҙәре хаҡында яҙыуын фаразлай. Бәлки, һун-төрки массаларының күмәкләп күсенеүе осоронда "ба-шу-ки-ли"ҙарҙың да Уралға



күсеп килеүе хаҡында һығымта эшләп булалыр.

Тарихи әҙәбиәттә тикшеренеүсе М. И. Артамоновтың бер фаразы бар: унынса, VII быуаттағы "Әрмән географияһы" китабында иҫкә алынған "бутки" йә иһә "бушки" ҡәүемдәре башҡорттарҙы аңлатҡан. Сығанаҡта ҡыштарын бушкиҙарҙың төньяҡ тарафтарынан Каспий буйына мал көтөүҙәре менән килеүе хаҡында мәғлүмәт бар.

Ә.-З. Вәлиди үҙенең хеҙмәттәрендә "башҡорт" этнонимының килеп сығышы һәм VI-IX быуаттарҙа Башҡорт илендәге этносәйәси ситуация хаҡында һис шикһеҙ ҡабул итерлек миҫалдар килтерә. Бына улар: Урта Азияның көньяғында "башҡурт тауҙары" тип аталған һырт була. Ошонда уҡ VI-VIII быуаттарҙа "Башгирд" (Вашгирд) ҡалаһы ла булған. Сығанаҡтарға ярашлы, ул Башҡорт иленең баш ҡалаһы булған, ул төркиҙәрҙең эфталиттар менән хәрби конфликты (VI б.) һәм VIII быуат башында ғәрәптәрҙең Урта Азияны яулап алыуы айҡанлы иҫкә алына. Ошо ҡала атамаһы IX-XI быуаттарҙа йәшәгән ғәрәп авторҙарының башҡорт этнонимын ни рәүешле теркәүенә оҡшаш: башғырт (Сәләм Тәрджемән, IX б.), башгирд (ибн Фаҙлан, X б.), бажджирт (әл Истахри, ибн-Хаукаль, X б.), бишгирт (Ҡашғари, XI б.) һ.б.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

заманына күрә үҙенсәлекле мода, стиль булыуы хаҡында ла фекер йөрөтеп булыр ине. Әммә ул заман аяҡ кейемдәренең бындай һынланышы кешеләрҙең тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш ихтыяжынан, миһырбанлы мөнәсәбәтенән килеп сыҡҡан. Йәғни быны менән үткән быуат кешеләре ер ҡыртышын аяҡ кейеме менән тибеп аҡтарыуҙан, үләндәрҙе һәм сәскәләрҙе имгәтеүҙән һаҡлаған. Башҡорттарҙың һәр тереклектең: ағастың, үләндең, сәскәнең йәне бар, тип инаныуы ла юҡтан килеп сыҡмаған. Конвейер ысулы менән итек тегеүе рәхәт, анһат шул. Ә инде аяҡ кейеменең ос яғын саңғы башы кеүек итеп тегеү айырым оҫталыҡ, ваҡыт һәм түҙемлек талап итә. Хәҙерге аяҡ кейемдәренең осо тип-тигеҙ, улар менән хатта ер һөрөргә, артынан тырматып иген сәсергә мөмкин.

Шул уҡ ваҡытта кешеләргә хәҙер сәскәләрҙе өҙөү ҙә, кәрәге ҡалмағас, сығарып ташлау ҙа бер ни тормай. Уйлап ҡараһаң, кемдеңдер шатлығын уртаҡлашып, уға сәскә бүләк итеүсе "Һинең шатлығың да ошо сәскә ғүмере кеүек ҡыҫҡа булһын", тигәндә лә әйтә кеүек. Ә ни өсөн кемдеңдер шатлығы йә иҫтәлеге өсөн генә икенсе бер йән эйәһе үҙен ҡорбан итергә тейеш һуң әле? Күптәр сәскәләрҙе тәләмәһә лә, башҡаларға эйәреп өҙә, бүләк итә. Үҙенсә йола башҡара.

Һүҙ юҡ, сәскә - ул тәбиғәттең иң матур, хуш еҫен бөркөп торған ҡәҙерле хазинаһы. Минеңсә, сәскә үҙе үҫкән йә сәселгән ерендә ултырып, үҙе үк тәбиғи рәүештә һулырға тейештер. Шулай булғанда, ул тереклеккә оҙағыраҡ хеҙмәт итә, кешеләрҙең күңелен оҙағыраҡ зауыҡландыра.

Ҡәберҙәргә һәм һәйкәлдәргә сәскә һалыуға килгәндә, батырлыҡ өсөн матурлыҡ үҙен ҡорбан итә булып сыға. Сәскәләрҙе ундай урындарға һалған саҡта ғына күркәм күренә. Хәҙер инде шундай урындарҙа һулыған, кипкән гөлләмәләрҙе күҙ алдына килтерегеҙ. Барыбер аңлашылып бөтмәй был күренеш. Кем уйлап сығарғандыр сәскә бүләк итеү, иҫтәлекле урындарға сәскәләр һалыу йолаһын...

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Халыҡта "Ҡурпы сапҡан мандымаҫ" тигән бик тапҡыр бер мәҡәл-әйтем бар. Ҡурпының нимә икәнен беләһегеҙ: ул - бесәне йә игене сабып-һуғып алынғандан һуң шул уҡ йәйҙә киренән үҫеп сыҡҡан йәшел ыуыҙ үлән. Был мәҡәлдең нилектән шулай әйтелгәне хаҡында ла төрлөсә фаразларға мөмкиндер. Минеңсә, ул барыбер ҙә ергә, тупраҡҡа, тәбиғәт байлығына ҡарата һаҡсыл ҡараш-мөнәсәбәттән килеп сыҡҡандыр, тием.**

**Һөйөндөк АҪЫЛОВ.**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Варшава-Познань һөжүм итеү операцияһында

Варшава-Познань һөжүм итеү операцияһы барышында 7-се гв. корпусы частары, Пилица, Варта, Одер йылғалары, тиҫтәләгән каналдар аша сығып, дошманды үҙ территорияһында тар-мар итеүгә ҙур өлөш индерә. Корпус армия кимәлендәге мөһим оператив бурыстар үтәй: ул 1-се Белорус фронтының һул ҡанатын ҡурсалай һәм уксы соединениеларҙың алға табан хәрәкәтен тәьмин итә; шулай уҡ танк соединениелары дошман ғәскәренең Радом-Лодзь төркөмөн тулыһынса тар-мар итеүгә булышлыҡ итә, һөҙөмтәлә Варшава ҡалаһы азат ителә. Одер йылғаһына сыҡҡас, корпус 1-се Белорус фронты һәм 1-се Украин фронты араауығында дошманды эҙәрлекләй, уның тиҫтәләгән контратакаларын кире ҡаға. Беҙҙең яугирҙарыбыҙ, беренселәрҙән булып, Германияның Бранденбург провинцияһы еренә бәреп керә. СССР-ҙың Юғары Баш командование ставкаһы корпус атлыларының ҡаһарманлығын дәүләттең иң ҙур наградалары менән баһалай. 7-се гвардия атлы корпусына Бранденбург корпусы тигән маҡтаулы исем бирелә. Варшава-Познань операцияһы барышында корпустың шәхси составына өс тапҡыр Юғары Баш командующийҙың бойороҡтары менән рәхмәт белдерелә. Һуңынан барса яугирҙар "Варшаваны азат иткән өсөн" миҙалы менән бүләкләнә.

Корпус составында 16-сы гвардия Черниговатлы дивизияһы ла, 112-се Башҡорт атлы дивизияһы яугирҙарының әүәлге ҡаһарманлығына тоғро ҡалып, батырҙарса алыша. Польшаның Томашув-Мазовецки ҡалаһы өсөн барған алыштарҙа беҙҙең яугирҙарыбыҙ һәр даим авангардта бара, дошманды күп юғалтыуҙарға дусар итә. Полктарҙың хәрби хәрәкәттәре журналдарына ҡарағанда, 16-сы гв. атлы дивизияһы Варшава-Познань операцияһы барышында, немец частарын ҡыуа һәм тар-мар итә барып, 700 саҡрымдан ашыу юл үтә, дошмандың тере көстәрен һәм техникаһын ҙур юғалтыуҙарға дусар итә. Мәҫәлән, бер 62-се гв. атлы полкы ғына немецтарҙың 1470 һалдат һәм офицерын сафтан сығара һәм әсиргә ала, 2 танкты, 15 минометты, 3 зенит орудиеһын, 107 атты ҡулға төшөрә. Һуғыш ҡорбанһыҙ булмай: 62-се полктың 24 яугиры һәләк була, 100 кеше (шул иҫәптән 8 офицер) яралана. Дошман уты аҫтында полктың 70 аты үлеп ҡала. Совет хөкүмәте беҙҙең дивизиябыҙҙың Польша ерендәге хәрби уныштарына тейешле баһа бирә: 16-сы Ҡыҙыл Байраҡлы, II дәрәжә Суворов орденлы гвардия атлы дивизияһы илебеҙҙең иң юғары наградаһына - Ленин орденына лайыҡ була. СССР Юғары Советы Президиумының 1945 йылдың 19 февралендәге Указы менән дивизияның 60-сы гвардия атлы полкы Томашув-Мазовецки, Лодзь, Кутно, Гостыник, Ленчица ҡалаларын азат иткәндә батырҙарса алышҡаны өсөн Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә. Томашув-Мазовецкиҙы азат иткән өсөн 16-сы гв. атлы дивизияһының 58-се гв. атлы һәм 148-се гв. артиллерия-миномет полктары маҡтаулы Томашув исеменә лайыҡ була. Калиш ҡалаһын һәм Польшаның башҡа тораҡ пункттарын азат иткән өсөн 58-се һәм 62-се гв. атлы полктары, 148-се гв. артминполкы шулай уҡ Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*✓ Атайым башта ниндәй ғәскәрҙә хеҙмәт иткәндер, аҙаҡ, Башҡорт кавалерия дивизияһы ойошторолғас, шунда күсерәләр. Дивизия үткән юлды башынан аҙағынаса үтә. Дүрт тапҡыр яралана.*

# ”БАТЫРҘАРЫН

**Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Таңсулпан Ғарипованың атаһы Хизбулла Ғибаҙулла улы Мөхәмәтҡолов илебеҙ тарихындағы өс һуғышты башынан аҙағына тиклем үтеп, һуңғыһынан 1945 йылдың авгусында тыуған яғына әйләнеп ҡайта. Һуғыш ваҡытында емерелгән ауыл хужалығын аяҡҡа баҫтырыу өсөн билен биштән быуып, ең һыҙғанып эшкә тотона. Колхозда бригадир, ферма мөдире, колхоз рәйесе булып эшләй.**
**Йәнен аямай алышҡан өс һуғыш батыры Хизбулла Мөхәмәтҡолов тыныс тормошта ла ҡаһарманлыҡ күрһәтә һәм кешеләрҙең ғүмерен һаҡлап ҡалыр өсөн үҙенең йәнен фиҙа ҡыла. Быларҙың барыһы ла Таңсулпан Хизбулла ҡыҙының хәтирәләрендә.**



## Олатай һәм өләсәй тәрбиәһендә

Атайымды олатаһы Мөхәммәтсафа олатай менән өләсәһе тәрбиәләгән. Сөнки 9 йәшендә уның атаһы Ғибаҙулла олатай вафат булған. Райхан өләсәй ике бала менән тол ҡала. Элек тол ҡатындарҙы яңғыҙ ултыртмағандар. Темәстән уның бер туған ағаһы Әбүбәкер Хөсәйенов килеп, Райхан өләсәйҙе алып ҡайтып китә лә, икенсе кешегә кейәүгә бирә. Сөнки ҡатын-ҡыҙға алтмыш көндән артыҡ яңғыҙ ултырырға ярамаған. Атайым олатаһы менән өләсәһендә тороп ҡалған.

Атайым 18 йәшендә әрмегә алына һәм Төркөстан фронтына барып эләгә. Үҙе һөйләүе буйынса, ул разведкала булған. Шунда коммунистар партияһы сафына ингән. Төркмән, үзбәк йырҙарын шул фронтта йөрөгәндә өйрәнә, уларҙың йырҙарын башҡара торғайны. Һыуһыҙлыҡтан нық интеккәндәрен һөйләр ине. Хатта менгән аттарының кесе ярауҙарын көрөшкә тотоп көтөп тороуҙарын һөйләгәне хәтеремдә. Өс йәшендә атҡа менгән атайым джигитовкаға ныҡ оҫтара был фронтта. Ҡылыс уйнатыу булһынмы, сабып барған аттың бауыры аҫтынан сығыуымы, эйәр өҫтөндә торайып баҫып сапҡанда ла ал бирмәгән. Өс йәшлек сағында ҡолап төшөп, маңлайында ат тояғы эҙе лә булды, яра урынын сәстәре менән ҡаплап йөрөр ине.

## Атайым - Хәлил, әсәйем - Ғәлиәбаныу

Әсәйем данлыҡлы "Шағирҙың алтын прииск(ы)һында" - Силәбе өлкәһендәге Балҡанда тыуған. Ул мәҙрәсәлә лә, яңыса мәктәптә лә уҡыған. Үҙе әйтеүенсә, ул Ҡөрьәнде ете тапҡыр сыҡҡан, "Йәсин" һәм башҡа сүрәләрҙе ятҡа белде. Балҡандан 1912 йылда Темәскә күсеп килгәс, Әбүбәкер Хөсәйеновтың мәҙрәсәһендә уҡый. Шунан һуң комвуз бөткән Ырымбур өлкәһе Йөҙәй ауылы кешеһе Абдрахман Мортазинға кейәүгә сыға. Ире уны Өфөгә алып килеп, рабфакка урынлаштыра ла, үҙе Мәскәүгә "Ҡыҙыл профессура"ға уҡырға китә.Унда уҡып бөткәс, Ҡаҙағстандың Аҡтүбә өлкәһенә яуаплы эшкә ебәрәләр. Шунда йәшәй башлайҙар. Әсәйем унда уҡытыусы булып эшләй. Уларҙың Июлә тигән ҡыҙҙары тыуа. Был исемде ҡыҙҙарына эшселәрҙең июль ихтилалы хөрмәтенә бирәләр. Ҡыҙҙары 9 айлыҡ булғас, дизентериянан үлеп ҡала.

Әсәйем икенсегә ауырға ҡала. Шул йылдарҙа "Ҡыҙыл профессура" тамамлағандарҙың барыһын да аталар. Тәүге репрессиялар шунда башлана. Уның ирен дә аталар. Әсәйем ҡыҙы Венераны эйәртеп, 1932 йылда Күсейгә уҡытырға килә. Тап шул йылда атайым армиянан ҡайта. Уға тиклем 1924 йылда байҙарҙа ялланып көтөү көткән атайымды әсәйем шул саҡта яҙырға өйрәткән булған. Хәҙер инде атайым һуғышты үткән, утыҡҡан кеше, һомғол буйлы, мәрәкә һүҙле, оҫта йырсы.

Ауыл йәштәре спектаклдәр уйнай башлай. Уға тиклем дә әсәйем Өфөлә барлыҡҡа килгән театрҙарҙа уйнап, тәжрибә туплаған. Барлыҡ халыҡтарҙың да бейеүҙәрен оҫта бейеүсе лә була. Ауыл сәхнәһендә "Ғәлиәбаныу"ҙы уйнағанда атайым Хәлилде, әсәйем Ғәлиәбануыҙы башҡара. Шул спектаклдән һуң улар өйләнешә. 1935 йылда уларҙың Рауил атлы улдары тыуа. Атайымды Ворошилов исемендәге колхозға йылҡысылыҡ буйынса етәксе итеп ҡуялар. Тиҙ арала йылҡы малы үрсеп, меңләгән башҡа етә. 1936 йылда ул ике айғыры менән Мәскәүгә ВДНХ-ға юл тота.

1934 йылда атайым Белоретта колхоз рәйестәре курсында уҡый. Ул саҡта төшкән фотоһында түшендә "Ворошиловский стрелок" тигән значогы бар. Күрәһең, оҫта атыусы ла булғандыр.

Атайым етем ҡалған әбейҙәрҙе өйөбөҙгә алып ҡайтып ҡарай. Үҙенең өләсәһе лә беҙҙә торған, бәләкәй генә ике бүлмәле өйгә нисек һыйғандарҙыр. Мин тыуғанда ла Мәҙинә тигән инәй беҙҙә йәшәгән, уға тиклем дә тағы ла ике әбейҙе ҡарағандар. Уҡытыусы булып эшләгән әсәйемде быға нисек күндергәндер инде? Эштән бушаған арала атайым ауыл малайҙарын Эреташ тигән урында джигитовкаға өйрәтә башлаған. Советтар Союзы Геройы Тәфтизан Миңлегөлов тәүге күнекмәләрҙе ошонда үтә. Тәфтизанды мәктәптә әсәйем уҡытҡан. Үсмер бик тиктормаҫ һәм ҡулсыр булған, ат өҫтөндә аяғүрә баҫып сабыу уға бер нәмәгә лә тормаған.

## Аяҡтарын йыры һаҡлап ҡалған

Бөйөк Ватан һуғышы башланғанда атайымдарҙың өс балаһы тыуып өлгөрә. 1935 йылда тыуған Рауил ағай үлгән, 1936 йылда Фирҙәүес апай, 1938 йылда Илдар ағай тыуған. Һуғыш башланғандың икенсе көнөндә үк атайым ғариза яҙып, үҙ теләге менән һуғышҡа китә. Әсәйебеҙ, быға тиклемге тормошоноң күп өлөшөн ҡалаларҙа йәшәгән зыялы кешеләрҙең балаһы булараҡ, ауылдағы ирҙәр эшен белмәне, ҡулына балта, көрәк, һәнәк тотманы. Бөтә ирҙәр эше ауылдағы ҡатын-ҡыҙҙар елкәһенә тороп ҡалғанда атайымдың һуғышҡа китеүен әсәйем бик ауыр кисергәндер, тием.

Атайым башта ниндәй ғәскәрҙә хеҙмәт иткәндер, аҙаҡ, Башҡорт кавалерия дивизияһы ойошторолғас, шунда күсерәләр. Дивизия үткән юлды башынан аҙағынаса үтә. Дүрт тапҡыр яралана. "Ҡыҙыл атлылар" гәзитенең хәбәрсеһе лә була. Наилә Әхмәтйәнованың "Ҡыҙыл атлылар" тигән китабында Хизбулла Мөхәммәтколовтың да мәҡәләләре бар. Шул гәзиттәрҙә атайымдың "Ҡыҙыл йондоҙ" ордены менән наградланыуы тураһында Указ баҫылған. Сталинград янындағы һуғыштан 300 генә кеше тере сыға ала. Уларҙың араһында атайым да була. Ҡаты яралана. Уның аяғын ампутацияға әҙерләйҙәр. Быны ишеткәс, атай ятҡан еренән һағышланып, башҡорт халыҡ йырын һуҙып ебәргән. Уны ишетеп ҡалған 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының медик-санитар эскадроны өлкән хирургы Әхмәт Дәүләтов: "Әйҙә, аяғыңды дауалап ҡарайыҡ", - тигән. Шулай итеп, йыры аяғын ҡырҡтырмай алып ҡала.

Әйткәндәй, Башҡортостан Республикаһы Министрҙар Кабинетының 172-се ҡарары менән 1995 йылдың 12 майында Өфөнөң 10-сы профессиональ лицейына Әхмәт Сәғәҙәтгәрәй улы Дәүләтовтың исеме бирелде. Лицейҙа Әхмәт Дәүләтовҡа музей асылған. Уның стеналары көрән ҡыҙыл күн менән көпләнгән. Шунда бик күп кешеләрҙең исем-шәрифтәре теркәлгән. Уларҙың араһында минең атайымдың исем-шәрифе лә яҙылған. Күрәһең, был врач һуғышта кемдәрҙең ғүмерен һаҡлап ҡалған, шуларҙы яҙғандарҙыр.

1945 йылғы Бөйөк Еңеүҙән һуң атайымдарҙы япон самурайҙарына ҡаршы Алыҫ Көнсығышҡа ебәрәләр. Атайымдың шундағы һаҙлыҡ урындарҙа ҡабан сусҡаларының күплеге хаҡында һөйләгәне хәтерҙә. Ҡабандар кешеләргә ташланып, тиҙ арала ашап бөтөрөүе хаҡында ла һөйләне. Бер һалдаттың хатта итеге эсендә аяғы ғына тороп ҡалған. Уның был һөйләүҙәренән күңелемдә ауыр хәтирәләр тороп ҡалған.

## Ғаиләнең һыйырһыҙ ҡалыуы

1941 йылда һуғышҡа киткән саҡта атайым ғаиләбеҙҙе быҙаулы һыйыр менән ҡалдырып китә. Әммә властар килеп:" "Хизбулла Мөхәммәтколовтың түләмәгән һалымы ҡалған", - тип, беҙҙең һыйырҙы алып сығып китәләр. Һыйырҙың 20 көнлөк кенә быҙауы була, быҙауы ла аслыҡтан ятып үлә. Әсәйем барып юллап ҡарай, тик һыйырҙы кире ҡайтармайҙар. Ул Сталинга хат яҙа. Госпиталдән һуң атайыма бер аҙналыҡ отпуск бирәләр. 1944 йылда берәүҙе лә ялға ҡайтармағандар, күрәһең, әсәйемдең хаты урыненә барып еткәндер. Атайым ҡайтҡас та район үҙәгенә барып, тикшертә, бер тин дә бирәсәге булмауын иҫбатлай һәм быҙаулы һыйыр бирергә тигән ҡарар сығарта. Теләгенә ирешкәс, кире һуғышҡа китә. Һыйыр булғас, ғаиләбеҙ аҡҡа тейенеп ҡала.

Бер мәл йәй көнө әсәйем һыйырын һауып ултырғанда малайын эйәрткән бер мәрйә килеп инә. Һорағастары, көрөшкәләренә һөт һауып бирә әсәйем. Мәрйә күршеләрендә туҡталған була. Әсәйем һыйырын һауғандан һуң кискелеккә үрешкә сығарып ебәрә. Иртәнсәк һыйыры ҡайтмай. Ныҡлап эҙләй башлаһалар, малҡайҙың баш-тояҡтарын ғына табалар. Баяғылар Йылайыр урыҫтары булып сыҡҡан. Улар һыйырҙы һуйып, бәләкәй арбаларына тейәп алып китәләр. Күргән кешеләр була. Әсәйем колхоздан ат алып, арттарынан төшөп, Йылайырға тиклем эҙләп бара. Йылайырҙа тегеләрҙең эҙҙәре юғала. Шулайтып, бер һуғыш осоронда беҙҙең ғаилә ике тапҡыр һыйырын юғалта.

Һуғыш ваҡытында дүрт йыллыҡҡа тороп ҡалған Күсей мәктәбендә әсәйем бер үк ваҡытта директор ҙа булып тора. Зифа Баязитованың әсәһе Сәкинә апайҙы Темәс педучилищеһында уҡытып, эшкә ала. Тағы ла техничка Хәбибә инәй була, улар, йәмғеһе өс кеше, мәктәптә тороп ҡала. Һуғыштың иң ауыр ваҡытында ас балаларҙы улар уҡыта. Утынға ла үгеҙ егеп, урманға үҙҙәре бара. Шунан әсәйем мәктәп янындағы баҡсала йәшелсә үҫтереүҙе ойоштора. Унда үҫтереп алған һуған, кишер, кәбеҫтә һәм картуф мәктәп балаларын ашатыуға ярап ҡала. Ашап алған балаларҙың күҙҙәрендә осҡон барлыҡҡа килә торғайны, тип һөйләй торғайны. Ауыл кешеләренә фронттағы һалдаттарға хат яҙырға ла ярҙам иткән әсәйем. Балалар уҡытҡан өсөн аҡсаларын заемға тотоп торғандар, ҡулдарына аҡса эләкмәгән. Аслыҡтан аяҡтары шешенгәс, әсәйем Күсейҙән ете саҡрымда ятҡан Ишбирҙеләге руда идаралығына, Малятов тигән кешегә барған. Оят булһа ла, ойоғон сисеп, аяғын күрһәт-

**✓ *Колхозсыларҙың астан-ас йөрөгәнен күреп, бер саҡ атайым бер биҙрә бойҙайҙы һоҫоп ала ла, ҡатындарҙың ҡулдарына тоттороп: "Бар, ҡурмас ҡурып ашағыҙ", - ти. Быны өсөн уны саҡ партиянан сығармай ҡалдыралар.***



кән. Шунан идаралыҡ етәкселеге икмәк бирергә ҡарар сығара. Әсәйемә ете булка икмәк бирәләр. Ҡайтышлай ҡар һыуына манып, икмәк ашап ала. Быларҙы әсәйем иламайынса һөйләй алмай торғайны.

Енеүҙе нисек ҡаршы алыуҙарын да һөйләр ине әсәйем. Һуғышта батырҙарса һәләк булған Тәфтизан Миңлеғоловтың өйҙәре тапҡырынан үткәндә туҡтап салют бирәләр.

### Туғыҙ йыллыҡ мөҙҙәт

1945 йылдың 29 августында атайым өйгә ҡайтып инә. Беҙҙең яҡ урамда ике генә кешенең атаһы һуғыштан ҡайтҡайны. Шуға күрә "Атай!" тип өндәшеүҙәр бик ишетелмәне. "Атай" һүҙен әйтә алмаған күптәр үҫеп етеп, үҙҙәре атай булып бөттөләр. Илдар ағайым атайыбыҙ һуғышҡа киткәндә ике йәш ярымда ҡалған. Атайыбыҙ һуғыштан ҡайтҡанда ағайым ҡапҡанан һалдат йөрөгәнен күреп, бер саҡ атайым бер биҙрә бойҙайҙы һоҫоп ала ла, ҡатындарҙың ҡулдарына тоттороп: "Бар, ҡурмас ҡурып ашағыҙ", - ти. Быны өсөн уны саҡ партиянан сығармай ҡалдыралар. Бер йылға һынау мөҙҙәте бирәләр. Атын тартып алалар.

Ласынов Сәйетғүмәр ағай атайымдың нисек итеп үҙҙәрен кәбән ҡойорға өйрәткәнен һөйләй торғайны. Бер көндә атайым ун бер кәбән һалған. Үҫмерҙәр күбә тарттырып ярҙамлашып йөрөгәндәр. Партия шелтәнен алып ташлатыр өсөн шулай тырышҡандыр инде...

Аҙаҡ, коммунист булараҡ, иң ауыр эрҙә һин эшләргә тейешһең, тип фермаға мөдир итеп ҡуялар. Һуғыш ваҡытында ситән кәртәләр емерелеп бөткән була.

Бер саҡ фермаға һыйыр һарайы һала башланылар. Өрләклек бүрәнәләр алып ҡайтырға тип, атай бер нисә кеше менән Сәксәйгә китте. Август ине. Түбәнең шәп ваҡыты. Машиналары булған. Нинә уны Баймаҡҡа алып бармағандарҙыр? 45 йәшлек өрләктәй фронтовикты ҡарап тороп үлтерәләр. Ул төнгә сәғәт икелә йән бирә. Коммунист булып йәшәнә лә, йән бирер алдынан өс тапҡыр "Аллаһ" тип әйткән...

Атайым 1945 йылдың 29 августында һуғыштан ҡайта һәм 1954 йылдың 29 августында үлеп ҡала. Сталинград янында ҡамауҙа ҡалғанда ул: "Ошо мәшхәрҙән ҡайтып, 9 йыл йәшәһәм, үлһәм дә үкенмәҫ инем", - тиғән. Был осраҡлы хәлме, әллә әйтеүе фәрештәләрҙең "Амин" тигән сағына тура килгәнме, һуғыштан һуң теүәл туғыҙ йыл тигәндә гүмере өҙөлдө...

Атайымдың китеүен бик ауыр кисерҙем. Уның тураһында һуңғы 3-4 йылда ғына иламайынса һөйләй ала башланым. Уның йәшәүе балҡыш булһа, донъянан иртә китеүе гүмерлек тетрәнеү булды.

йырҙы башҡара ла, шунан тарихын һөйләй торғайны.

Күсей клубына Өфөнән артистар килгән саҡтар ҙа булған. Бер саҡ Хәбир Ғәлимов килгән. Ул сәхнәнән ниндәйҙер халыҡ йырын йырлап торғанда залдан: "Беҙҙән Хизбулла йырлап күрһәтһен", - тип ҡысҡырғандар. Нығ һорағастар, Хәбир Ғәлимов үҙе лә залға төшөп һорағас, атайым сәхнәгә сыҡмайынса йырлап ебәргән. Уны тыңлаған Хәбир Ғәлимов: "Һеҙгә Өфөгә килергә кәрәк, филармонияға, бындай тауыш менән бында ятырға ярамай", - тиғән. Артист, ҡайтҡас, филармония етәкселеге менән һөйләшеп, атайыма хат яҙған. Әсәйем ул ваҡытта уҡытып йөрөгән. Атайым балаларҙы ҡалдырып китер кеше тапмаған. Һуғыштан шул хәтлем булып миктәгән ауылды ла ташлай алмағандыр инде. Етмәһә, беҙҙең ауылдан һуғышҡа киткән 78 ир әйләнеп ҡайтмаған, хужалыҡта

# ИҪКӘ АЛҒАНДА...”

инеп килгәнен күргәс, өйгә йүгереп инеп китеп, башта фотоһына ҡараған, шунан һуң ғына кире сығып, атайыбыҙҙың ҡосағына ташланған. Ул саҡта бөтә нәмә, атай ҡайтһа, икмәк булыр, тамаҡ туйыр тигән инаныуҙар атай менән бәйләнгән бит. Хәҙерге замандың иң ҙур фажиғәһе "Атай!" тип әйтә алмаған малайҙарҙың ҡартайыуы...

Һуңғы сиккә етеп бөлгөнлөккә төшкән хужалыҡтарҙы күтәреү һуғыштан ҡайтҡан ирҙәрҙең елкәһенә төштө. Атайым да ҡайтыу менән бригадир, колхоз рәйесе булып эшләй. Уны ҡыш булһа, Сәксәйгә, Бөрйәнгә бүрәнә ҡырҡырға алып китерҙәр ине. Ферма мөдире булғас, төүге һыйыр һарайын атайым һала башланы.

Әсәйем мине 45 йәшендә, 1947 йылдың сентябрендә тапҡан. Минән һуң Азамат ҡустым тыуған. Әсәйемә ауыр булмаһын типтер инде, атайым мине үҙе менән эшкә алып йөрөгән. Иҫ белгәнемдән атайымдың арбаһына ултырып, бергә йөрөй башлағанмын. Бригада ҡырҙа ҡуна ятып бесән эҙерләй. Атайым менән икебеҙгә айырым ҡыуыш. Ағайым башҡа малайҙар менән айырым ҡыуышта йоҡлап йөрөй. Ямғыр яуып ебәрһә, ауылға мунсаға ҡайтабыҙ. Ауыл малайҙарының яртыһын атай йылға балыҡ тоторға ҡалдыра, ә ҡалғандары - тырмала. Быным менән ул уларҙың тамағын да хәстәрләгән, күрәһең. Ауылда ҡалһалар, нимә ашаһындар?

Ул саҡта төп эшсе көстәр апайҙар булды. Игенде кисеп йөрөһәләр ҙә, уларға бер килограм да иген яҙып бирмәйҙәр. Улар ас көйгә йөрөп эшләйҙәр. Колхозсыларҙың астан-ас аҙағы ине. Бүрәнәләр тейәп ҡайттылар, тик атайҙың төҫө ҡасҡайны. Мин, һәр саҡтағыса, уға ҡаршы йүгерҙем, тик ул мине күтәреп алманы. Кискеһен буш ваҡытында колхоз саналарын ремонтлай торғайны. Был юлы ла нимәлер эшләп маташа, тик элеккесә йырламай. Минә: "Әйҙә, ҡыҙым, өйгә инәйек, өшөтә башланы", - тине. Төнгәрәк әсәйем йәйге өйгә ут яғып ебәрҙе. Иртәнсәк атай бөтөнләй ҡалтырап ята. Кемдер перцовка эсереп ҡарарға кәңәш итте. Эсте лә, ҡоҫто. Ҡустыһының улы Бикйән ағай пар ат егеп килде. Атайымды арбаға күтәреп сығарып һалдылар. Иртәгәһенә урамға сығып, ҡул-битемде йыуырға тип торғанымда, беҙҙең менән бергә йәшәгән Нурислам менән Һандуғас йүгереп килеп: "Таңсулпан! Таңсулпан! Һинең атайың үлгән!" - тинеләр. Ҡомған бер яҡҡа, һабын икенсе яҡҡа осто, өйгә индем дә "Атай үлгән!" тип ҡысҡырҙым. Төшкә табан атайымдың ҙурайтылған фотоһын килеп алып киттеләр. Атайымды Түбәнән алып ҡайтҡандар. Клуб эргәһендә митинг үтте.

Аҙаҡ асыҡланыуынса, урманда полуторкаға бүрәнә тейәп торғандарында аҫтағы ике кеше тағы бер бүрәнәне ерҙән алырға әйелгән булған. Шул саҡ ҡапыл йөктәге бүрәнә шыуып төшә башлаған. Быны күреп ҡалған атайым аҫтағы ике кешенең башына төшмәһен өсөн үҙенең башы аша өрләклек бүрәнәне күтәреп алып ташлаған. Шул саҡта көсәнеүҙән уның эсәге сейәлгән...

Уны Түбә дауаханаһында ҡотҡарып ҡалырлыҡ мөмкинлек булманымы икән? Унда Ленин орденлы табип эшләй

### Өфөләргә барған булһа...

Атайым феноменаль йырсы ине. Көтөү көтҡәндә Һарыҡтау башына менеп йырлаған. Инәйҙәр һөйләүенсә, улар кискеһен һыйыр һауғанда атайымдың йырын тыңлап, илап ултырыр булған. Һуғышҡа тиклем Баймаҡтың завод клубында концерт-конкурс була. Шунда атайым йырлағанда тәҙрә быялалары ҡойолоп төшкән тип һөйләйҙәр.

Беҙгә фамилия биргән Мөхәммәтҡол олатайҙың бер туған ағаһы Айытҡол. Айытҡол шәп ҡурайсы булған. Беҙҙең шәжәрәгә ҡараған Бирғәле сәсән дә шәп ҡурайсы һәм йырасы булған. Атайымдың моң тамыры шуларҙан килә. Бирғәле сәсән көрәшсе лә була. Ырымбурҙа үткән йыйында урыҫ батырын да, ҡаҙаҡ батырын да еңеүе билдәле. Мөхәммәтҡол олатай мәрхүм булғас, атайым уның ағаһы Айытҡолдоң тубығына ятып, ҡурай тартҡанын, йырлағанын, йырҙарҙың тарихын тыңлаған.

Ғата Сөләймәнов, Кәрим Дияров килеп, атайымдан йырҙарҙы йырлатып, һүҙҙәрен яҙып алып йөрөнә. Әсәйем: "Ошо Ғата менән Кәрим килһә, атайың һуңғы һарыҡты һуйып булһа ла, ҡунаҡ итә бит", - тип әйтер ине. Атайым: "Мин Кәримгә башҡорт халҡының йөҙ йырын яҙҙырҙым", - тип һөйләгән. Кәрим Дияров 1957 йылда "Башҡорттоң йөҙ йыры" тигән китап сығара. Моғайын, ул йырҙар араһында атайымдан яҙып алғандары ла барҙыр. Мин ул китапты күрмәнем, әммә "Башҡорт халыҡ ижады"ның "Йырҙар" томында "Мөхәммәтҡолов Хизбулланан яҙып алынды" тигән яҙыуҙар бар. Атайым башта эшләрлек көслө зат та бик аҙ булған бит...

Шул рәүешле атайым, сайырыуҙы ҡабул итмәй, ауылда тороп ҡала.

Ә бит Хоҙай Тәғәлә уға ошондай сайырыу менән ғүмерен һаҡларлыҡ мөмкинлек биргән, атайыма уны ҡабул итергә генә кәрәк булғандыр. Ысынлап та, Өфөгә китһә, теге урмандағы фажиғәгә тарымаған да булыр ине. Өфөгә барып йырлап йөрөһә, бәлки, тауышы ла магнитофон таҫмаһына яҙылып ҡалыр ине. Ә былай үҙе лә, таланты ла ергә күмелде. Тупраҡ баҫты.

### Хизбулланың һары башлы ҡымыртҡаһы

Әсәйем 84 йәшендә 1986 йылда донъя ҡуйҙы. Бик бәхтә кеше булды. Хатта ҡартайған көнөндә лә иртән тороу менән сәстәрен икенән үрмәйенсә, сәй эсергә ултырмай торғайны. Сикә сәстәре генә ағарҙы. Әсәйем минең ижадсы булыуымды белеп китте. Яҙыу өҫтәлемдә ҡағыҙҙарым ятып ҡалһа, шуларға бер кемде лә ҡағылдырмай, эргәһендә һаҡлап ултырыр ине.

Атайым да миндә ижадсы һәләте булыуын аңғарғандыр. Мин тыуғас, атайым оҫталар һиплән, йүнәтеп ятҡан өйөбөҙ эргәһенә килә. Унда Түбәнән килгән мулла Әхмәт апа намаҙ уҡып ултырған була. Атайым ҡыҙы тыуыуы хаҡында шатлығын еткерә. Мулла уға: "Беләм. Бөгөн төшөмдә күреп уяндым. Бик өлөшлө бала тыуҙы. Илатмағыҙ, илаһа - күҙ йәше, рәнйетһәгеҙ- рәнйеше төшөр", - тиғән. Әхмәт апаның иҫкәртеүен беҙҙең өйҙә нығ тоттолар, һаман да тоталар. Атайым иҫән саҡта бигерәк тә иркә үҫтем. Мине "Хизбулланың һары башлы ҡымыртҡаһы" тип йөрттөләр. Ҡыҫҡаһы, кейәүгә сыҡҡансы иркә булдым. Туйҙарҙан мине ҡалдырмай алып йөрөнөләр. Туй бөткәнсе атайымдың тубығына ятып, йырҙар тыңлар инем. Бер ваҡытта ла минә "Юҡ, ҡуй, ярамай" тип әйтмәне атайым. Урманға утынға барғанда ла мине ҡалдырманы. Ағастың гел ҡороғанын ғына утынға ҡырҡты. Йәш ағастарҙы ҡырҡманы.

Мин атайымдың беренсе тапҡыр илағанын Сталин үлгән көндә күрҙем. Урындыҡта тәгәрәп йөрөп иланы. Атай һынлы атайым илағас, мин тетрәнеү кисереп, шиғыр сығарҙым хатта.

Һуғыш кешене ҡырыҫайта, бәгерен ҡатыра, тиҙәр. Атайым улай булманы...

Атайым үҙен аяманы, ғүмерен бөткәнсе кешеләргә бирҙе. Рәшит Ниғмәти "Коммунист" тигән шиғырын минең атайҙан алып яҙғандыр тип уйлай торғайным бала саҡта. Тап шулай булғаны өсөн дә 45 йәшендә генә баҡыйлыҡҡа күсте лә инде ул.

Атам августа китте, ә март айы тирәһендә шул тиклем ныҡ һағындым уны - яттым да, ҡабат торманым. Һағышымдан һарғайҙым. Әсәйем мулла саҡырған. Мөхәмәт мулла апа ясин сыҡҡанда, мин терелеп киткәнмен. Әсәйемә атайымдың ҡәбер тупрағын күкрәгемә баҫырға тип кәңәш биргәндәр. Ҡәбер һыуығы ҡайғыһын тартып алыр, тигәндәр. Әсәйем, уларҙың кәңәшен тотоп, зыяратҡа алып барып, ҡәбер тупрағын күкрәгемә баҫты. Шунан һуң мин көн һайын атайымдың ҡәберенә үҙем бара башланым. Башта әхирәт ҡыҙҙарҙы ла алып бара торғайным, аҙаҡ эсәләре, өләсәләре уларҙы тыйҙы. Үҙем генә йөрөнөм. Атайымдың ҡәбере минең өсөн икенсе өйөм һымаҡ ине.

Әсәйебеҙ баҡыйлыҡҡа күскәс, уны ла Ирәндек тауҙары аша Күсейгә алып килеп, атайымдың эргәһенә ер ҡуйыныа тапшырҙыҡ. Ауылда әсәйемдең исемен йөрөткән урам бар. Мәктәпкә таҡтаташ ҡуйылған. Ә бына ил өсөн, колхозсыларҙың етеш тормошо өсөн, кешеләр өсөн йәнен фиҙа ҡылған, өс яу үткән атайымдың исемен мәңгеләштереү буйынса әлегә бер нәмә лә эшләнмәгән...

Уның "Ҡыҙыл йондоҙ" орденынан тыш, "Батырлыҡ өсөн", "Берлинды алған өсөн" һәм башҡа миҙалдары ла булды. "Батырлыҡ өсөн" миҙалын алғы һыҙыҡта булған һалдаттарға ғына биргәндәр. Атай, Хизбулла Мөхәмәтҡолов, ғүмере буйы алғы һыҙыҡта булды. Шулай булмаһа, 45 йәшендә генә гүр эйәһе булмаҫ та ине. Ирекһеҙҙән шағирҙың: "Батырҙарын иҫкә алғанда, онотмаһын мине лә тыуған ил" - тигән юлдары иҫкә төшә. Уйландыра торған юлдар, намыҫтарға һуғып һиҫкәндерә торған юлдар...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**яҙып алды.**

**✓ Тәүге ҡан ҡойош, яңы ғына һөйләшеп торған иптәшеңдә юғалтыу әҙһеҙ үтмәне егеттәр өсөн: яуаплылыҡ артты. Эргәңдәге кешене һаҡлау, ҡәҙерләү, юҡҡа эләгешмәү, иңеңдә-иңгә ҡуйыу кәрәклеген өнһөҙ аңлатты.**



# ГЕРОЙҘАР ВАҠЫТЫ

*Зөлфирә ҠАҘАҠБАЕВА*

*(Хикәйә)*

*Махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан һәм һәләк булған батырҙарға арнайым.*

* * *

...Атаһы үлгәндә Зарифҡа 14 йәш ине. Ҡапыл ғына китте ҡәҙерлеһе: эштән ҡайтып, тамаҡ бешкәнсе генә тип ятып торғайны, уянманы ла ҡуйҙы. Инфаркт. Тәүҙә башҡалар ыңғайына иланы үҫмер. Йәйләп тынысланғайны ла. Беләгенә көс тә ултырмаған малайға утын-бесән эше, йорт-ҡура мәшәҡәте ятҡас, үҙәгенә үтте лә... үпкәләне мәрхүм атаһына - ни өсөн ташлап китте ул өс балаһы менән йәп-йәш ҡатынын? Ошолай атайһыҙ ыҙалап йәшәһендәр тинеме икән ни? Оҙаҡ ебәрмәне был үпкә тойғоһо Зарифты, шул арҡала йәшәүенең йәме китеүен үҙе аңламаны. Яҡшы уҡыусылар иҫәбенән төшөп ҡалыуына ла ҡайғырманы, яратып шөғөлләнгән спорт секцияларын да ташланы. Көндән-көн бар нәмәгә битараф була барыуын үҙе төшөнөп тә етмәне шикелле. Өйләнеүен, балаһы тыуыуын, ғаилә ҡороуын, мобилизацияға эләгеп китеүен дә әллә нисек вайымһыҙ ҡабул итте. Бәлки, шулай булыуы уны тетрәнеүҙәрҙән, башҡа иптәштәре кеүек ҡайғырыуҙан, һағыныуҙан, яҡындары тип өҙгәләнеүҙән һаҡлағандыр ҙа... Зариф ҡына ошоғаса тып-тыныс, робот һымаҡ йөрөнө...

* * *

"Ҡыҙыу нөктә"лә булғандарҙың барыһын да бында "чечендар" тип йөрөтәләр. Афғанда, Тажикстанда, Чечняла булған өлкәнерәк йәштәге ир-ат тәүҙә башҡаларҙы эшкә һанамай, айырым йөрөргә, йәштәргә баш булырға, үҙ йомоштарына йүгертергә самаланы. Элекке армиялағы "дедовщина" ғәләмәтен дауам иттерергә ине иҫәптәре. "Беҙ ҡулға ҡорал тотоп өйрәнгән, урман-һаҙлыҡта нисек йөрөргә, дошманды нисек эҙәрлекләргә беләбеҙ! Шуға күрә беҙҙе тыңларға тейешһегеҙ! Һеҙ еүеш танауҙар! Бер йыл ғына казарма һауаһын һулап, бер тапҡыр ҙа мылтыҡ, автомат тотмаған көйө беҙҙең менән үҙегеҙҙе тиң ҡуймағыҙ! Бына ысын һуғышҡа инһәк, беҙҙе күрерһегеҙ әле!" Ошондайыраҡ ине "чечендар"ҙың ҡарашы. Әммә көтөлмәгән хәл барыһын да үҙ урынына ҡуйҙы.

Улар әле алғы һыҙыҡта түгел. Алыҫта снаряд шартлағаны, пулеметтан йә танктан атҡан тауыштар ишетелеп торһа ла, улар эргәһендә атыш булмағас, резервистарҙа был һуғыш ҡағылмай ҙа кеүек ине. "Чечендар"ға ризаһыҙлыҡ күрһәтеп, әммә асыҡтан-асыҡ ғауғаға барып етмәгән саҡ. Тегеләр эре ҡиәфәттә бергә йыйылып гәп ҡора, еүеш танауҙарҙан көләп, үҙҙәренең жаргонында ғына һөйләшеп, өймәкләшеп баҫып тора ине. "Еүеш танауҙар" төрлөһө-төрлө эргә һибелеп, кемеһе тәмәке тарта, кемеһе гәзит осмотон уҡый, кемеһелер усаҡ тоҡандырып маташа, Зариф менән ауылдашы, йығылған ағасҡа терәлеп, һөйләшеп ултыра. Ғәҙәттәге тып-тыныс көн. Инде айҙан ашыу яталар был һирәк ағаслыҡ араһында. Көнитмештәренә лә күнектеләр, походный кухняла бешерергә лә өйрәнделәр. Тынлыҡты бүлеп, өҫтә нимәлер гөүләне. Ҡарап-ҡарап алдылар, ныҡлап иғтибар итеүсе булманы. Зарифҡа был умарта гөүләүенә оҡшағандай тойолдо. "Был ерҙә күс айырмайҙыр инде, моғайын. Етмәһә, ноябрь аҙағында. Хәйер, бында ҡар яуғаны юҡ, ныҡлап һыуыҡ та төшмәгән", - тип ул өҫтө байҡаштырҙы. Әммә ҡорт күсенә оҡшаған нәмә күрмәне. Бер нисә минуттан ағаслыҡта тәмле бутҡа еҫе таралды.

- Иптәш резервистар, ашарға әҙер! - тип күңелле ҡысҡырҙы ашнаҡсы егет. Зариф менән ауылдашы урындарынан ҡалҡынып та өлгөрмәне, ҡапыл ер тетрәне.

- Гөрҫ! Гөрҫ! - Һауа тулҡыны Зарифтарҙы әллә ҡайҙа алыҫҡа атып бәрҙе. Дыңҡ итеп кенә ҡалдылар, күҙ алды ҡараңғыланды. Дары, төтөн еҫе, ҡом-тупраҡ ауыҙға, ҡолаҡҡа тулды... "Снаряд!" - тигән уй килде егеттең башына. Именме ул, әллә яраландымы? Иләп кенә аяҡтарын, ҡулын шылдырып ҡараны. Юҡ, ауыртмай, ҡуҙғатып була. Ул ҡом-тупраҡ тулған күҙҙәрен ышҡып асып, тирә-яғына ҡараны. Унан-бынан һалдаттар тора башланы, кемеһе йөшеренгән ерәнән генә башын сығарҙы. Егеттәрҙең күҙ алдына ҡот оскос күренеш килеп баҫты: әле генә көләшеп торған "чечендар"ҙан бер нәмә лә ҡалмағайны! Тиҫтәнән артыҡ ир-атттың кәүҙәһе туҙырашып ята! Ҡанға, тупраҡҡа, ағас, япраҡҡа болғанып, ҡот оскос күренешкә әйләнгән!.. Зарифтың ауыҙында ҡапыл илауға оҡшаш ауаз яралды ла, һаҡыҡ әсе нәмә булып бөрөп сыҡты. Ул кәкрәйеп, бөлтерәп торған ерәнән үҙ ҡоҫҡолоғона тонсоға яҙҙы!.. Кемдер ыңғырашты, ярҙам һораны, һүгенде! Күпмелер секундҡа тын ҡалған ағаслыҡ мәхшәргә әйләнде: йүгерешә, ҡысҡырыша, башланылар. Тупраҡ, ҡан өйөмө араһынан иптәштәрен һөйрәп сығарҙылар. Кемдер енелсә яраланған, кемдәндер ярты кәүҙә генә ҡалған, кемдер аяҡһыҙ, кемдер ҡулһыҙ, хатта башһыҙ...

* * *

Шулай осрашты Зарифтарҙың взводы тәүге үлем менән күҙмә-күҙ. Һигеҙ "чечен"ды алып китте тәүге сирҡаныс... Утты-һыуҙы кискәнһеңме, быҒаса һуғышта ҡатнашҡанһыңмы, ҡорал тота беләһеңме, өйҙә ҡатының, балаң бармы, йәшһеңме, тәжрибәлеһеңме, 18 йәшлек маңҡа малайһыңмы тип һорап торманы. Үлем өсөн барыһы ла тигеҙ! Уға һинең кемлегең мөһим түгел! Ошоно аңлатты һуғыш дөрөҫлөгө егеттәргә. Күктә зырлаған нәмәнең дә умарта ҡорто түгел, дрон икәнен төшөндөрҙө. Өймәкләшеп торорға ярамағанын, квадрокоптер осоуын күреү менән йәшеренергә, берәрләп таралышырға кәрәклеген аңлатты... Тәүге ҡан ҡойош, яңы ғына һөйләшеп торған иптәшеңдә юғалтыу әҙһеҙ үтмәне егеттәр өсөн: яуаплылыҡ артты. Эргәңдәге кешене һаҡлау, ҡәҙерләү, юҡҡа эләгешмәү, иңеңдә-иңгә ҡуйыу кәрәклеген өнһөҙ аңлатты. Ҡот оскос миҫал менән. Үлем менән...

Ошо тәүге сирҡаныс алыуҙан, тәүге тапҡыр иптәштәренең һәләк булыуынан һуң ғына Зариф йәшләй үлгән атаһын ғәфү итте, шикелле. Утлы яу юлы үткән "чечендар" ҙа, атаһы ла үҙ теләктәре менән үлмәне бит! Аш бешкәнсе ял итәм, тип диванға һуҙылған атаһы 36 йәшлек һылыу ҡатынын, 14 йәшлек Зарифты, береһе 9, икенсеһе 6 йәшлек ҡыҙҙарын юрый ҡалдырып киттеме ни?!Уның әле йәшәргә, яңы йорт һалырға, балаларын яҡшы вуздарҙа уҡытып, кеше итергә тигән хыялы юҡ инеме ни? Үҫмер ул тарала уйламаны ла, үҙен ауыр эштәргә тотонорға мәжбүр иткәне өсөн генә, әсәһен күҙ йәштәренә мансып киткәне өсөн генә үпкәләне ғәзиз кешеһенә. "Ғәфү ит, атай! Тыныс йоҡла! - тип уйланы ул күҙҙәрен йондоҙҙарға төбәп. - Улың һинең йөҙөңә ҡыҙыллыҡ килтермәҫ! Яҡшы һуғышсы булырмын! Яҡшы ил һаҡсыһы! Әсәйемде, һеңлекәштәрҙе бер ҡасан да илатмам! Иң матур кейемдәр, иң тәмле аш, иң яҡшы автомобиль уларҙыҡы булыр! Европаны баҫып алған нацистарҙы ғына юҡ итәйек, бына тигән итеп йәшәрбеҙ, атай!"

* * *

Уларҙың 4 ротанан торған батальонында тәүге үҙгәрештәр ошо үлемесле тәжрибәнән һуң башланды. Санитарҙар һайлап ҡуйылды. Кем яраны эшкәртә, бәйләй белә, йәки кем теләй - шуларҙы тәғәйенләнеләр. Бер взводта фельдшер егет тә бар икән, был үҙе бер бүләк буласағын әле резервистар белмәй. Сәғәт һайын алмашынып торған ҡарауыл ҡуйырға, тирә-яҡты байҡап, командирға доклад яһап торорға тейешле график билдәләнде. Рациялар эшкә егелде. Етмәгән рацияны үҙ аҡсаларына барып һатып алып килделәр. Бер нисә тепловизор - төндә күреү аппараттары ла һатып алынды. Көн һайын практик күнекмәләр менән бер рәттән, теоретик занятиелар үткәрелә башланы. Кемдәрҙер автомат, пулемет менән эш итһә, бер нисә егет менән Зарифҡа гранатомет эләкте. РПГ - ручной противотанковый гранотомет тип аталған был ҡорал, өс тапҡырға ауырыраҡ булыуын иҫәпкә алмағанда, автоматтан әллә ни айырылмай ҙа. Танкыға, вертолетҡа һәм башҡа төр техникаға ҡаршы ҡулланылыусы реактив граната менән йыһазландырылған гранатомет хәҙерге армияла киң ҡулланыла икән. Уның төҙөлөшөн, тиҙлеген, ыңғай һәм кире яҡтарын биш бармағы кеүек өйрәнде Зариф. Сөнки уның ярты юлда туктап ҡала торған ғәҙәте юҡ: башлаған икән, бөтөрөргә. Берәй нәмәгә тотонған икән - энәһенән ебенәсә белергә тейеш. Унан-бынан тигән төшөнсәне онота, төбөнә төшмәй ҡуймай барыбер. Нимәнелер аңлап етмәй икән, ярҙам һорарға ла тартынмай, башлыраҡ, белемлерәк кешеләргә мөрәжәғәт итеүҙе хурлыҡҡа һанамай.

"Белмәү ғәйеп түгел, белергә теләмәү ғәйеп", - тип ныҡыны уны ятраҡан уҡытыусыһы. Мәктәптә иң ныҡ хөрмәт иткәне - рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы ине. Китап уҡырға яратыуы арҡаһында, ахыры, уның дәрестәрен айырыуса яратты. Әммә ҡыҙыу холҡо арҡаһында, башҡалар тыныс ҡына тыңлап ултырғанда, үҙ фекерен әйтеп, бәхәсләшеп тә китәләр ине дәрес ваҡытында. "Ни өсөн был йәки теге персонаж шулай эшләгән? Ул бит икенсе төрлө юлды һайлай алыр ине! Шуға күрә ул хаҡлы түгел! Еңел юлды һайлап, юғалтыуһыҙ килеп сыҡҡан өсөн беҙ был геройҙы хөрмәт итергә тейешме?" Ошондай юҫыҡта байтаҡ башын ҡатырҙы ул уҡытыусыһының.

Ә бер дәрестә "Батырлыҡҡа бөгөн урын бармы?" исемле инша яҙырға кәрәк ине. "Юҡ,- тине Зариф. - Бөгөн батырлыҡҡа урын юҡ! Бөйөк Ватан һуғышы ваҡытында еңел булған: алдыңда фашист! Күпме дошманды ҡыраһың, һин шул тиклем батыр! Приказды үтәнең - миҙал! Күберәк фашисты ҡырҙың, йәки һәләк булдың - һин герой! Еп-еңел! Әлеге көндә нисек батыр булырға? Бына һеҙ көнөн-төнөн беҙгә белем, тәрбиә бирәбеҙ тип тырышаһығыҙ. Илгә фиҙаҡәр хеҙмәт итәһегеҙ! Әммә һеҙҙе берәйһе батыр тип атаймы? Орден-миҙал менән наградлаймы? Юҡ!" "Һин хаҡлы түгел! - тине ҡып-ҡыҙыл булған уҡытыусы. - Мәҫәлән, янғындан баланы алып сыҡҡан йәш егет батыр түгелме? Йәки һыуға батҡанды ҡотҡарған кеше?" "Уныһы дөрөҫ! - тип ризалашты Зариф. - Әммә мин батыр булам тип кемдәндер өйө янғанын, йәки һыуға батҡанын көтөп торорға тейешменме? Тимәк, был осраҡлылыҡ! Мәңгә, хатта миллионға тап килгән кемдер өсөн фажиғә - кемдер өсөн герой булырға бирелгән шанс!"

Ошо бәхәс ҡапыл иҫенә төштө Зарифтың. Бөгөн улар алғы һыҙыҡта. Эйе, Бөйөк Ватан һуғышындағы кеүек ҡаршыла дошман күҙгә-күҙ ҡарап тормай. Әммә ул бар: күпкә хәйләкәр, йөҙ мәртәбә йылғыр, мең тапҡыр көслөрәк ҡоралы һәм әллә күпме саҡырым алыҫта. Тик уның "күҙҙәре" ныҡ үткер: коптер менән, компьютер менән, реактив ҡорал менән ҡоралланған йыртҡыс хәлендәге йәнһеҙ дошман айырыуса хәүефле. Уны автомат менән атып ҡына үлтереү мөмкин түгел! Ул кешенең аңын мәғлүмәте менән ағыулай, юлдан яҙҙыра, аҙаштыра һәм көтмәгән яҡтан һөжүм итеп, бер юлы меңләгән кешене юҡҡа сығара!.. Эйе, бөгөн уларға герой булырға форсат бирелгән! Бөгөн ул уҡытыусыһы менән бәхәсләшә алмай - ысынлап та, һәр кемгә дөрөҫ аҙым яһарға, үҙен күрһәтергә, илен яҡларға, халҡына ҡалҡан булырға яй сыҡҡан ваҡыт. Геройҙар ваҡыты... Әммә герой булып тыумайҙар! Уның өсөн батырлыҡ күрһәтергә, кемдер ҡотҡарырға, кемгәләр ҡорал тоҫҡарға, йәнен ҡыйырға тейешһең! Бик ҙур һайлау алдында тора бөгөн улар, Рәсәй һалдаттары!

* * *

Урман араһына ҡыуып индерелгән һарыҡ хәлендә ине улар тәүҙә. Бер ни аңламайҙар, аңлатыусы ла юҡ. Взвод, рота командирҙары ла шул уҡ халәттә. Уларҙан нимә көтәләр, нимәгә әҙерләйҙәр -

төшөндөргән кеше юҡ. Көтөргә, окоп, траншея ҡаҙырға һәм приказ көтөргә. Ошондай ваҡыттарҙа һалдаттарҙың башына төрлө уйҙар килә: беҙ кем? Нимә өсөн килгәнбеҙ? Беҙҙе нимәгә әҙерләйҙәр?

Взвод командиры лейтенантҡа бер көн ошо һорау менән ябырылдылар.

- Һеҙ офицер! Беҙгә аңлатырға тейеш! - тигән талап ҡуйылды. - Элек комиссарҙар һәм политруктар булған, улар сәйәси яҡтан яугирҙарҙы әҙерләгән.

Был талап көтөлмәгәнсә тиҙ үтәлде: тәүҙә үҙҙәренең ротаһының замполиты килгәйне. Ул үҙе лә күп нәмәне төшөнөп етмәй, нимәне әйтергә ярай, нимәһе хәрби сер - белеп бөтмәй. Шуға күп һорауҙар яуапһыҙ ҡалды. Ләкин бер нисә көндән Өфөнән Сайранов исемле замполит килеп китте. Ул шулай һәр батальон буйлап йөрөй, һалдаттарҙың тормошо менән таныша һәм проблемалар булһа, хөкүмәт менән элемтәгә сығып, ярҙам итә икән. Бына Сайранов, исмаһам, күп нәмәгә төшөндөрҙө егеттәрҙе, күп кенә мәсьәләләргә асыҡлыҡ индерелде, хәл ителде. Ә ир-аттың һорауҙары бихисап. Ләкин "Ни өсөн?" тигән һорау һәр кемдең йөрәген тетрәтеүсе тере ҡуҙ ине. "Эйе, беҙҙең атабабалар француздарҙы, унан һуң фашистарҙы еңгән! Улар еңгән, сөнки илен һаҡлаған! Ә беҙ ни өсөн? Ни өсөн беҙҙе оккупанттар тип атайҙар? Ни өсөн беҙ баҫҡынсы ролендә ҡалдыҡ? Ни өсөн башланды хәрби операция? Ысынлап та кәрәк инеме был МХО?"

Үҙен уратып алған һалдаттар, иҫәпһеҙ күп тойолған һынсыл күҙ ҡараштарынан замполитҡа еңел булмағандыр. Ул ауыр көрһөндө. Баҙрайып үҙенә текләгән күҙҙәргә ҡарап, байтаҡ ҡына фекер тупланы.

- Һорауҙар күп. Улар дөрөҫ бирелде. Ни өсөн ҡоралға тотоноуыбыҙҙы аңламайынса, утҡа инеү дөрөҫ булмаҫ ине! Сөнки... миҫал өсөн, әйтәйек, бер кешегә магазинға барырға ҡушылды, ти. Ул барҙы, әммә магазиндан буш ҡул менән ҡайтты. Ә бит кибет тауар менән лыҡа тулы ине! Ни өсөн бер нәмә лә һатып алманы? Сөнки нимә һатып алырға белмәне. Уның маҡсаты юҡ ине, уға әйтелмәне, бурыс ҡуйылманы. Шуның кеүек, һеҙҙе лә МХО-ға барығыҙ, тип кенә алғы һыҙыҡҡа ташлау дөрөҫ булмаҫ ине. Ни өсөн бында килеүегеҙҙе һеҙ аңларға, ҡабул итергә һәм ышанырға тейеш! Шунһыҙ был операцияның уңышлы тамамланыры икеле...

- "Ни өсөн беҙ башланыҡ?" тигән һорауға асыҡлыҡ индерәйек. Беҙ башламаныҡ, беҙ бары алдан өлгөрҙөк! Тарихтан белеүегеҙсә, Бөйөк Ватан һуғышы тоҡаныры хаҡында Совет разведчиктары Сталинды күпме тапҡыр иҫкәрткән. Ул тыңламаған, ышанмаған, көткән. Һөҙөмтәлә нисәмә миллион ғүмер өҙөлгән, 4 йыл буйы дауам иткән ҡанлы һуғыш ҡупҡан!

(Дауамы. Башы 16-17-се һандарҙа).

## ШИҒРИ КҮСТӘНӘС

**СССР Яҙыусылар союзы ағзаһы, Луганск Халыҡ Республикаһының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Андрей МЕДВЕДЕНКО 2016 йылда башҡорт атлыларына арнап, героик поэма ижад итә. Ул 2017 йылда ошо авторҙың "Нескончаемый рейд" исемле китабында донъя күрә. Донбасс шағиры ошо поэмаһын беҙҙең яҡташыбыҙ, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзаһы, Хәрби хәрәкәттәр ветерандары союзы рәйесе, Миңлеғәли Шайморатов исемендәге ирекмәндәр отряды етәксеһе Тимерйән Рәжәповка тапшырып, уны башҡорт теленә баҫтырып сығарыуҙы һорағайны. "Мәңгелек рейд" исеме аҫтында һеҙҙең иғтибарығыҙға ошо поэманы тәҡдим итәбеҙ.**

*Дебальцево рейдының ҡурҡыу белмәҫ атлыларына арнала*

# МӘҢГЕЛЕК РЕЙД

## (Героик поэма)



### 1

... Станцияла аттар
тейәлә вагондарға.
Кешнәй улар түҙмәй һағышҡа.
Һай, һеҙ аттар!.. Ай, йүгерек аттар!..
Китәһегеҙ аттар һуғышҡа!
Изге нурын сәскән күктәге ай
Атҡайҙарҙың булыр юлдашы.
Ишетелгәндәй
поезд сапҡанда
Меңәрләгән тояҡ тауышы.
Баҫмаҫ уны пуля ыҫылдауы.
Көрән дейеүҙәргә ғазауат:
Ат эйәрләп менгән башҡорттарҙың
Һәр береһе батыр Салауат.
Елдәй елде аттар...
Ҡайҙа хәүеф-хәтәр -
Шул тарафта алыш башланды!
Крупп ҡоросо хатта сыҙаманы -
Ҡамыр ише турап ташланды!
Һай, һеҙ аттар!..
Елә уйнап аттар,
Ут сәсрәтә саҡма тояҡтар!

### 2

Төтөн баҫҡан ҡаршы тау битендә
Стеналай тора фашист полктары.
Комдив үҙе -
сая бөркөт Шайморатов
яуға өндәй: "Алға, башҡорттарым!"
Белә комдив: тиҙ еңелмәҫ ул дейеү.
Ҡышҡы дала, юҡ әҫәре ышыҡтың,
Ҡойондан көслә Дебальцево рейды
Арт һабағын укытыр СС-тың.
Өткөс һалҡын.
Сеңләйҙәр ауыҙлыҡтар.
Ҡылыс сыны, пуля өйөрмәһе.
Ҡыла алмаҫ дошман яуызлыҡтар:
Шартлап ауа эшелон өйөмдәре.
Ҡар бик тәрән.
Яуыз дошман далала.
Атлылар ярһып алға ынтыла,
Ләғнәт төшкәндәрҙән бары көл ҡала,
Шартлап оса элемтә пункты ла.
Ҡанлы алыштарҙа уҙыш бер аҙна.
Һолоһоҙ аттар ҡай(ы)ры кимерҙе.
Өйөр-өйөр килгән фашист талағын
Ҡындан сыҡҡан ҡылыс емерҙе.
Ике аҙна ҡырылыш, ҡайҙан дарман?
Самолет та осмай, юҡ бит ярҙам!
Алға!.. Атаҡаға бара эскадрон!
Таң аталыр ҡыҙарып ал ҡарҙан.
Ҡорос ҡулса
һәләкәтле ғәскәргә.
Комдив ауҙы, ҡурсып яугирҙарын.
Ҡыҙыл атлыларғамы сигенергә?
Еңелмәҫ рухлы - рейд батырҙары!
Ил өсөн
Йөрәктәр тибә ярһып.
Бөркөттәр - Шайморатов атлылары!
Балҡыны
ҡылыстар һауа ярып,
еңелмәҫ ул ир-аттың затлылары!
Пулянан да етеҙ яугир ҡылысы!
Еңеү көсәп, башын һалған -тере.
Баһадир рухы изге нурҙай балҡыр -
Салауаттың йәйғор-күпере!
Яңғыраны
ерҙә дәшһәтле ауаз
һыңған сакта
ҡан-дошмандың һырты.
Түгеп ҡанын, биреп тә йәнен, Донбасс,
Азат итте башҡорт Луганск йортон.

### 3

Иңрәп-һыҙлап тибә яралы йөрәк...
Ат кешнәүҙәре китә яңғырап.
Һыҙа ла буйлап, ана, айғыр саба,
Егете ята ҡарҙа ҡанһырап.
Нишләп шулай?
Юҡ бит хужаһы!
Үҫкәйнеләр бергә дуҫлашып.
Үлгәнме ул, әллә яралымы?..
Өлгөрмәне хатта хушлашып.
Тояҡтары менән таштар яра,
Һыртҡайынан сөрләп ҡан аға.
Үрәпсеп тә үрә торҙо айғыр,
Йондоҙҙарға әллә ул бағә.
Һауаларға ашып, эҙләр ине,
Тик хужаһы ғына өн-тынһыҙ.
...Ишетәмен төштә ат кешнәүен,
яңғыратып
күктә, Ҡош юлын!
Башҡорт далаһынан, урмандан да
түгел, күҙ аҫҡыһыҙ буран ярып
аттар сапты кешеләргә табан,
булмаҫмы тип дуҫын ҡотҡарып.
Асырғанып кешнәп, шәмдәй тороп,
Фәрештәләр булып ҡалҡтылар.
Дәрүиш ише төңгә ҡапҡаларға
Ауыҙлыҡтары менән ҡаҡтылар.
- Эй! ...Штольня эргәһендә яралы
туңып бара!.. Ярҙам итегеҙ!..
Һәм күҙ йәштәре аҡты йөҙҙәренән,
Алдашмайым,
ғәфү итегеҙ!
Булмаһа
яҡында ышыҡ урын,
ҡоторғанда февраль бураны -
тыны менән,
тән йылыһы менән
батырҙарын аттар ҡурсыны.

* * *

Һай, һеҙ аттар!..
Атҡайҙар - ҡаралар,
бурылдар,
алмасыуар,
һары ҡола
һәм буҙ аттар,
ҡолалар һәм
алаҡайҙар,
тураттар!..
Йылан аттар!
Аттар - саптарҙар!
Бәйгеләрҙә ал бирмәгән юртаҡтар.
Данлайым -яҙмыштары уртаҡтыр,
күккә торна булып
ашҡандыр!

### 4

Тығыла төйөр тағы тамағыма.
Күҙ алдымда, таң атыуға быңа
Башҡорт дивизияһы атлылары
рейдҡа сыға дошман тылына.
Ҡотора буран, геүләй, әйләнә,
Еңеү көҫәп йөрәк ашҡына!
Эйәр айылдары ныҡ бәйләнгән.
Ҡылыстарҙы - ҡындан! Сап ҡына!
Дуҫ-туғандар - Урал башҡорттары.
Ҡоллоҡ сылбырҙарын һүтәләр -
Емерелә дошман крепостары,
азатлыҡты Донда көтәләр.
Юғалтыуҙар, ай-һай, ауыр икән.
Ҡон ҡайтара башҡорт алышта.
Атын менгән егет - ғәскәр күрке,
Еңеү яулар ҡанлы ярышта.
Түҙә алмай, һеҙгә дан йырлайым,
Йөҙөгөҙҙө килә күрәһем...
Һеҙҙең кеүек, рейдтан сыға алмай,
Мәңгелектә тибә йөрәгем!
Аҡ томандар аша һеҙҙе күрәм.
Йөрәктәрҙә әле шул ялҡын.
Дебальцево ҡойононда тағын
Азатлығын яҡлай үҙ халҡым.
Ополченец тора һаҡта бөгөн -
Ышаныс булып Донбастың!..
Батыр атлыларҙан алған өлгө -
Ҡурҡып ҡаса яуыз албаҫты!

### 5

Юртаҡ аттай сабып йылдар уҙа.
Ҡараңғы ла булып ала, яҡты ла.
Тояҡ аҫтарынан ҡарҙар туҙа,
Алдарыма килә сабып атлылар.
Ҡаршы сығам.
Әрләп алам үҙемде.
Бер генә лә гәйебем юҡ таһа.
Хистәр ҡайнай, бирсе, Хоҙай, түҙемде!
Рейд бара - түңкәрелә аждаһа!
Һеҙгә ҡарап быңа, һеҙҙең менән
Мин алышҡа сығам, ҡурҡмай янауҙан,
тайшанмайса хәүеф үә хәтәрҙән,
һуғыша-һуғыша
сығам ҡамауҙан!

21.11.2016

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ тәржемәһе.**

✓ *Рәссамдар үҙҙәренә ят булған был башҡорт музыка ҡоралын, ҡурайҙа уйнаған башҡорт яугирҙарын ҙур ҡыҙыҡһыныу менән күҙәтә. Артабан уларҙың күҙәтеүҙәре, төрлө рәсем, гравюраларҙа сағылыш таба.*

ИНТЕРНЕТТАН



# ҺЫУЫТҠЫСТА БАКТЕРИЯ ҺАҠЛАМАҒЫҘ

■ Әсә булыу ҡатын-ҡыҙ организмын күп төрлө үҙгәрештәргә килтерә. Израиль ғалимдары асыҡлауынса, хатта баш мейеһенең ҡайһы бер функциялары өлөшләтә үҙгәрә икән. Иерусалим университеты хеҙмәткәрҙәре әйтеүенсә, был үҙгәрештәр, шул иҫәптән, тауыш һәм еҫ тойоу менән бәйле булғандары ла әсә кешегә балаһы менән аралашырға һәм унан килгән ярҙам һорау сигналдарын яҡшыраҡ тойорға мөмкинлек бирә.

■ Кардиолог Клайд Янси белдереүенсә, һәр кеше йөҙ йәшкә тиклем йәшәй ала. Доктор иҫәпләүенсә, бының өсөн ете ҡағиҙәне тотоп йәшәү ҙә етә. Әүҙем тормош алып барған, холестеринды, ҡандағы шәкәр кимәлен һәм ҡан баҫымын контролдә тотҡан, дөрөҫ туҡланған, артыҡ ауырлыҡ менән яфаланмаған, тәмәке тартмаған кешеләр оҙон ғүмерле була. Шулай ҙа быныӊ менән күп табиптар килешмәй, улар ғүмер оҙайлығы 50 процентҡа гендарҙан тора, тип белдерә.

■ Көнкүрештә киң ҡулланылған һабын, кер йыуыу порошогы, шулай уҡ шампунь, душ өсөн гелдәрҙең составында булған матдәләр сәләмәтлеккә зыян килтереүе лә ихтимал. Цитронеллол, линалоол, кумарин кеүек матдәләрҙә етештереүселәр һабынға һәм башҡа йыуыусы сараларға еҫ биреү өсөн ҡуллана. Мәҫәлән, рауза еҫе сығып торған шампунға - цитронеллол, ынйы сәскәһе еҫленәнә - линалоол, яңы сабылған бесән еҫленәнә кумарин өҫтәлә. Улар сәләмәтлеккә зыян килтермәһен өсөн, йыуыныу сараларын дөрөҫ ҡуллана белергә лә кәрәк, ти белгестәр. Ҡыҫҡа итеп әйткәндә, уларҙы тәндән тиҙ генә йыуып төшөрөү мөһим. Шуға ла химиктар еҫсеҙ йыуыу сараларын ғына ҡулланырға тәҡдим итә, сөнки сараның һөҙөмтәләлеге уның еҫенә бәйле түгел. Был бары тик һатып алыусыларҙы йәлеп итеүсе ысулдарҙың береһе генә.

■ Быға тиклем интеллект кимәле, иң тәү сиратта, нәҫелгә бәйле төшөнсә, һуңынан ғына ул даими уҡыу һәм уйлау һөҙөмтәһе тип ҡабул ителә ине. Лондон университеты ғалимдарының һуңғы тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, үҫмерлек осоронда IQ кимәле ыңғай яҡҡа ла, кире яҡҡа ла үҙгәреүе ихтимал. Ғалимдар фекеренсә, 14 йәштән 18 йәшкә тиклем даими шөғөлләнгәндә, үҫмерҙең мейеһе яҡшыраҡ үҫешә ала. Ә был осорҙо ел ҡыуып йөрөп уҙғарыусылар, киреһенсә, аҡыл үҫеше яғынан тиҫтерҙәренән күпкә артта ҡаласаҡ.

■ Бөгөнгә көндә һыуытҡыс етештереүселәр һатып алыусыларға был йорт техникаһының ниндәй төрөн генә тәҡдим итмәй. Бигерәк тә иретеү талап ителмәгән, no frost технологиялы һыуытҡыстар модала. Әммә Microban Europe компанияһы белгестәре үткәргән тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә тап ошо төр һыуытҡыстарҙа ауыр сирҙәр тыуҙыра торған микроорганизмдарҙың күпләп тупланыуы асыҡланған. Бигерәк тә һыуытҡыстың йәшелсә-емеш өсөн тәғәйенләнгән йәшниктәре сәләмәтлек өсөн зыянлы булған эсәк таяҡсаһы, сальмонелла һәм листерия бактериялары сығанағы булып тора. Шуға ла һыуытҡысығыҙ ни тиклем ҡиммәтле һәм заманса модаға ярашлы булмаһын, уны йышыраҡ йыуып торорғоҙ, тип кәңәш итә белгестәр.

ХӘТЕРЛӘП...

# ҠУРАЙСЫЛАР ҠУРАЙ, АЙ, УЙНАМАҪ,

## Башҡорт ҡурайҙары булмаһа...

**Ҡурай борон-борондан башҡорт яугирҙарының моңдашы, ауыр һәм алыҫ походтарҙа айырылмаҫ юлдашы булған. Шуға күрә лә башҡорт халыҡ ижадында хәрби тематикаға бағышланған йыр, көйҙәр бихисап. Һәр бер һуғыш, хәрби поход халыҡ хәтерендә бер йыр йә көй булып уйылып ҡалған. Шулар араһында 1812 йылғы Ватан һуғышы айырым урын алып тора. Тап ошо һуғышта башҡорттар дәррәү ҡатнаша. 1812 йылғы һуғышта 28 башҡорт полкы ойошторолһа, шуларҙың 20-һе туранан-тура һуғышта ҡатнаша. Ҡалғандары хужалыҡ, ҡарауыл, тәьминәт эштәре менән мәшғүл булған, тигән фекерҙә тарихсылар.**

Быға тиклем булған һуғыштарҙан масштабы һәм оҙайлығы менән 1812 йылғы Ватан һуғышы айырылып тора. Уға тиклем башҡорт ғәскәрҙәре айырым сикләнгән территориялағы һуғыштарҙа ҡатнашһа, мәҫәлән, 1788-1790 йй. рус-швед һуғышы, 1771-1773 йй. Польша походы, 1756-1763 йй. Пруссияға ҡаршы Ете йыллыҡ һуғыш, хәҙер инде башҡорттар рус армияһы составында французларҙы ҡыуып, бөтөн Европаны тиерлек үтә. Элек башҡорт ғәскәрҙәренең һаны 500 йәки 1000-дән артмаһа, француз яуында 10 меңдән ашыу башҡорт яугиры ҡатнаша.

1812 йылғы Ватан һуғышына башҡорт яугирҙары ҡорал менән бер рәттән, ҡурай ҙа алып киткән һәм яу яландарында, ҡурайҙа уйнап, күңел һағыштарын баҫыр булған. "Ҡаһым түрә" исемле башҡорт йырынан күренеүенсә, 1812 йылғы Ватан һуғышы ҡаһармандарының береһе Ҡаһым түрә (ысын исеме Ҡасим Мырҙашев) дәһшәтле һуғыш мәлендә лә ҡурайынан айырылмаған. Халыҡ йырында быҙдай һүҙҙәр бар:

*Ҡаһым түрә яуап бирған саҡта,*
*вай кем,*
*Уң ҡулында уның ҡурайы.*

Ҡурайсы башҡорт яугирҙары француз яуы осоронда сит ил рәссамдарының да иғтибар үҙәгендә була. Рәссамдар үҙҙәренә ят булған был башҡорт музыка ҡоралын, ҡурайҙа уйнаған башҡорт яугирҙарын ҙур ҡыҙыҡһыныу менән күҙәтә. Артабан уларҙың күҙәтеүҙәре, төрлө рәсем, гравюраларҙа сағылыш таба. Мәҫәлән (1-се һүрәтте ҡарағыҙ), был һүрәттә башҡорт яугирҙары Франция йәки Германия ҡалаларының береһендә ялда торған саҡтарында һүрәтләнгән. Ситтәге һыбайлы башҡорт өҙҙөрөп ҡурай тарта, бәлки, ул яугир "Любизар" көйөн уйнайҙыр. Башҡалар, тыуған илде, туғандарҙы уйлап, моңланып, ҡурай көйөн тыңлай. Эргәлә рус яугирҙары ла күренә.

Ырымбур губернаһында хәрби губернатор булған А.В.Перовский осоронда башҡорт ғәскәрҙәре Хиуаға (1839-1840 йй.) һәм Аҡмәсеткә (1852-1853 йй.) походтарҙа ҡатнаша. Ошо походтар мәлендә тыуған башҡорт халыҡ йырҙарының береһе "Уйыл" тип атала. Был йыр Уйыл йылғаһы исеменән алынған (хәҙерге Көнбайыш Ҡаҙағстанда). Йырҙа ошондай һүҙҙәр бар:

*Ҡурайсылар ҡурай, ай, уйнамаҫ,*
*Башҡорт ҡурайҙары булмаһа;*
*Егет тә гене кеше йыр йырламаҫ,*
*Йөрәгендә дәрттәр булмаһа.*

Ауыр хәрби поход ваҡыттарында башҡорт яугирҙары өсөн ҡурай - ул күңелдәргә ял биргән, һағыштарҙы баҫҡан музыка ҡоралы булған. Оҙайлы марштар мәлендә йәки ҡанлы яуҙан һуң ялға туҡтаған мәлдә башҡорт яугирҙары һәр саҡ усаҡ алдында йыйылып, ҡурай моңон тыңлар булғандар. 19-сы быуатта йәшәгән билдәле рәссам А.О.Орловскийҙың һүрәтендә



Башҡорт яугиры ҡурай уйнай. Билдәһеҙ рәссам. XIX быуат.



Башҡорттар хәрби походта. А.О. Орловский. XIX быуат.

ЯРГИР ХӘТИРӘҺЕ



# ИКЕ ТАПҠЫР ВЕТЕРАН

**Быйыл - 2024 йыл... Ә ул 1923 йылдың 25 декабрендә Баймаҡ районы Йәнйегет ауылында тыуған... Әңгәмәсем - Сәмиғә Ырыҫмөхәмәт ҡыҙы Ырыҫбаева, үткән быуаттың тәүге ярты йыллығын хәтерләгән йөҙйәшәр башҡорт әбейе, ауылда тыуып, әле ҡалала йәшәгән һуғыш ветераны. Йөҙйәшәрҙәр менән көн дә осрашып булмай, бигерәк тә һуғыш ветерандары менән. Сәмиғә Ырыҫмөхәмәт ҡыҙы Сибай ҡалаһында Бөйөк Ватан һуғышы юлын үткән һуңғы ветеран... Һөйләшеү оҙаҡҡа һуҙылманы, күпте күргән оло кеше ваҡланманы, һүҙҙе ҡыҫҡа тотто, хәрби уставтағы кеүек аныҡ һөйләне. Әлбиттә, ул үҙ ғүмерендә бик күп осрашыуҙарҙа булған, йәш быуынға һуғыш тураһында йыш һөйләгән, илһөйәрлек тойғоһо тәрбиәләгән. Әлеге хәтирәләре, һорағасын, һөйләйем, тигән һымағыраҡ килеп сыҡты:**

- 1941 йылдың 22 июнендә мин Баймаҡта инем, - тип һөйләп китте йөҙйәшәр инәй. - Төрлө яҡтан, "Һуғыш башланған!" тип ҡысҡыралар. Халыҡ ҡала майҙанында митингка йыйылды. Шул йылдың 25 декабрендә миңә 18 йәш тулды. Баймаҡтан бер төркөм ҡыҙҙарҙы фронтҡа ебәрҙеләр, мин икенсе партияға эләктем. 1942 йылдың апрелендә Өфөлә өс көн медкомиссия үттек. Баймаҡ районынан 13 ҡыҙ инек. Шунан беҙҙе Куйбышевка ебәрҙеләр, унда 5-се запас полк тора ине. Ҡаланан йыраҡ түгел бер поселокта һуғышҡа әҙерлек башланды. Хәрби форма бирҙеләр, сәстәребеҙҙе ҡыҫҡарттылар, тоғролоҡҡа ант бирҙек. Мин "укладщица парашюта" һөнәрен үҙләштерҙем һәм 227-се дивизияның 637-се штурмовой авиация полкында хәрби хеҙмәтемде башланым.

✓ *Башҡорт ҡурайы голланд офицерына сәйерерәк күренһә лә, ул башҡорт моңоноң һағышын күңеле менән тойған. Ә инде шотланд офицер башҡорт көйҙәренең шотланд көйө менән оҡшашлығын күреп, бөтөнләй хайран ҡалған.*



тап шул мәл һынланыш тапҡан (2-се һүрәтте ҡарағыҙ). Башҡорт яугирҙары ағас янында ҡыуыш ҡороп, ял итергә туҡтағандар һәм ошонан файҙаланып, ҡурайсы яугир ҡурайында уйнай. Ул, бәлки, һағышлы "Уйыл" көйөн уйнайҙыр, бәлки, "Һыр" көйөн. Йәки, өҙҙөрөп, дәртле "Перовский" маршын һыҙҙыралыр.

Әйткәндәй, губернатор Перовский үҙе лә ҡурай моңон яратҡан, тиҙәр. Һәр ваҡыт үҙ янында ҡурайсылар тотҡан, имеш. Ул, ысынлап та, башҡорт яугирҙарын, башҡорт моңон ихтирам иткән. Юҡҡамы ни, башҡорт ғәскәре өсөн Ырымбурҙа Каруанһарай һалдырған! Перовский 1839 йылда башҡорт яугирҙарын тирмәләр һәм ҡурайсылар менән Бородино яланына байрамға, йәғни Бородино алышына бағышланған тантанаға ебәрә. Башҡорт тирмәһендә ҡунаҡ булып, ҡурай моңон тыңлаған голланд полковнигы Ф.Г. Гагерн бына нимә тип яҙа: "В кибитке, освещенной разноцветными (национальными) фонарями, башкиры играли и пели. Инструментами им служат странные камышовые дудки; музыка их в неизменно минорном тоне, даже веселые песни носят тот же отпечаток грусти. Офицер из шотландцев, присутствовавший при этом, нашел, что эти мелодии поразительно похожи на его родные".

Шулай итеп, башҡорт ҡурайы голланд офицерына сәйерерәк күренһә лә, ул башҡорт моңоноң һағышын күңеле менән тойған. Ә инде шотланд офицер башҡорт көйҙәренең шотланд көйө менән оҡшашлығын күреп, бөтөнләй хайран ҡалған.

Башҡорт тарихының ҡайһы ғына осорон алып ҡарама, ҡурай башҡорт яугирҙарының айырылмаҫ тоғро юлдашы, моңдашы булған. Граждандар һуғышы мәлендә лә башҡорт ғәскәрҙәре һалдаттары ҡанлы яуҙар араһында ҡурай уйнап күңел асҡан, һағыштарын баҫҡан.

1918 йылдың 14 сентябрендә Ырымбурҙа торған 4-се Башҡорт пехота полкының 1-се батальоны (ул өс ротаны тәшкил итә) казактарға ярҙамға Орск фронтына ебәрелә. Батальонды тантаналы рәүештә һуғышҡа оҙаталар.

Иртәгеһенә, башҡорт батальоны Һары станцияһына килеп төшә. Бынан фронт һыҙығына барып етер өсөн 25 саҡрым йәйәү үтергә кәрәк була. Ә Орск ҡалаһына станциянан 45-50 саҡрымдар тирәһе ара. Башҡорт һалдаттары изге Ҡорбан ғәйетен Һары станцияһында һый әҙерләп байрам итә. Кискә ҡурай моңо тыңлап, бейеп күңел аса. "Ғәйет байрамы айҡанлы беҙҙең батальон һалдаттары бер аҙ күңел асып алыу ниәте менән уртала бейеү өсөн майҙан ҡалдырып, бер түңәрәккә йыйылды. Майҙан уртаһында беҙҙең батальондың ҡурайсыһы Төлкөбай урын алған. Ул башҡорт бейеү көйҙәрен ҡурайҙа ғәжәйеп матур уйнай. Уртала елеп йөрөп башҡорт егеттәре бейей. Төлкөбай бейеү көйҙәренән оҙон көйҙәргә күсә. Уның ҡурайынан ата-бабаларҙың башынан үткән ҡайғы, аһ-зарҙарын сағылдарған Тәфтиләү, Ашҡаҙар көйҙәре ағыла. Һәр кем башын түбән эйеп, һығышлы уйҙарға сума", - тип яҙа башҡорт батальонының бер яугиры.

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ла 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы яугирҙары ата-бабаларҙан ҡалған изге йола буйынса ҡулдарына ҡорал менән бергә ҡурай алып, фронтҡа китә. Дивизияның полк командиры ҡаһарман сардар, Советтар Союзы Геройы Таһир Күсимов бигерәк тә ҡурай моңон тыңларға ярата. Үҙенең полкында хеҙмәт иткән ҡурайсы яугир Баҡый Вәлиевты һирәк осраған ял минуттарында һәр саҡ үҙенә саҡыртып алып, ҡурай уйната торған булған ул. 1943 йылда төндә дошман уты аҫтында Днепр йылғаһы аша сыҡҡанда Вәлиевтың ҡурайы һыуға ағып китә. Быны белеп ҡалған ҡаһарман командир тәүҙә ныҡ асыулана, аҙаҡ һағышланып йөрөй. Күсимов ҡурайсы яугирҙы: "Иртәгә үк Уралға ҡайтарып ебәрәм, йөрөйһөң ҡурайыңды юғалтып", - тип әрләп тә ала. Бер мәл немец самолеты янып төшкәнен күреп, Күсимов ҡурайсы яугирҙы шунда ебәрә. Баҡый Вәлиев самолеттың еҙ торбаһын ҡырҡып алып, ҡурай яһай. Яңынан ҡурай моңон ишетеү менән Таһир Тайып улының күңеле ирреп китә. Баҡый Вәли улы Вәлиев инде ҡурайын юғалтмай, фронттан алып ҡайта. Хәҙер был тарихи ҡурай Сибай ҡалаһының музейында һаҡлана...

Шулай итеп, башҡорт халҡының милли музыка ҡоралы ҡурай башҡорттоң яугирлыҡ тарихы менән тығыҙ бәйле, ҡурай ата-бабаларыбыҙҙың данлы үткәнен беҙҙең көндәргә алып килеп еткергән хәтер һандығы ла булып тора.

**Азат ЯРМУЛЛИН.**



*Ҡаһарман полк командиры Таһир Күсимов ял ваҡытында ҡурай моңо тыңлай.*



*112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы. 1942 йыл. Һулдан уңға 2-се ҡурайсы Баҡый Вәлиев, уның эргәһендә мәшһүр хореограф Фәйзи Ғәскәров, уның янында дивизияның комиссары Мөбәрәк Нәзиров.*



*112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы яугирҙары ял сәғәттәрендә ҡурай моңо тыңлай.*

Башта Сталинград фронтына оҙаттылар, унан көньяҡ-көнбайыш, 1-се, 4-се Украина фронттарында ҡатнаштыҡ, Көнбайыш Украинаны, Польшаны, Чехословакияны немецтарҙан азат иттек. Карпат тауҙары аша үтеп, Еңеүҙе Прага ҡалаһында ҡаршыланым.

Һуғыш бөткәс тә ҡайтармай торҙолар, беҙҙең полкты Украинаға күсерҙеләр. Шунда Япония менән һуғыш башланыуын белдек. Аҙағыраҡ ҡатын-ҡыҙҙарҙы һәм оло йәштәге ирҙәрҙе демобилизациялау тураһында Бойороҡ сыҡты. Фронтҡа эләккәндәр ҡыйынлыҡтарға ҡарап тормайҙар, йәш ҡыҙҙар ни, ҡатындар ни, көнө-төнө хәрби бурысын үтәйҙәр. Беҙ һәр ваҡыт аэродромдан сыҡманыҡ, хәрби часть ҡайҙа, беҙ шунда булдыҡ. Өҫтә комбинезон, аяҡтарҙа кирза итек, башта беретка - бөтәбеҙ ҙә бер иш формала. Хәрби күлдәк тә бирҙеләр, уны байрамдарҙа ғына кейә торғайныҡ. Гимнастеркаларыбыҙ, салбарҙарыбыҙ ҙа булды, әлбиттә. Тик аяҡта йәйен-ҡышын кирза итек, сөнки ҡатын-ҡыҙмы һин, ир кешеме, һуғышта айырма юҡ, формаң Устав буйынса булырға тейеш. Бер мәртәбә генә Яңы йыл байрамына командир байрамса кейенергә рөхсәт ите. Командирыбыҙ оло кеше ине, ҡыҙҙарҙы йәлләгәндер инде.

Һуғыш тураһында күп һөйләргә була... Һуғыштан һуң Ырымбур өлкәһенең Медногорск ҡалаһында хәрби заводта эшләнем. Шунда тормош иптәшем Нәҙерша Шәйхитдин улы Ырыҫбаевты осраттым. Ул да һуғышта булған.1957 йыл Сибайға күсеп килдек һәм рудникка эшкә урынлаштыҡ. Йәнйегет ауылынан булһам да, тыуған яҡта һирәк булдым, ғүмеремдең ҡалған яғы Сибай карьерына бәйле булды, төрлө эштәр башҡарҙым. Йәшем тулып, пенсияға сыҡһам да комбинаттан айырылманым. Рәхмәт инде, онотмайҙар, һәр байрам һайын ҡотлап торалар! Сибайҙа иллеләп фронтовичка булдыҡ. "Фронтовые подруги" тигән клуб ойошторҙоҡ, уҡыусылар, йәштәр менән осрашҡанда һуғыш тураһында һөйләп, Тыуған илде һөйөргә, тыныслыҡ яҡлы булырға өндәй инек. Бергәләп Ленинградҡа ла, Сталинградҡа ла барҙыҡ, Мәскәүҙә лә булдыҡ. Ваҡытында күп санаторийҙарҙа булдым. Хәҙер инде Сибайҙа ветерандарҙан мин генә ҡалдым. Әле Украинала һуғыш бара. Гәзиттән дә уҡыйым, телевизорҙан ҡарайым. Һуғыш яҡшы нәмә түгел инде. Беҙҙең йәшлек һуғышта үтте. Украиналағы емерек ауылдарҙы, мейес мөрйәләре генә тороп ҡалған янған өйҙәрҙе һаман да иҫләйем...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әлеге көндә ветеран ҡыҙы Миңзәлә менән ҡасандыр фиҙаҡәр хеҙмәте өсөн комбинат биргән фатирҙа йәмғиәттең йылы иғтибарын, ҡыҙының, ейән-ейәнсәрҙәренең һөйөүен тойоп йәшәй. Ул һуғыш ветераны булыу менән бер рәттән, хеҙмәт ветераны ла. Ғүмерендә ике тапҡыр ветеран исеменә лайыҡ булған ябай башҡорт әбейе...**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН яҙып алды.**

## УҢЫШ ҠАҘАН



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

### Тирбәлеш һәм хәрәкәт ҡануны

Микроскоп аша күҙәтһәк, хәрәкәтһеҙ кеүек тойолған киҫәксәләрҙең ғәмәлдә һәр саҡ хәрәкәттә булыуын күрербеҙ. Йыһандағы бөтә нәмә хәрәкәт итә. Әммә иң мөһиме шунда - улар хәрәкәт итеп кенә ҡалмай, ә барлыҡ мөмкин булған ихтималлыҡҡа ярашлы хәрәкәт итә. Беҙҙең йыһан - бик күп ысынбарлыҡты үҙ эсенә алған бер мөһабәт театр. Ундағы барлыҡ нәмә хәрәкәт итә, һәм хәрәкәт иткән бөтә нәмә үҙенә тура килгән йышлыҡта тирбәлә. Резонанс принцибы шуға нигеҙләнгән. Физиканың ошо ҙур булмаған һабағын үҙләштереү еңел булһын өсөн ҡулығыҙға гитара алып, өсөнсө - соль ҡылына сиртегеҙ. Ул үҙенә хас булған йышлыҡта тирбәлә башлар. Әммә иң ҡыҙығы шунда - һеҙҙең гитара эргәһенә икенсеһен ҡуйһаҡ, ундағы соль ҡылы, хатта уға ҡағылмаһағыҙ ҙа, үҙенән-үҙе тирбәлә башлаясаҡ. Ул беренсе гитаранан килгән тирбәлешкә көйләнеп, үҙе аллы уйнай.

Оҡшашлыҡтар ҡанунына ярашлы, һеҙҙең менән беҙгә лә энергиябыҙҙы һеңдергән кешеләр менән резонансҡа керергә мәжбүр иткән элементтар һалынған. Бына ни өсөн һеҙ ҡайһы бер музыканттарҙы иҫегеҙ китеп тыңлайһығыҙ, ә икенселәренең концертын ташлап сығып китәһегеҙ.

Шул сәбәпле әле генә танышҡан кешеләрҙең ҡайһыһылыр һеҙгә әллә ҡасанан таныш кеүек тойола, ә кемделер, бөтөнләй белмәүгә ҡарамаҫтан, шунда уҡ яратмайһығыҙ.

Аңығыҙҙы хәҙерге ваҡытта тотҡарлаһағыҙ, энергия менән зарядлаусы аш-һыуҙы, музыканы, төҫтәрҙе төпкө аң кимәлендә һайлау һәм энергия запасын бүҫкәрткән нәмәләрҙе урап үтеү һәләте үҫешә. Тормош тураһында индус фәне, аюверда кешеләрҙең төрө һәм улар тараткан тирбәлеш тураһында бик асыҡ аңлата. Әйткәндәй, популяр булған фэн-шуй ҙа тирбәлеш һәм хәрәкәт ҡанунын ҡуллана, сөнки аюверданың өлөшө булып тора.

### Энергия һаҡлау ҡануны

Бер нәмә лә тулыһынса юҡ ителмәй, бер нәмә лә буш урында барлыҡҡа килмәй. Был ҡанун тураһында ишеткәнегеҙ барҙыр, һәм, моғайын, уны ҡулланғанһығыҙҙыр ҙа. Әммә уның асылын аңлайһығыҙмы икән?

Беҙ бер нәмәне лә барлыҡҡа килтермәйбеҙ. Беҙ бары тик энергияны бер урындан икенсе урынға күсереү менән шөғөлләнәбеҙ, ә аныҡыраҡ итеп әйткәндә, энергияны ла күсермәйбеҙ, бары тик уйҙарыбыҙҙы ғына күсерәбеҙ! Һеҙ тәү сиратта - уйҙар тупланмаһы. Әгәр көсөгөҙҙө арттырырға теләһәгеҙ, сит уйҙарҙы кәметергә кәрәк. Энергияғыҙҙы төрлө яҡҡа таратып, иғтибарығыҙҙы тарҡатыуҙы туҡтатығыҙ.

Хәүеф, стресстар, асыу, көнләшеү, хатта бик йыш эякуляция аңды бушата. Шулай уҡ һеҙ ашаған ризыҡ та аң кимәлен күтәрә йәки түбәнәйтә. Һеҙҙең аңығыҙға тыңлаған музыкағыҙ ҙа йоғонто яһай: даими рәүештә ауыр рок тыңлаһағыҙ, аң кимәлегеҙҙең нисек түбәнәйеүен аныҡ әйтеп бирергә мөмкин.

Әммә һеҙҙең музыкаль өҫтөнлөктәрегеҙҙе баһаларға тырыша икән, тип уйламағыҙ, беҙ бит һөйләштек: бер ниндәй ҙә субъектив фекерҙәр булырға тейеш түгел! Мин индуистарҙың мантралары йәки григориан хоралдарын тыңлау файҙалы тип раҫламайым. Улар бары тик башҡа музыка. Шулай уҡ ит ашауға ҡарағанда вегетариан булыу яҡшыраҡ тиергә лә теләмәйем. Бары тик вегетарианлыҡ - туҡланыуҙың бөтөнләй башҡа концепцияһы. Бында төп һүҙҙең башҡа (икенсе) икәнен онотмағыҙ. Тәжрибәләр үткәрегеҙ һәм һеҙгә нимә тап килгәнен хәл итегеҙ.

**Пьер МОРАНСИ.**



### 13 МАЯ
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
13.00, 14.15, 19.00, 22.40 Информационный канал. [16+]
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Ищейка". Новые серии. [16+]
0.05 Д/с Премьера. "Обыкновенный фашизм-2". Фильм четвертый. [18+]
1.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Антропология". [16+]
2.00 ПОДКАСТ.ЛАБ "Летописи конца времен". [16+]
2.45, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Триггеры". [16+]
3.30 ПОДКАСТ.ЛАБ "20 лет спустя". [16+]
4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ "Пусть не говорят, пусть читают". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 9.30 Утро России.
9.00, 14.30, 21.05 Вести. Местное время.
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Наши". [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Свет в окне". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия". [16+]
3.45 Т/с "Версия". [16+]
4.35 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Профилактика на канале с 07.00 до 14.00.**
**14.00 Новости недели (на рус.яз). [12+]**
**14.45, 17.45, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 "Этно-краса". [6+]**
**15.30 Преград. Net. [6+]**
**15.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**16.00 Башкорттар. [6+]**
**16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Специальный репортаж. [12+]**
**18.30, 22.30, 1.00 Новости (на баш. яз).**
**19.00, 20.30, 4.15, 5.15 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**22.00, 3.45 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Золотой фонд Башкирского телевидения. [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.30 Спектакль "Любви все возрасты покорны". [12+]**

### 14 МАЯ
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Ищейка". Новые серии. [16+]
0.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Легкие деньги". [16+]
0.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Произвольная программа". [16+]
1.40 ПОДКАСТ.ЛАБ "Фокусы". [16+]
2.25, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Кот Шрёдингера". [16+]
3.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Не лыком шиты". [16+]
4.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Собрались с мыслями". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 9.30 Утро России.
9.00, 14.30, 21.05 Вести. Местное время.
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Наши". [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Свет в окне". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия". [16+]
3.45 Т/с "Версия". [16+]
4.35 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Ете егет". [12+]**
**10.45 Новости СВО (на баш. яз).**
**11.00, 18.00 Письма солдатам. [12+]**
**11.15 "Автограф". [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 13.45, 18.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 3.15 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 "Ат уйнатып. Битва командиров". [6+]**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 "Бай". [12+]**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00, 22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**19.00, 20.30, 4.15, 5.15 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**23.00 Кустәнәс. [12+]**
**23.30 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**1.30 Спектакль "Ездили мы на Макарскую ярмарку". [12+]**

### 15 МАЯ
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Ищейка". Новые серии. [16+]
0.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Психика". [16+]
0.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Письма". [16+]
1.40 ПОДКАСТ.ЛАБ "Россия и Запад на качелях истории". [16+]
2.25, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "20 лет спустя". [16+]
3.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Антропология". [16+]
4.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Пусть не говорят, пусть читают". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 9.30 Утро России.
9.00, 14.30, 21.05 Вести. Местное время.
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Наши". [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Свет в окне". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия". [16+]
3.45 Т/с "Версия". [16+]
4.35 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Автограф. [12+]**
**10.45, 13.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**11.00 "Дорога к храму". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**12.30, 3.15 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 "КультУра". [6+]**
**15.30 МузКәрәҙ. [6+]**
**16.00 "Хазина". [12+]**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Тормош. [12+]**
**19.00, 20.30, 4.15, 5.15 Телецентр.**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байык-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**1.30 Спектакль "Ой, кто там лежит?"**

### 16 МАЯ
### ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "Модный приговор".
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!".
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Ищейка". Новые серии. [16+]
0.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Обман веществ".
0.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Свидетели Эйзенштейна". [16+]
1.40 ПОДКАСТ.ЛАБ "Легкие деньги".
2.25 ПОДКАСТ.ЛАБ "Триггеры". [16+]
3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "20 лет спустя".
3.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Театральный подкаст". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 9.30 Утро России.
9.00, 14.30, 21.05 Вести. Местное время.
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Наши". [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Свет в окне". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия". [16+]
3.45 Т/с "Версия". [16+]
4.35 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Курай даны". [12+]**
**10.15 "История одного села". [12+]**
**10.30 "Дорога к храму". [6+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 13.45, 16.15, 17.00 Интервью. [12+]**
**12.00 Историческая среда. [12+]**
**12.30, 3.15 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.00 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Сулпылар. [6+]**
**15.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**16.00 Дознание. [16+]**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.15 История признания. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Башкорттар. [6+]**
**19.00, 20.30, 4.15, 5.15 Телецентр. [12+]**
**19.45 Мама. [12+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.30 Спектакль "Выходили бабки замуж". [12+]**

### 17 МАЯ
### ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 Премьера. "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.55 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
15.10 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Х/ф Премьера. "Страсти по Матвею". [16+]
0.00 ПОДКАСТ.ЛАБ "Собрались с мыслями". [16+]
0.45 ПОДКАСТ.ЛАБ "Не лыком шиты". [16+]
1.30 ПОДКАСТ.ЛАБ "20 лет спустя".
2.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Фокусы". [16+]
3.00 ПОДКАСТ.ЛАБ "Летописи конца времен". [16+]
3.45 ПОДКАСТ.ЛАБ "Триггеры". [16+]
4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ "Произвольная программа". [16+]
4.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Кот Шрёдингера". [16+]
5.30 ПОДКАСТ.ЛАБ "Легкие деньги".

### РОССИЯ 1

5.00, 9.30 Утро России.
9.00, 14.30, 21.15 Вести. Местное время.
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
16.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Удивительные люди. Новый сезон". Финал. [12+]
0.20 Х/ф "Там, где нас нет". [12+]
4.05 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.00 "Йома". [6+]**
**10.30, 5.45 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.00 Атлас Баженова: Башкортостан.**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00, 22.15 Интервью. [12+]**
**12.15, 5.00 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 17.00 Территория женского счастья. [12+]**
**14.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Детей много не бывает. [6+]**
**15.45 "Семәр". [6+]**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**18.30, 22.30, 4.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.30 "Ете егет". [12+]**
**21.15 Дела и люди. [12+]**
**22.00 Своих не бросаем. [12+]**
**23.00 "Башкорт йыры-2024". [12+]**
**23.45 Концерт Рамиля Гайзуллина. [12+]**
**1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Шауракай". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

### 18 МАЯ
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "Наше всё". [12+]
11.05 Премьера. "ПроУют". [0+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Премьера. "Поехали!". [12+]
13.10 Д/ф "Прерванный полет Гарри Пауэрса". [16+]
15.00 Д/ф "Мариуполь. Возвращение домой". [16+]
16.50 Премьера. "Я люблю мою страну". [0+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Х/ф "Страсти по Матвею". [16+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
23.00 Х/ф Премьера. "Анатомия падения". Золотая пальмовая ветвь-2023 и премия "Оскар-2024" за лучший сценарий. [18+]
1.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Психика". [16+]
2.40 ПОДКАСТ.ЛАБ "Легкие деньги".
3.25 ПОДКАСТ.ЛАБ "Свидетели Эйзенштейна". [16+]
4.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Театральный подкаст". [16+]
4.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Антропология".
5.30 ПОДКАСТ.ЛАБ "Мелодии моей жизни". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Вести. Местное время.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.50 "В кругу друзей".
12.50 "Доктор Мясников". [12+]
14.50 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Весна запоздалая". [16+]
0.35 Х/ф "Любовь под микроскопом".
4.05 Х/ф "Красотка". [12+]
5.49 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Курай даны". [12+]**
**8.00, 4.15 "Бай". [12+]**
**8.30 "Ете егет". [12+]**
**9.15, 19.00 Письма солдатам. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**9.45 Своих не бросаем. [12+]**
**10.00 Лит-ра. [6+]**
**10.30 Елкән. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 "Ат уйнатып. Битва командиров".**
**11.45 Апчхи. [6+]**
**12.00 Сулпылар. Финалисты-2023. [6+]**
**12.30 Кустәнәс. Ильгиз Тагиров. [12+]**
**13.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**13.30 Башкорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00, 3.15 Колесо времени. [12+]**
**17.00, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.15 Концерт Государственного академического симфонического оркестра РБ. [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.30 "Байык-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00, 5.30 Республика LIVE #дома.**
**22.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.45 "Курай-шоу". [12+]**
**0.15 Спектакль "Долгое, долгое детство". [12+]**
**2.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**5.15, 6.00 История одного села. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

### 19 МАЯ
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10, 2.00 ПОДКАСТ.ЛАБ "Не лыком шиты". [16+]
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.15 Премьера. "Играем свадьбу!". [12+]
11.05 "Жизнь других". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Премьера. "Повара на колесах".
13.10 "Видели видео?" [0+]
14.50 Д/ф Премьера. "Телевидение изнутри". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Три аккорда". Новый сезон.
21.00 "Время".
23.00 Д/ф "Мариуполь. Возвращение домой". [16+]
0.30 ПОДКАСТ.ЛАБ "Гори огнем!"
1.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Жизнь замечательных". [16+]
2.45 ПОДКАСТ.ЛАБ "Обман веществ".
3.30 ПОДКАСТ.ЛАБ "Произвольная программа". [16+]
4.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Триггеры". [16+]

### РОССИЯ 1

6.10, 1.05 Х/ф "Мамина любовь". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
12.00 Большие перемены.
13.00 Х/ф "Не твоё дело". [12+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.47 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Йома". [6+]**
**8.15 Тормош. [12+]**
**8.45 "Курай даны". [12+]**
**9.00 Орнамент. [12+]**
**9.15 "Мама". [12+]**
**9.30 Новости СВО (на баш. яз). [12+]**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Книга сказок. [6+]**
**10.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Сулпылар-2024. [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**13.15 "Ете егет". [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.15, 5.45 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**15.30, 3.15 Дорога к храму. [6+]**
**16.00 Честно говоря. [12+]**
**16.45 Открытый республиканский фестиваль-конкурс народно-патриотического творчества "Золотой кубок Башкирии". [12+]**
**19.00 Патриот РФ. [12+]**
**19.15 Әлләсе... [6+]**
**20.00 Автограф. [12+]**
**20.30 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30, 3.45 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15, 2.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 "Мои песни остаются с вами..." Концерт памяти Гильмана Идрисова. [12+]**
**0.30 Спектакль "Дачники". [12+]**
**2.30, 5.30 История одного села. [12+]**
**4.30 Счастливый час. [12+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1445 һижри йыл.*

| Май (Шәүүәл - Зөлҡәғизә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 13 (5) дүшәмбе | 2:58 | 5:15 | 13:30 | 18:37 | 21:11 | 23:28 |
| 14 (6) шишәмбе | 2:57 | 5:13 | 13:30 | 18:38 | 21:12 | 23:29 |
| 15 (7) шаршамбы | 2:56 | 5:11 | 13:30 | 18:39 | 21:14 | 23:30 |
| 16 (8) кесе йома | 2:55 | 5:09 | 13:30 | 18:40 | 21:16 | 23:31 |
| 17 (9) йома | 2:54 | 5:08 | 13:30 | 18:41 | 21:17 | 23:32 |
| 18 (10) шәмбе | 2:53 | 5:06 | 13:30 | 18:42 | 21:19 | 23:33 |
| 19 (11) йәкшәмбе | 2:52 | 5:05 | 13:30 | 18:43 | 21:21 | 23:34 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 9 МАЙ - ЕҢЕҮ КӨНӨ

**СССР Юғары Советы Президиумы 9 майҙа Еңеү көнөн байрам итеү тураһында 1945 йылдың 8 майында Указ сығара. Был көн - ял көнө итеп иғлан ителә.**

9 май иртәһендә Юғары Главнокомандующийҙың бойороғо 369-сы һаны аҫтында сыға. Унда былай тип яҙылған: "1945 йылдың 8 майында Германия юғары командованиеһы вәкилдәре Берлинда Германия ҡораллы көстәренең бер һүҙһеҙ капитуляция яһауы тураһында актка ҡул ҡуйҙы.

Совет халҡы немец-фашистик илбаҫарҙарына ҡаршы алып барған Бөйөк Ватан һуғышы еңеү менән тамамланды, Германия тулыһынса тар-мар ителде.

Иптәш ҡыҙылармеецтар, ҡыҙылфлотсылар, сержанттар, старшиналар, армия һәм флот офицерҙары, генералдар, адмиралдар һәм маршалдар, һеҙҙе Бөйөк Ватан һуғышы еңеү менән тамамланыуы айҡанлы ҡотлайым.

Германияны тулыһынса еңеү хөрмәтенә бөгөн, 9 майҙа, Еңеү көнөндә, Ватаныбыҙҙың баш ҡалаһы Мәскәү сәғәт киске унда Ватан исеменән ошо иҫ киткес еңеүҙе яулаған Ҡыҙыл Армияның ҡаһарман ғәскәрҙәренә, Хәрби-Диңгеҙ Флоты караптарына һәм частарына меңәрләгән ҡоралдан утыҙ артиллерия залпы менән салют бирә.

Ватаныбыҙҙың азатлығы һәм бойондороҡһоҙлоғо өсөн алыштарҙа һәләк булған геройҙарға мәңгелек дан!

Еңеү яулаған Ҡыҙыл Армия һәм Хәрби-Диңгеҙ Флоты йәшәһен!

Юғары Главнокомандующий Советтар Союзы Маршалы И. Сталин.

9 май 1945 йыл".

Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙе яҡынайтыу өсөн Башҡортостан халҡы ла күп көс һала. Гәзитебеҙ битендә яҡташтарыбыҙҙың ҡаһарманлығы тураһында даими хәтерләп, яҙып торабыҙ. Белеүегеҙсә, һуғыштың тәүге айҙарынан уҡ күп яҙыусылар - Х. Кәрим, А. Карнай, С. Мифтахов, М. Харис, М. Хәй, Х. Ҡунаҡбай, Б. Дим, М. Абдуллин, Ғ. Йосопов, Ғ. Ибраһимов, Н. Нәжми, Ғ. Рамазанов, К. Мәргән, Ҡ. Даян, И. Абдуллин, Я. Ҡолмой, Ә. Чаныш - илленән ашыу кеше фронтҡа китә. Яҙыусыларҙың Ватанды һаҡлауҙа беренсе рәттәрҙә булыу теләге, батырлыҡтары, йөнтәнен аямауҙары уларҙың хаттарында, әҫәрҙәрендә, очерктарында, көндәлектәрендә сағылыш тапҡан. Дәһшәтле һуғыш башҡорт ижадсыларын да аямай: араларында яу ҡырында мәңгелек йоҡоға талғандары байтаҡ. Киләсәк быуындарға аяҙ күк йөҙө, тыныслыҡ һәм азатлыҡ бүләк иткән, үлемһеҙ әҫәрҙәре менән башҡорт әҙәбиәтен байытҡан әҙиптәребеҙ исемен башваҡыста ла табырһығыҙ.




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**17-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ҡудаш. Ҡарабах. Агава. Баҡта. Һөлгө. Литва. Биишева. Түмһә. Майлут. Боинг. Хан. Остаз. Гимн. Ерек. Тоҡол. Ватан. Ҡура. Ашамлыҡ. Ҡором. Мексика. Спиноза.

**Вертикаль буйынса:** Бикбаев. Бриллиант. Ел. Гиена. Ҡорот. Шаммас. Алама. Ҡарға. Хаким. Ләйсән. Акваланг. Уҡа. Шахта. Ата. Һөт. Нотаҡ. Үңәс. Һаба. Өшә. Золом.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**13 май "Килен"** (З. Мусина) драмаһы менән *Бөрйән районы мәҙәниәт йорто сәхнәһендә.* 16+



**15 май "Ҡыҙ урлау"** (М. Кәрим), музыкаль комедия. 12+
**16 май "Ҡыҙыл паша"** (Н. Асанбаев). 12+
**17 май "Внутри меня цунами"** үҫмерҙәр тарихы. 11.00 12+
**"Кулагер"** (И. Джансугуров), *Ғ. Мусирәпов исемендәге Ҡаҙаҡ дәүләт академия балалар һәм үҫмерҙәр театры.* 12+
**18 май "Кукушкины слезы"** (М. Юхма, М. Башкиров), *М. Сеспель исемендәге Сыуаш дәүләт йәш тамашасылар театры.* 18.00 12+
**19 май "Морфий"** (М. Булгаков, А. Федоров), *Пушкин исемендәге Псков академия драма театры.* 18.00 18+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**15 май "Беҙҙең өйҙөң йәме"** (М. Кәрим), хәтирәләр. 15.00 12+
**17 май "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажаралар. 10.00, 12.00 0+
**"Дом Бернарды Альбы"** (Ф. Лорка), В. Кокоола исемендәге Тыва милли музыкаль-драма театры. 15.00 16+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**16 май "Кукольная кухня"** (Н. Беззубова, А. Верхоземский). 18.00 0+
**17 май "Коза-дереза"** (М. Супонин). 18.00 0+
**18 май "Волшебник изумрудного города"** (А. Волков). 12.00, 15.00 6+
**19 май "Приключения доктора Айболита и его друзей"** (Д. Гараева). 12.00, 15.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**13 май "Яҙғы мозаика"** концерт. 6+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**16 май "Ярлыҡау"** (М. Кәрим, И. Ҡаҙаҡбаев инсц.), баллада. 13.00, 19.00 12+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**"Фронтовичка"** (А. Батурина), драмаһы менән **13 май** - Өфө ҡалаһы М. Кәрим ис. МЙТ, Туймазы районы буйлап: **14 май** - Ҡандра "Юбилей" мәҙәниәт һәм спорт һарайы, **15 май** - "Родина" мәҙәниәт йорто, **16 май** - Собханғол ауылында гастролдәрҙә. 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**16 май Премьера! "Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т. Миңнуллин), комедия. 12+

## БР Милли музейы

**14 май "Урал һәм Шүлгән"** командалы интеллектуаль уйын. 12+
**16 май "Йәш археолог курсы"** сара. 14.00 6+

*БАЙМАҠ МӘҘӘКТӘРЕ*

**Башҡаларҙан холоҡ-фиғеле менән айырылған, үҙ шәхесенә ҡыҙыҡһыныу тыуҙырған, үҙенсәлеклеге менән ылыҡтырған, йәшәү дәрте менән һоҡландырған, тәбиғәте менән сәйерҙәрҙе "ҡыҙыҡ кеше" тиҙәр беҙҙең яҡта. Баймаҡ районының Яңғаҙы ауылынан Трудасимов ағайҙы белмәгән, уның тураһында ишетмәгән, уны иҫкә алғанда, ихлас йылмаймаған кеше юҡтыр. Трудасимов ағай - Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, алсаҡлығы, тәҡүәлеге, мәрәкәселлеге менән яҡташтары араһында хөрмәт яулаған шәхес булды.**

# ФАШИСТЫ ТИПКЕЛӘП ЙӨРӨТКӘН...

Төрлө йыйын-ҡунаҡтарҙа һуғыш ветераны булған был ағай яуҙа күргән-ишеткәндәре, мажаралары тураһында мәҙәк итеп һөйләр булған. Тәбиғәттән һүҙгә маһирлығы, үҙен дә, кешене лә ышандырырлыҡ итеп хисләнеп бәйән итеүе, шыттырыуҙары, уйҙырмалары тыңлаусыларҙа ҡыҙыҡһыныу тыуҙырған. Ул һөйләгән мәҙәктәр ауыҙҙан-ауыҙға йөғөп, ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа яғылып, сағыу тел мираҫы булып һаҡлана.

Һөйләүҙәре буйынса, ул дөйөм йыйылыу пунктында командаларға тәғәйенләп, обмундирование алғанда уҡ үҙенең талапсан, төпсөн, хужасыл булыуын күрһәткән. Ғүмерендә яҡшы кейемгә, бигерәк тә аяҡ кейеменә йәлсемәгән кеше, ике пар итек алам, тип ғауға ҡуптарған, тиҙәр. Шулай булмай, оҙон юлда туҙһа, яңыһын ҡайҙан алһын!

- Һуғыш башланған йылы булды иң ҡыйыны, - тип һөйләгән Трудасимов ағай, - бер ауыл янында оборона тоторға бойороп киттеләр. Тотабыҙ уны, ниңә тотмаҫҡа, ти. Әйҙә, килеп ҡараһын немес, күрмәгәнен күрер, тип эшкә керештек. Окоптар ҡаҙып, блиндаждар төҙөп, ашарға ғына ултырғайныҡ, башланды бит мәшхәр. Баш күтәрергә лә әмәл юҡ. Үҙебеҙ өсөн тырышып, йәтешләп эшләгән урынды ташлап, сигенергә тура килде. Исмаһам, бер көн йоҡлап булманы шунда. Яңынан барып урынлашҡан ерҙә шул уҡ хәл. Был ни ғәләмәт? Беҙ ыҙалап төҙөйбөҙ, немес килә лә, бәрәстәрҙе ҡыуған кеүек баҫтырып сығара ла ебәрә. Беҙ әллә уларға ялланғанбыҙ инде. Эй, йән көйә. Мәскәүгә яҡынлашҡан һайын ер ҡаҙыу эштәре байтаҡ ауырайҙы, буйтым ялҡытты. Иркенләп ҡаҙыу түгел, тупраҡ ташларға урын юҡ: таш та асфальт, тимер ҙә бетон. Бигерәк ҡыҫтау ерҙәре. Ҡайҙа малдарын көтәләр ҙә, ҡайҙа һабантуйҙарын үткәрәләр икән? Егеттәр менән "Әйҙә, беҙ ҙә әҙер окоптарына баҫып инеп, рәхәтләнеп йәшәп алайыҡ", тип һөйләштек тә, неместе кире ҡыуырға булдыҡ. Бөтәбеҙ бер һүҙле булғас, эштәр яйға китте.

Бер тапҡыр уларҙы һыу эскеһеҙ итеп туҡмап алғайныҡ, мөгөҙөнән тотоп бырагтырылған колхоздың племенной үгеҙе һымаҡ булдылар. Окопҡа ырғып төшһәм, мылтығын миңә тоҫҡап, бер ҡараҫҡы тора. Эх, йән көйөгө! Мин ҡаҙған окоптарҙа рәхәтләнеп йәшәп килде лә, хәҙер ишшү миңә мылтыҡ тоҫҡап тора, ҡороғор. Шул тиклем йәнем көйҙө,



мылтығымдан атырға ла онотоп, күҫәк менән һуҡҡан кеүек тондорҙом. Мылтығы бер яҡҡа, үҙе бер яҡҡа осто теге хөрәсән. Ятҡан еренән ҡулдарын күтәреп "Трудас! Трудас!" тип ҡысҡырмаһынмы. "Ә-ә-ә, Трудас ағайыңды яңы танынынмы?" тип, елкәһенән эләктереп торғоҙҙом да, артына тибеп ебәрҙем. Осаһын ыуа-ыуа иланы, бахыр. Башҡалары ла илай-илай ҡулдарын күтәрҙе, сразы танынылар. "Айһай, ажар егет икәнһең", тип үҙебеҙҙекеләр ҡулымды ҡыҫты. Аръяғына ҡыйын булманы. Һөжүмгә күтәрелһәк: "Трудас, Трудас! Гитлер капут! - тип, ҡоралдарын ташлай ҙа, мин типмәһен, тип, лыпын ултыра ла ҡуя торғайнылар.

Бер тапҡыр шулай окоптағыларын пыран-заран килтереп борҡотоп сығарғас, блиндажға барып индем. Өҫтәл артында колхозыбыҙҙың өйөр айғыры һымаҡ мыҡты, тос кәүҙәле күҙе аларған берәү ултыра. "Һин дә, хох!" тигәйнем, теге ялтарып ҡасып бара. Әх, суҡынғыры, ағайыңды танымаһаң әле, тип, арт һанына эләктерҙем. Аҡырып илап, бер ишеккә инеп китмәһенме. Минең өйҙәй тимер шкаф икән. Көргөп-көргөп сығара алманыҡ. Эстән бикләнде лә ҡуйҙы, ҡәһәрең. Оҙаҡ уйлап тормай, шкафы-ние менән машинаға тейәп, Сталинға ебәрҙек. Үҙе һөйләшһен генералдары менән, ә һалдаттарын үҙебеҙ тәрбиәләрбеҙ. Аҙаҡтан миҙал биргәндә командир һөйләне. Сталин генералдан: "Нишләп шкафҡа йәшерендең?"- тип һораған. "Эй, Трудас ныҡ тибә бит", - тип яуаплаған ул.

Мәрәкәне аңламаған бер аҡыллы баш Трудасимов ағайҙы фашларға булған икән. Йәнәһе, ниместәр "Трудас!" тип ҡысҡырмаған, ә үҙҙәрен ябай кеше "Трудящийся из рабочих" икәнен белдереү маҡсатында, телгә ыраҡлаштырып, "Труд аус", тип ҡысҡырғандар, йәнәһе. Трудас ағай ҙа, уны белгән яҡташтары ла ул аҡыллы башҡа ышанмаған. Эйе, ниңә йоморҡанан йөй эҙләргә? Ҡыйыулыҡҡа, саялыҡҡа бер ниндәй ҙә дәлил кәрәкмәй. "Трудас!" тип, аялауҙы, ярлыҡауҙы һорап ҡысҡырған баҫҡынсы дошман ябай башҡорт һалдатынан. Был - мәслихәт!

Эскерһеҙ шаян ағай әҙерәк "һелтәп" алһа, "Ул әтрәгәләмдәрҙе өйөрө менән окоп буйлап типкеләп алып йөрөй торғайным", тип һөйләр булған. Ихлас күңелле кеше нимә һөйләһә лә, башҡалар уны иғтибар менән тыңлап, хәйләһеҙ, мәкерһеҙ хәбәрен күңеленә яҡын ала, зыян күтмәй. Ундайҙарҙы бер ҡатлы, еңел холоҡло тип уйлаусылар ҙа табыла. Әммә, асылда, был ысынбарлыҡҡа тап килмәй. Күңел дәртен ҡыҙғанмайынса башҡаларға өләшеүсе үҙенә кешеләрҙе ылыҡтыра. Кешенең яҡшылығы кеше араһында йәшәй, аламалығы үҙе менән ерләнә.

Таш күңеллеләрҙән таш йылғалар ғына ҡалыр, тигәндәй, эскерһеҙ, йәнендә үҙе өсөн генә түгел, башҡаларға өләшерҙәй дәрте булған хикмәтле кеше, халыҡ иҫендә "ҡыҙыҡ кеше" булып, яҡты хәтер ҡалдырыуы бер ҙә ғәжәп түгел.

**Урал МОСТАФИН.**

*ТЕЛҺӨЙӘР*

## САҒЫМ, МОНАР, МИРАЖ...

**Сабур.** Был үҫемлек халыҡ медицинаһында күп сырхауға ҡаршы ҡулланылған. Өйҙәрендә сабур үҫтереүсе һәр кешегә уның төрлө файҙаһы ысынлап та яҡшы билдәле. Алоэ үҫемлеге телебеҙҙә шулай тип тә аталып йөрөтөлә. *Сабур төнәтмәһе. Ер йөҙөндә сабурҙың биш йөҙләп төрө бар.*

**Сағауын. 1.** Диалектта - бал ҡорто тигәнде аңлата. *Сәскәләренән бал яуған йүкәлектә сағауындар гөжләй. Сағауын күс айыра.* **2.** "Сағауындың" тағы бер мәғәнәһе - иңкеш. *Ҡыйыҡ аҫтында сағауын ояһы бар.*

**Сағра.** "Сағра" тигәндә, тау-урманлы үткеһеҙ урындар күҙҙә тотола. *Сағраларҙа һирәк үҫемлектәр юғалыуҙан һаҡланып ҡалыусан.*

**Сабыуыл.** Атлылар һөжүмен хәрбиҙәр тап шулай, "сабыуыл" тип атай. *Сабыуыл алдынан аттарҙы ял иттереү. Башҡорт дивизияһы яугирҙары дошманға көслө сабыуыл яһаған.*

**Сағым.** "Сағым" - "Монар" тигән һүҙҙең синонимы. *Баҫыуҙар сағымдан зыян күрмәһен ине.* Ә инде "сағым"дың тағы ла бер мәғәнәһе "мираж" һүҙе менән белдерелә. Миҫал: *Сүллектә сәйәхәтселәр алдында сағым хасил булған. Сағымда - мул һыулы күл күренеше.*

**Шулай итеп, телебеҙҙе байытыуҙа сағауындай тырыш һәм ныҡыш булайыҡ.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**
**(Дауамы. Башы 45-се һанда).**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ЮҒАРЫ ОСҠАН...

### түбән ҡуныр

Ирҙең нәфсеһе - бер, ҡатындың нәфсеһе - туғыҙ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Батырлыҡтың шундай ҡапма-ҡаршы яҡтары ла бар: ғүмереңде лә бирергә ризаһың, шул уҡ ваҡытта йәшәү теләгең дә бик көслө.

**(Гилберт Честертон).**

Тормошто тормоштоң үҙенән түгел, китаптарҙан һәм сәнғәт әҫәрҙәренән ныҕыраҡ тоябыҙ.

**(Теодор Драйҙер).**

Теләһә кем ғүмеребеҙҙе өҙөргә мөмкин, әммә берәү ҙә үлемдән арындыра алмай.

**(Луций Сенека).**

Үлем нимә икәнен беҙ ҡайҙан беләйек, тормоштоң ни икәнен дә белеп булмай бит әле.

**(Конфуций).**

Бөтә кеше лә үҙе тураһында юғары фекерҙә, фекере ни тиклем юғарыраҡ булған һайын, үҙе түбәнерәк төшә бара.

**(Бальтасар Грасиан).**

Сенаторҙарға алдан әҙерләп ҡуйған ҡағыҙҙарҙан уҡып һөйләргә түгел, ә үҙ һүҙҙәре менән аңлатырға ҡушам. Һәр береһенең ахмаҡлығын күрер өсөн.

**(Петр I).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер малай йәшәгән. Уның бик хәтәр бер "сире" булған: теле бер туҡтауһыҙ, сама белмәй, һөйләнгән дә һөйләнгән. "Был ниндәй яза булды әле беҙгә? Ҡасан тынысланыр һәм беҙгә ял бирер был тел?" - тип зар түккән тештәр. "Һеҙҙең миндә ни эшегеҙ бар? - тип ярһыған тел. - Сәйнәүегеҙҙе белегеҙ ҙә, тынығыҙ. Минең һеҙҙең менән бер уртаҡлығым да юҡ. Берәүегеҙгә лә минең эшкә ҡыҫылырға, етмәһә, ахмаҡ кәңәштәрегеҙ менән тығылырға юл ҡуймам!" Шулай итеп, малай урынлыға ла, урынһыҙға ла гәп һатҡан. Ә тел, мәғәнәһенә үҙе лә төшөнмәҫтән, туҡтауһыҙ матур-матур һүҙҙәр сәсеүенән кинәнгән. Бер ваҡыт малай һүҙ һөйләү менән шул тиклем мауығып киткән, хатта ниҙелер яңылыш әйтеп, ауыр хәлгә ҡалғанын да аңламай ҡалған. Бәләнән ҡотолоу өсөн ул теленә күрәләтә ялған һүҙ әйтергә юл ҡуйған. Шул саҡта тештәрҙең дә түҙемлеге шартлаған һәм улар телде шул тиклем ныҡ итеп ҡыҫып алған, тел хатта ҡанап киткән. Теле ауыртыуҙан да, оялышынан да илап ебәргән малай. Бына шунан алып тел үҙен бик һаҡ тота башлаған, малай ҙа ниндәйҙер һүҙ әйтер алдынан ике тапҡыр уйлап ала торған булған..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 24018

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "Полиграфия" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (3476) 35-31-02. (453261, БР, Салауат ҡалаһы, Ленин ур., 5/11).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
7 май 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2750
Заказ - 111832